# БАШКИРСКО - РУССКИЙ, РУССКО - БАШКИРСКИЙ ТЕРМИНОЛОГИЧЕСКИЙ СЛОВАРЬ ПО ЖИВОТНОВОДСТВУ



Бөйөк Ватан һуғышында Днепр буйында барған дәһшәтле алышта ун һигеҙ йәшендә генә батырҙарса һәләк булған ҡәҙерле ағайыма – **Рәфхәт Динмөхәмәт улы Хафизовҡа** бағышлайым

*Автор*

РӘСӘЙ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
ӨФӨ ҒИЛМИ ҮҘӘГЕ
ТАРИХ, ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ

*Г. Д. Зәйнуллина*

# БАШҠОРТСА - УРЫҪСА, УРЫҪСА - БАШҠОРТСА МАЛСЫЛЫҠ ТЕРМИНДАРЫ ҺҮҘЛЕГЕ

КИТАП
Өфө • 2006

РОССИЙСКАЯ АКАДЕМИЯ НАУК
УФИМСКИЙ НАУЧНЫЙ ЦЕНТР
ИНСТИТУТ ИСТОРИИ, ЯЗЫКА И ЛИТЕРАТУРЫ

*Г. Д. Зайнуллина*

# БАШКИРСКО-РУССКИЙ, РУССКО-БАШКИРСКИЙ ТЕРМИНОЛОГИЧЕСКИЙ СЛОВАРЬ ПО ЖИВОТНОВОДСТВУ

КИТАП
Уфа • 2006

УДК 636 (038)=161.1=512.141
ББК 45/46 (2 Рос=Баш)
З-95

**Ответственный редактор**
академик АН РБ *З. Г. Ураксин*

**Рецензенты:**
доктор филологических наук *Э. Ф. Ишбердин*,
кандидат филологических наук *Ш. В. Нафиков*

**Зәйнуллина Г. Д.**
З-95 Башкирско-русский, русско-башкирский терминологический словарь по животноводству. – Уфа: Китап, 2006. – 168 с.

ISBN 5-295-03928-5

В предлагаемый словарь включено более двух тысяч наиболее употребительных слов и словосочетаний, составляющих основу животноводческой лексики башкирского языка. Все слова даны в переводе на башкирский или русский языки.

Словарь предназначен для преподавателей, студентов, учащихся техникумов и вузов, переводчиков и широкого круга читателей, интересующихся материальной культурой башкирского народа.

УДК 636 (038)=161.1=512.141
ПЯ – 2006 ББК 45/46 (2 Рос=Баш)

ISBN 5-295-03928-5
© Г. Д. Зәйнуллина, 2006

## БАШ ҺҮҘ

Башҡорттар борон замандарҙан бирле малсылыҡ менән шөғөлләнгән. Улар йылҡы малы, һыйыр, һарыҡ, кәзә аҫрағандар, ә көньяҡ һәм көнсығыш төбәктәрҙә дөйә тотҡандар. Башҡорт халҡы тураһында күп яҡлы тикшеренеүҙәр алып барған И. Георги үҙенең юлъяҙмаларында ошондай тарихи мәғлүмәт теркәп ҡалдырған: «Йылҡы малын 30–50 баш тотҡаны һирәк, уларҙың күбеһе 500-ләп ат аҫрай, байыраҡтары иһә 1000-ләгән баш, ҡайһылары 2 000-дән ашыу йылҡы тота. Мөгөҙлө эре малды күбеһенсә байҙар аҫрай». (Георги И. Описание всех обитающих в Российском государстве народов. Ч. I. Спб., 1799, с. 98.)

Икенсе ғалим – ауыл хужалығы белгесе А. М. Байков үҙенең ғилми тикшеренеүҙәрендә ошондай һандар килтерә: «XIX быуат башында Өфө губернаһында 552,7 мең баш йылҡы малы, 302,9 мең мөгөҙлө эре мал аҫралған» (Байков А. М. Развитие скотоводства в Башкирии. Уфа. 1967, с. 13).

Крәҫтиән реформаһы һәм кантонлыҡ системаһының бөтөрөлөүе башҡорт ерҙәренең кәмеүенә сәбәп була, ә был хәл, үҙ нәүбәтендә, традицион хужалыҡ тармағының иҡтисади нигеҙен ҡаҡшата. XIX быуат башында башҡорттар 11,5 млн дисәтинә ер биләһәләр, 1890 йыл улар ҡулында ни бары 1,5 млн дисәтинә ер ҡала. Был күренеш, һис шикһеҙ, малдарҙың кәмеүенә алып килә.

Империалистик һәм граждандар һуғышы Башҡортостандың ауыл хужалығына бик ҙур матди зыян килтерә.

Граждандар һуғышынан һуң аслыҡ йылдары һөҙөмтәһендә 82,9 мең крәҫтиән хужалығы юҡҡа сыға, эш аттары – 53 процентҡа, һыйырҙар – 37,6 процентҡа, һарыҡтар – 59,5 процентҡа кәмей. Сәсеү майҙаны 917,3 мең дисәтинәгә (51,6 процентҡа) аҙая.

Коллективлаштырыу осоронда (1920 йылдар аҙағы – 1930 йылдар башы) илдә шулай уҡ бик ҙур үҙгәрештәр була.

Башҡортостанда төрлө сәбәптәр арҡаһында ҡаршылыҡтар килеп тыуа. Ауыл халҡы араһындағы ризаһыҙлыҡ күпләп мал һуйыуға алып килә. Шул сәбәптән 1930 йылдың март уртаһында дөйөм мал-тыуар һаны 38 процентҡа кәмей.

Башҡортостан халыҡтары өсөн иң ауыр һынауҙарҙың береһе булып Бөйөк Ватан һуғышы иҫәпләнә. Республика һуғыш йылдарында фронтты яугирҙар, ҡорал, яғыулыҡ һәм аҙыҡ-түлек менән тәьмин итте. Мәҫәлән, Башҡортостан 1944 йылдың аҙағына тиклем фронтҡа 559,6 мең яугир, 5 меңдән ашыу автомобиль, 750 трактор, 71 мең баш ат һ. б. ебәрҙе.

Әлеге ваҡытта Башҡортостанда традицион хужалыҡты үҫтереү өсөн барлыҡ мөмкинлектәр етерлек: мал аҙығы культуралары сәсеү өсөн генә 1,4–1,5 млн га ер файҙаланыла. Унда малсылыҡ өсөн кәрәк аҙыҡтың 70–75 проценты үҫтерелә. Тәбиғи сабынлыҡтар 665 мең га, көтөүлектәр 1,8 млн га майҙанды биләй. Статистика буйынса дәүләт комитеты мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Республика хужалыҡтарында 1792,2 мең баш һыйыр, 153,2 мең ат, 677,3 мең һарыҡ, 586,9 мең сусҡа аҫрала, 13018,4 мең баш ҡош-ҡорт үрсетелә.

Мәғлүм булыуынса, йылҡысылыҡ ауыл хужалығының мөһим бер тармағы. Башҡортостанда дүрт төрлө йылҡы тоҡомо үрсетелә: башҡорт аты, урыҫ аты, Орлов юртаҡтары, урыҫ ауыр йөк аттары һәм саф менге аттар. Әммә башҡорт аттары ит-һөт һәм эш малы булараҡ заман талаптарын тулыраҡ ҡәнәғәтләндерә. Ошоларҙы күҙ уңында тотоп, Республикала продуктив, шулай уҡ спорт йылҡысылығына иғтибар арта төштө. Президентыбыҙҙың 2001 йылдың ғинуарында «Йылҡысылыҡ тураһында» тигән Башҡортостан Республикаһы Законына ҡул ҡуйыуы һәм «2001–2005 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһында йылҡысылыҡты үҫтереү тураһында» исемле ҡарарҙың Республика Министрҙар кабинеты тарафынан ҡабул ителеүе малсылыҡтың был өлкәләге үҫешен тағы ла йәнләндереп ебәрҙе. Йылҡысылыҡҡа ҡарата булған оло хәстәрлек аттарҙың һаны буйынса ла, уларҙы файҙаланыу йәһәтенән дә Рәсәйҙә алдынғы урындарҙы биләргә мөмкинлек бирҙе. Бөгөнгө көндә Республикала 160 мең баш самаһы йылҡы малы иҫәпләнә. Йылҡысылыҡ ныҡ үҫешкән төбәктәр ҙә был йәһәттән беҙҙән ҡалыша. Мәҫәлән, Саха-Якут республикаһында – 120, 9 мең, Алтай крайында – 108,5 мең, Татарстанда – 67,2 мең, Ырымбур өлкәһендә 51,9 мең баш ат иҫәпләнә.

Тарихи ҡомарткылар, лингвистик күҙәтеүҙәр, археологик тикшеренеүҙәр ата-бабаларыбыҙҙың борондан малсы-

лыҡ, һунарсылыҡ һәм башҡа кәсептәр менән шөғөлләнеүен, шулай уҡ уларҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, донъяға ҡарашын күҙалларға булышлыҡ итә.

Халыҡ ижадында, мәҫәлән, «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» ҡобайырҙарында быуаттар буйы малсылыҡ, һунарсылыҡ менән көн иткән халҡыбыҙҙың тотемистик ҡараштары, мал культы асыҡ сағылған. Был ҡомартҡыларҙың төп геройы булып ат образы тора.

Миҫалға «Урал батыр» эпосында сағылдырылған Аҡбуҙат образын алайыҡ. Халыҡ ижадында дан йырлаған Аҡбуҙат бына нисек итеп тәфсилләп тасуирланған: «*Һыртына эйәр һалынған, ти, Эйәренең башына Алмас ҡылыс тағылған, Эйәренең ҡашы алтын, Йүгәненең башы алтын; Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған, Ялын ҡыҙҙай тараған; Башкүнәктәй танаулы, Һарымһаҡтай аҫаулы; Ҡарсыға түш, тар бөйөр, Еңел текә тояҡлы; Ҡуян күҙле, баҡыр күҙ, Ҡыҫыр йылан тамаҡлы; Урайы ҡуш, Яңағы ас, Муйындары бер ҡолас, Ҡыйғыр бөркөт ҡабаҡлы... Бына ошолай Аҡбуҙ ул, Күҙ күрмәгән ят буҙ ул*» («Урал батыр» эпосынан).

Билдәле булыуынса, аттың кешеләр тормошонда тотҡан урыны ифрат ҙур, шуға күрә был образды культ дәрәжәһенә күтәрмәгән бер генә лә халыҡ юҡ. Бигерәк тә башҡорт халҡының тарихы ат менән тығыҙ бәйле, сөнки ул кешеләрҙе туйындырған да, кейендергән дә, дауалаған да һәм кәрәк мәлдә тоғро дуҫ та булған. Аттарға ҡарата иғтибарлы, ихтирамлы мөнәсәбәт быуаттар төпкөлөнә барып тоташа. Башҡорттарҙың йылҡы малын изгеләштереүен хәҙерге көндә лә күҙәтергә мөмкин. Әүәлге кешеләр, ат, изге йән булараҡ, үҙенең саҡма тояҡтары менән уҫал рухтарҙы, ен-пәрейҙәрҙе ҡыуып ебәрә, тип инанғандар. Хәҙерге көнгә тиклем һаҡланған ҡайһы бер йолалар, әйтәйек, ҡапҡа баштарына, умарталыҡтарға *ҡыу ат* башын элеп ҡуйыу, тупһаға, бағанаға *даға ҡағыу* һымаҡ күренештәр үрҙә әйтелгән фекерҙе ҡеүәтләй. Башҡорт телендә *ҡыу баш* атамаһы ике мәғәнәлә ҡулланыла. Беренсеһе – йылҡы малының кипкән баш һөйәге. Мәҫәлән: *Йылҡы малы күпләп ауырыһа, оҙаҡ ваҡыт ямғыр яумаһа, ҡыу башты ситәнгә, ҡапҡаға элеп ҡуйыр булғандар* (Ырымдан).

Икенсеһе – япа-яңғыҙ кешегә ҡарата әйтелә. Мәҫәлән: *Тәмле һүҙгә алданып, ҡыу баш ҡалдым донъяла* («Аҡбуҙат»).

Төрки халыҡтарында, шул иҫәптән башҡорттарҙа, маңлайында *ҡашҡаһы* булған малды изге хайуан тип иҫәпләгәндәр һәм уны фәҡәт ҡорбан итеп салыр булғандар.

Башҡорт телендә *ҡашҡа* һүҙе менән яһалған атамалар байтаҡ. Шулар рәтендә *ҡашҡа ат, ҡашҡа тәкә, аҡ ҡашҡа, ерән ҡашҡа, йондоҙ ҡашҡа, сыбай ҡашҡа* һ. б. күрһәтергә була. Мәҫәлән: *Ҡараңғы ла төндә юл яҡтыртҡан Салауат менгән кирҙең ҡашҡаһы* (Халыҡ йырынан).

Халыҡ телендә *«Алланың ҡашҡа тәкәһе»* (йәки *Алланың ҡашҡа тәкәһеме әллә*) тигән әйтем һаҡланып ҡалған. Ул, ғәҙәттә, кемделер айырып ҡарауҙы йәки кемдеңдер үҙ-үҙен өҫтөн ҡуйыуын оҡшатмағанда әйтелә. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: хәҙерге әҙәби башҡорт телендә *«ҡашҡа»* һүҙенә йәнә яңы мәғәнә өҫтәлгән: ул дан, ҡаһарман, батыр төшөнсәләрен үҙ эсенә ала. Әйтәйек, *«Ил ҡашҡаһы», «Илгә ҡашҡа булыу»* тигән һүҙбәйләнештәр иле, халҡы алдында ҙур дан-шөһрәт ҡаҙанған абруйлы шәхестәргә ҡарата ҡулланыла.

Ғөмүмән, ғилми сығанаҡтарға һәм ғалимдарҙың фекеренә ҡарағанда, ат образы аша халҡыбыҙҙың рухи донъяһы, әхлаҡи-этник ҡанундары раҫлана. Ат образының биҙәү сәнғәтендә, археологик ҡомартҡыларҙа һынланыуы, ат һөлдәләренең ҡәберлектәрҙә табылыуы шул хаҡта һөйләй. Шуға күрә халҡыбыҙҙың тоғро дуҫы һәм юлдашы булған ат Башҡортостаныбыҙҙың символына әүерелде. Республиканың дәүләт гербында милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың арғымаҡҡа атланған һүрәте лә шуны дәлилләй.

Тел ғилемендә малсылыҡ лексикаһына арналған хеҙмәттәр байтаҡ ҡына. Шулар иҫәбендә күренекле төркиәтсе К. М. Мусаевтың «Лексика тюркских языков в сравнительном освещении» (М., 1975, с. 52–158) исемле монографияһын күрһәтергә була. Автор был хеҙмәтендә малсылыҡҡа ҡараған атамаларҙы сығышы һәм семантикаһы буйынса ентекләп тикшерә. Лексиканың был тармағына ҡараған ғилми тикшеренеүҙәр рәтенә Т. Ғ. Баишевтың «Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку» (М., 1955) тигән хеҙмәтен дә алырға була. Шулай уҡ малсылыҡ терминологияһына ҡараған бик күп файҙалы мәғлүмәттәрҙе Ж. Ғ. Кейекбаев, Н. Х. Мәҡсүтова, С. Ф. Миржанова, Н. Х. Ишбулатов, Э. Ф. Ишбирҙин һәм У. Ф. Нәҙерғоловтың ғилми тикшеренеүҙәрендә табырға була. Һүҙлектәр төҙөү мәлендә был хеҙмәттәрҙең барыһы ла иҫәпкә алынды һәм үҙ урынында файҙаланылды.

Мәғлүм булыуынса, малсылыҡ хужалығына ҡараған терминдар системаһы башҡорт теленең иң боронғо ҡатламын тәшкил итә. Лексиканың был төркөмө йорт хайуандары атамаһын, уларҙың кәүҙә төҙөлөшөн, төҫөн, йәшен, енесен,

тәғәйенләнешен, ҡылығын, тоҡомон, ауырыуҙарын, тиреһен һәм уны эшкәртеү өсөн кәрәк булған төрлө ваҡ-төйәк нәмәләр атамаһын, мал-тыуар биргән аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, һауыт-һаба, эйәр-өпсөн һәм ат егәре атамаларын үҙ эсенә ала.

Шуны иҫтә тотоу кәрәк: үрҙә әйтелгән лексик-семантик төркөмгә ҡараған һүҙҙәрҙең байтағын диалектизмдар тәшкил итә, шуға күрә уларҙың күпселеге академик һүҙлектәргә инеп бөтмәне. Уларҙы урыҫ теленә тәғәйен итеп кенә тәржемә итеп тә булмай, сөнки уларҙың урыҫ телендә эквиваленты юҡ. Шуға күрә башҡортса-урыҫса һүҙлектәрҙә беҙ үрҙә әйтелгән һүҙҙәрҙең күбеһен тасуири юл менән тәржемә итеп бирҙек. Мәҫәлән: *һайҙаҡ* – лошадь, отобранная из общего косяка; *һандыҡ* – объедки, остатки сена от корма животных; *һебә* – приз в виде куска баранины или материи, вручаемый победителю на состязаниях; *һәүерек* – жеребенок, которого еще нельзя использовать как производителя; *ҡонажын* – кобыла-трехлетка; *дүнәжен* – кобыла-четырехлетка; *тыуһыу мал* – не приносящая приплода скотина; *торпо* – трехлетняя корова; годовалый теленок; *ҡасаған* – яловая корова; *ҡасар* – полуторогодовалая телка; *тил быҙау* – теленок, сосущий чужую мать; *тил мал* – откормленный на воле скот; *толоп* – шкура, снятая чулком; *һаяҡ* – одиноко пасущаяся свободная лошадь; *турта* – накипь, образующаяся при варке мяса и т. п. Күҙәтеүҙәргә ҡарағанда, малсылыҡҡа ҡараған байтаҡ терминдарҙы фәҡәт һөйләштәрҙә өлкән быуын кешеләренән генә ишетергә тура килә. Шулар рәтенә: *шыры* – һауыт-һаба яһау өсөн махсус рәүештә эшкәртелгән йылҡы тиреһе; *һауры* – һыйыр малы тиреһенән ҡыҙылға буяп эшләнгән күн; *саҡсур* – тиренән тегелгән аяҡ кейеме; *саҡса* – мөгөҙҙән яһалған дары һауыты; *ҡынйыраҡ* – табаны – йылҡының сираҡ тиреһенән, башы – күндән, ҡунысы киндерҙән тегелгән аяҡ кейеме; *ҡалта* – күндән тегелгән янсыҡ; *ҡалтағай* – табанына тире ҡағылған ҡыҫҡа ғына һунар саңғыһы; *әҙернә* – һыртына бүре тарамышы ҡуйып, мөгөҙҙән яһалған ян; *ҡотоҡса* –кәзә йәки һыйыр мөгөҙөнән эшләнгән дары һауыты; *торба* – аттың башына элеп, һоло ашата торған тоҡсай; *һандыҡ* – мал ашағандан ҡалған эре-торо бесән йәки һалам; *толоп* – тиреһен бөтөн көйө тунап, һалам тултырып яһалған йәш мал һ. б.

Малсылыҡ халҡыбыҙҙың боронғо шөғөлө булғанға күрә, телебеҙҙә бик күп этнографик әйтемдәр, мәҡәлдәр һаҡланып ҡалған. Мәҫәлән: *Уңған ҡатын йорондо элкеп ҡуйтыр сығарыр.* Билдәле булыуынса, **йорон** һүҙе әҙәби телдә йыш ҡулланыла: *йорон салбар, йорон эсле итек* һ. б.

Этнографик әйтемдәр халҡыбыҙҙың боронғо тарихын, ғөрөф-ғәҙәтен, йолаларын күҙаллауға ярҙам итә. Миҫалдар: **киленде малға таяндырыу** – егет йортона килгәс, ҡыҙҙы арбанан һ. б. уға инселәнгән малға таяндырып төшөрөүҙән торған туй йолаһы; *һебә алып ҡасыу* – ҡоҙаларҙы ҡаршы алғанда туй һебәһен алыу өсөн үткәрелгән ат сабыштары; *ат оштау* – бүләк алыр өсөн кейәү атын ебәрмәй тороуҙан ғибрәт булған туй йолаһы.

Малсылыҡ тематикаһына бәйле мәҡәлдәр, әйтемдәр шулай уҡ милләтебеҙҙең фекерләү ҡеүәһен, аҡыл һәләтен, уның рухи донъяһын күрһәтергә булышлыҡ иткән. Мәҫәлән: *Аты барҙың ҡанаты бар, һыйыры барҙың һыйы бар; Атҡа менгән ил гиҙәр, яҡшы кеше ил биҙәр; Асыуыңды ат ит, аҡылыңды теҙген ит; Алты ҡабат ат туйһын, ете ҡабат ир туйһын; Айырылған малды бүре алыр, халҡынан айырылғанды гүр алыр; Аттың яҡшыһы алға сыға, егеттең яҡшыһы данға сыға; Ҡабаландың аты өҙлөгөр, ялҡауҙың аты һөрлөгөр* һ. б.

Лингвистик күҙәтеүҙәргә ҡарағанда, малсылыҡҡа бәйле терминдар системаһының ныҡ үҫешкән булыуы халҡыбыҙҙың көнкүрешендә, тормошонда был хужалыҡтың ҙур урын биләүе хаҡында һөйләй.

Хатта йылдың ниндәй миҙгелендә тыуыуына ҡарап, ваҡ малдар *көҙләүес, йәйләүес, бүлтерек* атамалары менән йөрөй. Көҙ тыуған һарыҡ бәрәсенә – *әтәмбай һарыҡ*, кәзә бәрәсенә – *әтәмбай кәзә*, ике йәшлек һарыҡҡа – *шешәк һарыҡ*, ике йәшлек кәзәгә – *шешәк кәзә* тигән атама ҡулланыла.

Башҡорт телендә йылҡының йөҙгә яҡын төҫ атамаһы билдәле. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: байтаҡ төҫ атамаларын урыҫ теле төрки телдәренән үҙләштергән. Мәҫәлән, *игреневый* ерән һүҙенән, *чубарый* сыбарҙың бер төрө, *саврасый* сыбар һүҙенән, *буланый* болан һүҙенән алынған. *Лошадь* һүҙе лә алаша һүҙенән барлыҡҡа килгән.

Һүҙлеккә шулай уҡ мал атамалары менән яһалған ботаника, зоология терминдары ла махсус тамға менән алфавит тәртибендә алынды. Мәҫәлән: мал теле *бот.* кактус; мал борсағы *бот.* бобы; һыйыр теле *бот.* серпуха; һыйыр шалҡаны *бот.* брюква; ҡолонғойроҡ *бот.* вейник наземный; һыйырғойроҡ *бот.* коровяк; атҡолаҡ *бот.* щавель конский; кәзә талы *бот.* ива козья; үгеҙголаҡ *бот.* крестовник полевой; тайтояҡ *бот.* копытень европейский; үгеҙ теле *бот.* анхуза лекарственная; үгеҙут *бот.* зубровка душистая; һыу һыйыры *зоол.* буйвол; һыу айғыры *зоол.* бегемот; ат күгәүене *зоол.* овод лошадиный һ. б.

Мал атамалары ҡушып яһалған ер-һыу, кеше исемдәре лә халҡыбыҙҙың үткән тарихы, көнкүреше, кәсеп-шөғөлө тураһында фараз итә. Мәҫәлән, *Алайғыр ауылы* (Ҡырмыҫҡалы районында), *Таналыҡ* (Һаҡмар йылғаһы ҡушылдығы), *Быҙаулыҡ* (Таналыҡ йылғаһы ҡушылдығы), *Толпар ауылы* (Ғафури районында); *Ат һөйгән ауылы* (Дүртөйлө районында) һ. б. Шулай уҡ түбәндәге кеше исем-фамилияларын да күрһәтергә була: *Йылҡыбай – Йылҡыбаев, Ҡуҙый – Ҡуҙыев* һ. б.

Был лексик-семантик төркөмгә ҡараған барлыҡ атамаларҙы бергә туплау маҡсатында диалект һәм вариантлы һүҙҙәр ҙә алынды, уларҙың әҙәби ишен күрһәтеү өсөн түбәндәгесә тоҫҡама яһалды:

**һаҡа айғыр** *то же, что* **һаҙаған айғыр**
**ялҡаҡ** *диал. вет. то же, что* **маңҡа**
**эйәр-туҡым** *то же, что* **эйәр-өпсөн**
**һыйыр сәнскәге** *диал. то же, что* **уҡра**

## ҺҮҘЛЕКТЕҢ ТӨҘӨЛӨШӨ

Ике меңдән ашыу лексик берәмекте үҙ эсенә алған «Башҡортса-урыҫса, урыҫса-башҡортса малсылыҡ терминдары һүҙлеге» ике өлөштән һәм ҡушымтанан тора. Һүҙлеккә малсылыҡҡа ҡараған барлыҡ һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм этнографизмдар алынды. Уларҙың бөтәһе лә ауыл хужалығының малсылыҡ тармағына ҡараған ғилми әҙәбиәттән, дәреслектәрҙән, матбуғат материалдарынан, һүҙлектәрҙән, халыҡ ижады ҡомартҡыларынан йыйылды.

Һүҙҙәрҙең күбеһенә йә башҡортса, йә урыҫса ҡыҫҡаса аңлатма бирелде. Баш һүҙҙәр ҡалын хәрефтәр менән алфавит тәртибендә урынлаштырылды, ә йәйә эсендәге аңлатмалар курсив менән бирелде:

**шешәк** двухлетний, двухгодовалый *(о мелком скоте)*: **шешәк кәзә** двухлетняя коза

**кеҙә** путы *(для подтягивания задней ноги кобылы к шее при дойке)*

**толоп** чучело *(тиреһен бөтөн көйө тунап, һалам тултырып яһалған йәш мал; ғәҙәттә, уға әүрәтеп һыйырҙың һөтөн эйҙерәләр)*

Урыҫ телендә эквиваленты булмаған этнографизмдар тәржемәлә шул килеш алынып, йәйә эсендә аңлатмаһы йәки тасуири тәржемәһе бирелде:

**торба** торба *(ат башына элеп, һоло ашата торған тоҡсай)*
**туҡты** ягненок *(которому более шести месяцев)*
**торпаҡ** молодой бычок, теленок
Синонимдар, диалект һүҙҙәр алфавит буйынса үҙ урынында бирелеп, әҙәби вариантҡа тоҫҡама яһалды:
**йәйҙәүкә** *диал. то же, что* **йәйләүес**
**һаҡа айғыр** *то же, что* **һаҙаған айғыр**
**аҙман** *то же, что* **аҙғын мал**
**айғырсаҡ** *диал. то же, что* **айғыр ҡолон**
**мөгәләй** *то же, что* **туҡал**
**ат төнәтеү** *то же, что* **ат ҡуныу**

## ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР

*анат.* – анатомия термины
*биол.* – биология термины
*бот.* – ботаника термины
*вет.* – ветеринария термины
*диал.* – диалект һүҙе
*зоол.* – зоология термины
*ист.* – тарихи термин
*кул.* – кулинария термины
*спорт.* – спорт термины
*уст.* – иҫкергән һүҙ
*этн.* – этнография термины

## ФАЙҘАЛАНЫЛҒАН ҒИЛМИ ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ҺҮҘЛЕКТӘР

*Башҡорт теленең һүҙлеге:* Ике томда /Рәсәй Фәндәр Академияһы. Башҡортостан ғилми үҙәге. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты. – М.: Рус. яз., 1993.

*Башҡорт халыҡ ижады: Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр.* /Төҙ., инеш һүҙ һәм аңлатмалар авт. – Фәнүзә Нәҙершина. – Өфө, 1980.

*Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге:* Өс томда. I том. Көнсығыш диалект. // Мөхәррирҙәре: Н. Х. Мәҡсүтова, Н. Х. Ишбулатов. – Өфө, 1967.

*Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге:* Өс томда. II том. Көньяҡ диалект. // Мөхәррире: Н. Х. Мәҡсүтова. – Өфө, 1970.

*Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге:* Өс томда. III том. Көнбайыш диалект. // Мөхәррире: Н. Х. Мәҡсүтова. – Өфө, 1987.

*Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге* / Рәсәй фәндәр академияһы. Өфө фәнни үҙәге. Башҡортостан фәндәр академияһы. Гуманитар фәндәр бүлеге. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты; яуаплы мөхәррире М. И. Дилмөхәмәтов. – Өфө, 2002. – 430 б.

*Башҡортостан* (ҡыҫҡаса энциклопедия) / «Башҡортостан энциклопедияһы» дәүләт ғилми нәшриәте. – Өфө, 1997.

*Кейекбаев Ж. Ғ.* Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. – Өфө: 1966.

*Мырҙаҡаев Ф. С.* Урыҫса-башҡортса ауыл хужалығы термин-дары һүҙлеге. – Өфө, Китап, 2001.

*Нәҙершина Ф. А.* Халыҡ хәтере, Өфө, 1986.

*Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең аңлатмалы һүҙлеге* / Рәсәй Фәндәр академияһы. Өфө фәнни үҙәге. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты. Башҡортостан Республикаһы академияһы. Гуманитар фәндәр бүлеге; яуаплы мөхәррире З. Ғ. Ураҡсин. – Өфө, 2004. – 527 б.

*Баишев Т. Г.* Башкирские диалекты в их отношении к башкирскому литературному языку. – М., 1955. – 122 с.

*Башкирское народное творчество:* В 12 т. – Уфа: 1987–2006.

*Башкирско-русский словарь* /Российская Академия Наук. Уфимский научный центр. Академия наук Республики Башкортостан; под ред. З. Г. Ураксина. – М.: Дигора, Рус. яз., 1996. – 884 с.

*Зайнуллин М. М.* Русско-башкирский, башкирско-русский словарь по коневодству. – Уфа: РИО РУНМЦ МО РБ, 2004. – 190 с.

*Ишбердин Э. Ф.* Историческое развитие лексики башкирского языка. – М.: Наука, 1985.

*Крылатые тулпары:* Альбом / Сост. Ф. Х. Сиразетдинов. – Уфа: Китап, 2001. – 136 с.

*Надергулов У. Ф.* Животноводческая лексика башкир. – Уфа: Китап, 2000. – 184 с.

*Русско-башкирский словарь* / Российская Академия Наук. Уфимский научный центр. Академия наук Республики Башкортостан; под ред. З. Г. Ураксина. – Уфа: Научное издательство «Башкирская энциклопедия», 2005. – 806 с.

## БАШҠОРТ АЛФАВИТЫ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| Аа<br>а | Бб<br>бэ | Вв<br>вэ | Гг<br>гэ | Ғғ<br>ғы | Дд<br>дэ |
| Ҙҙ<br>ҙы | Ее<br>е (йе) | Ёё<br>ё (йо) | Жж<br>жэ | Зз<br>зэ | Ии<br>и |
| Йй<br>ҡыҫҡа и | Кк<br>ка | Ҡҡ<br>ҡы | Лл<br>эл | Мм<br>эм | Нн<br>эн |
| ң<br>эң | Оо<br>о | Өө<br>ө | Пп<br>пэ | Рр<br>эр | Сс<br>эс |
| ҫ<br>ҫэ | Тт<br>тэ | Уу<br>у | Үү<br>ү | Фф<br>эф | Хх<br>ха |
| Һһ<br>һа | Цц<br>цэ | Чч<br>чэ | Шш<br>ша | Щщ<br>ща | ъ<br>ҡалын айырыу билдәһе |
| Ыы<br>ы | ь<br>нәҙеклек һәм нәҙек айырыу билдәһе | Ээ<br>э | Әә<br>ә | Юю<br>ю (йу) | Яя<br>я (йа) |

# БАШҠОРТСА-УРЫҪСА МАЛСЫЛЫҠ ТЕРМИНДАРЫ ҺҮҘЛЕГЕ



# А

**абынсы** спотыкливый; **абынсы ат** спотыкливый конь

**абыныусан** *то же, что* **абынсы**

**ағылйым** беловатый, белёсый; светлый *(о масти лошади)*; **ағылйым туры ат** светло-гнедой конь

**ағытыу** *(ҡымыҙға бәйләгән һауын бейәләрҙе ҡолондар менән иркенгә ебәреү)* пускать жеребят с кобылицами *(на волю после дойки)*

**аҙау** *(оҙаҡ һаҡланып иҫкергән)* пролежавший зиму; **аҙау бесән** лежалое сено

**аҙау ҡымыҙ** прокисший кумыс

**аҙау тештәр** *анат. (яңаҡтың төп яғындағы яҫы тештәр)* коренные зубы

**аҙау айғыр** *диал. то же, что* **аҫау айғыр**

**аҙбар 1.** сарай, хлев; **2.** скотный двор

**аҙғын** *(ситтә йөрөргә ратҡан, йөрөмтәл)* бродячий; **аҙғын мал** бродячий скот

**аҙман 1.** *то же, что* **аҙғын мал; 2.** *(төрлө тоҡом ҡатнашҡандан килеп сыҡҡан мал)* помесь

**аҙнау** *то же, что* **кешнәү**

**аҙымлы** ходкий; **аҙымлы ат** ходкий конь

**аҙымсы ат** *то же, что* **аҙымлы ат**

**аҙыу** *диал. то же, что* **дағa тештәре**

**ажар** *(ярһып торған; уҫал)* горячий; **ажар айғыр** горячий жеребец

**айғылдау** издавать громкий крик *(о лошадях)*

**айғыр 1.** жеребец; **2.** самец-производитель; **3.** некастрированный самец скота

**айғыр ауыҙлыҡлау** обуздать жеребца

**айғыр ҡолон** жеребенок-самец

**айғыр көйҙөрөү** кастрация жеребца

**айғыр тәкә** *диал. то же, что* **кәзә тәкәһе**

**айғыр үгеҙ** *(тоҡом үгеҙ)* некастрированный бык, племенной бык

**айғыр һөрөүе** *(айғырҙың бейәләрҙе ҡыуып йөрөтөүе)* угон косяка кобылиц жеребцом

**айғыр һылыулау** *то же, что* **айғыр көйҙөрөү**

**айғырға ятыу** *(торогоу)* случаться *(о кобыле)*

**айғырсаҡ** *диал. то же, что* **айғыр ҡолон**

**айҡыс** *то же, что* **айыссыҡ**

**айран 1.** айран *(напиток из разбавленного водой кислого молока или курута);* **2.** пахта *(жидкость после сбивания масла)*

**айыл** *этн. (***1.** *ыңғырсаҡты бауыр аҫтынан тарттырып нығыта торған яҫы бау;* **2.** *эйәрҙең сандырҙан алып тарта торған ҡайышы)* подпруга

**айыл тартыу** подтянуть подпругу

**айылбаш** *то же, что* **айыссыҡ**

**айыры тояҡлылар** *заал. (һыйыр, һарыҡ һәм башҡаларҙыҡы кеүек икегә айырылып торған тояҡтары берҙәй үҫешкән имеҙеүселәр отряды атамаһы)* парнокопытные

**айыссыҡ** *(йүгәндең ауыҙлыҡ дүңгәләгендәге тейәге)* трензель, грызло *(металлические удила для лошади)*

**айыу баш эйәр** *этн. (ҡашы айыу башына оҡшатып яһалған эйәр)* седло в виде головы медведя

**аҡ** белый; **аҡ ат** белый конь; **аҡ башмаҡ** белая телка; **аҡ тәкә** белый баран; **аҡ һыйыр** белая корова; **аҡ тана** белая телка

**аҡ ала** бледно-пегий *(о масти животных);* **аҡ ала айғыр** бледно-пегий жеребец

**аҡ баш** белоголовый; **аҡ баш тана** белоголовая телка; **аҡ баш ҡолон** белоголовый жеребенок

**аҡбаш** *вет.* **1.** *(йылҡы малының бәкәлен боҙа торған ҡорт)* копытница, копытянка; **2.** мокрец *(кожная болезнь конечности животных )*

**аҡ бил ат** конь с кольцеобразной белой поясницей

**аҡ бөйөр** *то же, что* **бөйрәк**

**аҡ буҙ** светло-сивый, сизый; серый: **аҡ буҙ ат** серый конь

**аҡ бәкәл** в белых чулках; **аҡ бәкәл ат** конь в белых чулках

**аҡ күк** белый с голубоватым оттенком; **аҡ күк ат** белый конь с голубоватым оттенком

**аҡ ҡоба** светло-бурый; светло-гнедой; **аҡ ҡоба бейә** светло-гнедая кобыла

**аҡ ҡойроҡ** белохвостый; **аҡ ҡойроҡ кәзә** белохвостая коза; **аҡ ҡойроҡ һарыҡ** белохвостая овца

**аҡ ҡола** бледно-саврасый; **аҡ ҡола айғыр** бледно-саврасый жеребец

**аҡ ҡолаҡ** белоухий; **аҡ ҡолаҡ туры ат** белоухая гнедая лошадь

**аҡ ҡорбан салыу** *рел.* *(ҙур теләктәр теләп йәки нәҙер әйтеп аҡ малдан салынған ҡорбан)* торжественное жертвоприношение – в жертву приносится животное белой масти

**аҡ мал** *(йылҡы малы)* кони, лошади

**аҡ морон** беломордый; **аҡ морон ат** беломордая лошадь

**аҡ саптар** бледно-игреневый; **аҡ саптар ат** бледно-игреневый конь

**аҡ сикә** белощекий; **аҡ сикә быҙау** белощекий теленок; **аҡ сикә бәрәс** белощекий ягненок

**аҡта** *диал. то же, что* **ҡаптал**

**аҡтыу** *вет.* эрозия кожи *(у животных)*

**аҡһаҡ** хромой; **ҡара аҡһаҡ** *вет.* неизлечимая хромота

**аҡ һары** светло-желтый; **аҡ һары бейә** светло-желтая кобыла

**аҡ һөйәк** *неодобр.* белоручка

**аҡһыл** белёсый, светло-желтый; **аҡһыл һары ат** светло-желтая лошадь

**аҡъяндау** *диал. то же, что* **уйнаҡлау**

**аҡ ял** белогривый; **аҡ ял айғыр** белогривый жеребец; **аҡ ял саптар** белогриво-игреневый конь

**ала** пёстрый, пятнистый, пегий; **ала ат** пегий конь; **ала һыйыр** пятнистая корова

**ала буҙ** серо-пегий; **ала буҙ ат** седо-пегий конь

**ала туры ат** гнедая с пятнами лошадь

**аладорман ат** *(ярһып торған, уҫал)* горячий конь

**алама** *анат. диал. то же, что* **сыуын**

**аламан** *уст.* скот, приобретенный путем набегов

**алас (аласа)** *то же, что* **ала**

**алаша** **1.** мерин; **2.** лошадь; **3.** старый жеребец, не пригодный к воспроизводству

**ал бирмәҫ ат** *спорт.* конь, не уступающий первенство на скачках

**алғаш** *этн.* передняя лука седла

**алғы имсәк** *этн.* передний зубец подковы

**алғы тештәр** *анат.* резцы

**алҡаҡ** *вет. (йылҡы малында була торған йоғошло ауырыу) то же, что* **манҡа**

**аллюр** *(аттың төрлө йөрөш-юртыш алымы)* аллюр

**алма күк** сивый в яблоках *(о масти лошади)*; **алма күк бейә** сивая в яблоках кобыла

**алма сыбар** *(ике янбашы алма эрелек сыбар)* в яблоках; **алма сыбар ат** лошадь в яблоках

**ал һан** *(хайуандар кәүҙәһенең алғы өлөшө)* передняя часть туши

**алымлы ат** *то же, что* **аҙымлы ат**

**алып ҡасыу** не подчиняясь всаднику, увезти его *(о лошади)*

**аңҡау** *анат.* нёбо

**аңрау** призывное тихое ржание кобылиц

**аран 1.** стойло, денник; **2.** овчарня; скотный двор

**аран малы** стойловое содержание скота

**арата** поперечина; **кәртә аратаһы** поперечина ограждения

**арғымаҡ** аргамак *(старинное название породистых восточных верховых лошадей)*

**арҙа** *(ике йәшкә тиклем инәһен имгән тай йәки башмаҡ)* жеребенок или теленок-сосунок до двухлетнего возраста

**арҡа** *анат. (малдың муйынынан ҡойроғона тиклем булған һырты)* хребет

**арҡалыҡ** *этн. (ҡамыт-дуғаны күтәреү өсөн ыңғырсаҡ аша тәртәнән тәртәгә тартыла торған бау)* чересседельник

**арҡанлау** *(оҙон арҡанға тағыу)* привязать веревкой

**арҡар** *(ҡусҡар мөгөҙлө эре тау һарығы)* архар

**арҡау** *диал. то же, что* **арҡалыҡ**

**арҡүҙәк** *диал. то же, что* **умыртҡалыҡ**

**армыт** *этн. (ышлыяның арҡыры төшөрөлгән ҡайыштары)* наборная кисть шлеи

**арнау мал** *диал. то же, что* **нәҙер малы**

**артау** *(үтә ныҡ әсеү)* перекисать *(о кумысе)*; **артаған ҡымыҙ** перекисший кумыс

**арт һан 1.** задняя часть туши; **2.** *анат.* ягодица

**арт һан ҡалыулығы** *анат.* седалищный бугор

**артмаҡ 1.** переметная сума; **2.** вьюк

**арыҡ мал** тощий скот

**арымтал ат** быстро устающий конь

**ас эсәк** *анат. (эсәктең ашҡаҙан менән туҡ эсәк араһындағы иң оҙон өлөшө; нәҙек эсәк)* тонкая кишка

**аса тояҡлылар** *зоол. то же, что* **айыры тояҡлылар**

**асҡаҡ мал** прожорливая скотина

**асыуһырау** *диал. то же, что* **тоҙһорау**

**аҫаба** *уст. (ире үлгән ҡатындың муллаға биргәндән ҡалған малы)* скот, подлежащий разделу между родственниками умершего

**аҫау** необъезженный, неприрученный; разъяренный, горячий; резвый

**аҫау айғыр** необъезженный жеребец; жеребец-вожак, находящийся много лет в косяке

**аҫау ат** неприрученный конь

**аҫау ҡолон** резвый жеребенок

**аҫауланыу** дичать

**аҫауланған ат** одичалый конь

**аҫҡы яңаҡ** *анат.* нижняя челюсть

**аҫыл һөйәк** красавец, стройный человек

**ат** 1. лошадь, конь; 2. мерин

**ат аҙбары** *то же, что* **ат һарайы**

**ат борсағы** *бот.* конские бобы

**ат бәйләғес** коновязь

**ат дағалау** подковать лошадь

**ат ебәреү** 1. *(атты яланға ебәреү)* пускать лошадь на выгон; 2. *(ат егеп ҡаршы сығыу)* выслать подводу навстречу приезжающим

**ат егеү** запрягать лошадь

**ат заводы** конный завод

**ат йөрөтөү** *(шәп килеп тирләгән атты ҡапыл туҡтатмай алып йөрөү)* остужать коня после быстрой езды

**ат йүгәнләү** надевать на коня уздечку

**ат йыуаһы** *бот.* лук линейный

**ат көсө** *физ. уст.* лошадиная сила

**ат күгәүене** *зоол. (эре ҡара күгәүен)* овод лошадиный

**ат ҡараусы** конюх

**ат ҡуҙғалағы** *бот.* конский щавель

**ат ҡуныу** *(төнгөлөккә ҡунып ат көтөү)* пасти лошадей ночью; отправиться в ночное

**ат ҡураһы** *то же, что* **ат һарайы**

**ат ҡушаҡлау** *(һыбай йөрөгәндә алмаш өсөн янға ат етәкләп алыу)* взять запасную лошадь

**ат ҡушсы** *ист. (юл йөрөгәндә атты ҡарап, бергә оҙатып йөрөгән кеше)* проводник *(в пути)*
**ат ҡылы** конский волос
**ат ҡырғысы** гребница
**атлама** *диал. то же, что* **ыңғырсаҡ ҡанаты**
**атламлы ат** *то же, что* **аҙымлы ат**
**атланма** *диал. то же, что* **эйәр**
**атлыҡса 1.** конюшня, конный двор; **2.** кормушка, ясли
**ат менеү** садиться верхом на коня
**ат мисәү** припрячь лошадь
**атҡа моронһалыҡ кейҙереү** надеть коню намордник
**ат нуҡталау** надеть лошади недоуздок
**ат осҡолау** запрячь цугом
**ат өйрәтеү** приучать коня к упряжке, к седлу, объездка
**ат сабыштырыу** состязаться на конях; скачки
**ат сеҙәрләү** стреножить коня
**ат солоғо** *зоол. диал. то же, что* **бөгәләк**
**ат спорты** конный спорт
**ат теркәү** спарить коней *(в упряжке)*
**ат төнәтеү** *то же, что* **ат ҡуныу**
**ат туғарыу** распрягать лошадь
**ат-тун** *собир.* снаряжение, доспехи
**ат-ужа** *собир.* имущество, достояние
**ат уйнатыу** гарцевать на коне
**ат уҡраныуы** тихое ржание лошади
**ат һарайы** конюшня
**атты һолоға ҡушыу** припускать коня к овсу
**ат һылыулау** выхолостить жеребца
**ат һыуытыу** ставить потного коня на выстойку
**ат ыңғырсаҡлау** положить седелку на коня
**ат эйәрләү** оседлать коня
**ат ябымысы** *диал. то же, что* **ат ябыуы**
**ат ябыуы** *этн.* попона
**атҡа яйҙаҡлап атланыу** садиться на коня без седла
**ат ялы** лошадиная грива
**ат яратыу** готовить коня к скачкам
**ат яҫҡытыу** *диал. то же, что* **ат уйнатыу**
**ата** самец
**ата кәзә** *диал. то же, что* **кәзә тәкәһе**
**ата малы** отцовский хлеб; родительский хлеб
**ата сусҡа** хряк
**аталандырыу** оплодотворять, осеменить

**атан 1.** *(тоҡом өсөн тотолған айғыр дөйә)* племенной верблюд; 2. верблюжонок, родившийся первым

**атан үгеҙ** племенной бык

**атҡолаҡ** *бот. то же, что* **ат ҡуҙғалағы**

**атлама ыңғырсаҡ** *этн.* горбатая седелка

**атламлы** ходкий; **атламлы айғыр** ходкий жеребец

**атландырыу** подсаживать *(на коня)*

**атланыу** садиться верхом *(на коня)*

**атлы ғәскәр** *воен.* конница

**атлы ғәскәр юртауылы** *воен. уст.* авангард конницы

**атлы корпус** *воен.* кавалерийский корпус

**атлы ҡазаҡ** *ист.* конный казак

**атлы милиция** конная милиция

**атлы-тунлы** состоятельный, зажиточный

**атсабар** *ист.* 1. гонец, нарочный; 2. вестовой

**атсы** конюх

**ауыҙ** *анат.* рот

**ауыҙҙауыҡ** *вет. то же, что* **бешмә**

**ауыҙлыҡ** *этн. (йүгәндең ат ауыҙына кейҙерелә торған быуынлы тимере)* грызло; удила; мундштук; трензель

**ауыҙлыҡлау** взнуздывать, зануздывать, обуздывать; **айғырҙы ауыҙлыҡлау** обуздать жеребца

**ауыҙ таҙы** *вет.* адоральная парша у животных *(болезнь)*

**ауырса** *этн. (ашҡа ҡатыу өсөн ҡышҡылыҡҡа тоҙлап ҡуйылған ҡорот)* соленый курут, заготовляемый на зиму

**ашамһаҡ мал** прожорливая скотина

**ашҡаҙан** *анат.* желудок

**ашҡаҙан аҫты биҙе** *анат.* поджелудочная железа

**ашҡаҡ** *анат. то же, что* **сираҡ**

**ашҡан** *(өс йәшлек быҙауламаған һыйыр)* трехлетняя неотелившаяся корова

**ашыҡ** *диал. то же, что* **бәкәлсәй**

**аяҡбау** *(ҡолон арҡанының шылтырауыҡтан елегә тиклемге өлөшө)* веревка, прикрепляемая к ошейнику как часть привязи

**ашыҡ һөйәге** *анат.* берцовая кость

**аяҡ йөнө** обножка

**аяҡлы мал** живой скот

**аянсыл ат** быстрая лошадь

# Б

**бағымтал** ухоженный, упитанный, откормленный; **бағымтал мал** откормленный скот

**бай һөйәге** *этн.* кусок мяса с костью, выдаваемый участникам коллективной помощи

**байтал** *(тай йәшенән сыҡҡандан тәү ҡолонлағанға тиклемге бейә малы)* 1. кобыла не жеребившаяся, т. е. до первого плодоношения; 2. яловая кобыла; 3. кобыла

**баҡа** *(ауыҙлыҡ ҡулсаһына эләктерә торған тейәк; айыссыҡ)* псалий в удилах; грызло

**баҡта** *(малдың яҙ ҡойған йөнө)* шерсть весенней линьки *(лошадей и коров)*

**баҡта ҡойоу** линять

**баҡыраҡ** постоянно блеющий; **баҡыраҡ һарыҡ** постоянно блеющая овца; **баҡыраҡ һыйыр** постоянно мычащая корова

**баҡырыу** блеять *(об овце, козе и т.п.)*; громко мычать *(о корове и т.п.)*

**балауыҙ һары** цвета воска *(о масти лошади)*; **балауыҙ һары бейә** кобыла цвета воска

**баҫма сыбар** крапчатый; **баҫма сыбар айғыр** крапчатый жеребец; **баҫма сыбар ҡолон** крапчатый жеребенок

**бауыр** *анат.* печень

**бауырҙыҡ** *диал. то же, что* **айыл**

**бауырлау** *(ер-һыуҙы буйлау)* проходить, проезжать вдоль чего-либо; исходить, изъездить, исколесить

**бауырлыҡ** 1. подбрюшник *(часть сбруи)*; 2. кошма, подвязываемая под брюхо мелкому скоту для тепла; 3. кошма, подвязываемая под брюхо барану или козлу, чтобы не допустить несезонной случки

**бауырмал** *этн.* скот, подаренный родителями молодоженам

**баһрау һөйәге** *анат. диал. то же, что* **умрау һөйәге**

**баш** голова

**башкүнәк** *этн.* башкунэк *(сосуд, изготовленный из кожи с головы или шеи лошади, коровы)*

**башҡорт аты** башкирский конь

**башлыҡ** *то же, что* **башкүнәк**

**башмаҡ** *(ярты йәштән алып йәш ярымға тиклемге һыйыр малы)* телка *(годовалая)*; **орғасы башмаҡ** телка; **үгеҙ башмаҡ** годовалый бычок

**башмаҡай, башмаҡ тана** годовалая телка

**башмаҡ һыйыр** телка, отелившаяся до трехлетнего возраста

**баш-тояҡ** *собир.* голова и ножки *(мясной туши)*

**баш-тояҡ өтөү** опаливать, опалить (опалить голову и ножки)

**безәүкәй** *то же, что* **быҙау**

**бейек мунда** высокая холка; **бейек мундалы ат** конь с высокой холкой

**бейә 1.** кобыла, кобылица после первого плодоношения; **2.** самка

**бейә ағытыу** пускать кобылиц с жеребятами на волю *(после дойки)*

**бейә бәйләү** держать кобылиц *(для доения и изготовления кумыса)*

**бейә елене** *анат.* кобылье вымя

**бейә күнәге** *этн.* деревянное ведро на волосяном ободке для доения кобылиц

**бейә ҡолон** жеребенок-самка

**бейә һөтө** кобылье молоко

**бекон** *(әҙ генә тоҙлап, махсус ысул менән эшкәртелгән сусҡа ите)* бекон

**бер аяҡ** *(ит)* одна четвертая часть *(мясной туши – обычно о задней конечности)*

**бер түшкә** *(ит)* туша мяса

**берләс** один *(из пары или тройки)*; **берләс бәрәс** один-единственный ягненок

**берәшкә аты** *то же, что* **мисәү аты**

**берәшкәләү** *то же, что* **мисәүләү**

**бестереү** *вет. (аталыҡ биҙҙәрен ҡырҡып алыу)* кастрировать, холостить

**бестерелгән һарыҡ тәкәһе** валух

**бешеү I** взбивать, сбивать *(о кумысе)*

**бешеү II** *(мал тиреһен йоҙроҡ менән һыҙырыу)* освежевать шкуру кулаком

**бешкәк** *этн.* пахталка, мутовка

**бешмә** *вет.* ящур

**бешмә ауырыуы** *вет.* ящурное заболевание

**биҙ** *анат.* железа

**биҙгәләк** неприрученный, дикий; **биҙгәләк дөйә** дикий верблюд

**биҙәү** бесплодный, яловый; **биҙәү бейә** яловая кобыла; **биҙәү мал** яловый скот

**бил** *анат.* поясница

**билдәш** с белой полоской шерсти на боку *(о масти коровы и козы):* **билдәш кәзә** коза с пояском белым

**билендәк** пугливый; **билендәк ат** пугливая лошадь

**билендәү** шарахнуться в сторону *(о животных)*

**биллек** *(ышлыяның бил тәңгәленән һыртлығы менән буйлығын тоташтырып торған ҡайыш)* поперечник, поперечный ремень *(у шлеи)*

**билләмә** *(малдың бил ите)* филе

**бирек** крепкий, выносливый; **бирек ат** выносливый конь

**боға** *уст.* племенной бык

**боғаҙ** *анат. (муйындың ҡыҙыл үңәсте һәм боғарлыҡты эсенә алған алғы өлөшө)* горло; глотка; гортань

**боғаҙҙау** *анат. то же, что* **боғаҡ**

**боғаҙлау** резать, колоть, забивать *(скот)*

**боғаҡ** *анат. (эре малдың муйын аҫтында һалбырап торған тиреһе)* свисающая часть шкуры в нижней части шеи быка, коровы и т.д.

**боғал** аркан, лассо

**боғаллау** арканить, ловить при помощи лассо

**боғарлыҡ** *то же, что* **боғаҡ**

**боғаулыҡ** *то же, что* **бығау**

**Бораҡ** *миф.* Брок *(райский конь, на котором пророк Мухаммед якобы вознесся на небо)*

**борғаҡ** *этн. то же, что* **морондоҡ**

**борғаҡтау** надевать намордник

**бот** *анат.* бедро

**бот ите** ляжка

**бот һөйәге** *анат.* бедренная кость

**ботлоҡ I** *этн.* ботлок *(сосуд, изготовленный из кожи задней ноги лошади)*

**ботлоҡ II** *этн.* боковые ремни шлеи

**ботса** *этн. то же, что* **ботлоҡ II**

**бөгәлсән** *диал. то же, что* **бөгәләк**

**бөгәләк** *зоол. (йылҡының ҡорһаҡ аҫтына йомортҡа һалып, эсен ҡортлата торған себен)* овод лошадиный, овод желудочный

**бөйөр** *анат.* почки

**бөйрәк** белобокий; **бөйрәк һыйыр** белобокая корова

**бөйән** *анат.* двенадцатиперстная кишка

**бруцеллез** *вет. (кәзә, һарыҡ, һыйыр малында булып кешегә лә йоға торған һөйәк-быуын ауырыуы)* бруцеллез

**буғай** *то же, что* **боға**

**буҙ I** *(көлһыу күгелйем)* светло-серый, светло-пепельный, землисто-серый; сивый; **буҙ ат** сивая лошадь

**буҙ II** *(иркендә йөрөгән)* пущенный на волю; **буҙ мал** пасущийся на воле скот

**буҙғыл** *(буҙ төҫкә тартым)* сероватый; **буҙғыл һарыҡ** сероватая овца

**буҙ тарлан** чалый; **буҙ тарлан ат** чалый конь

**буйлыҡ** *этн. (ышлыяның арттан әйләндереп, ике яҡ ҡолаҡбау төбөнә тартылған бауы)* часть шлеи, протянутая вдоль спины лошади к гужам

**буйһыу** *(оҙон тороҡло)* с длинным туловищем *(о лошади)*

**бураҙна аты** лошадь, впряженная в плуг

**бурлы** *диал. то же, что* **бурыл**

**буртаҡ** *этн. то же, что* **турһыҡ**

**бурыл** *(буҙ менән ҡара ҡатыш)* чалый; **бурыл ат** чалый конь

**бурыл ала** чало-пегий; **бурыл ала ат** чало-пегий конь

**бурыл ерән** рыже-чалый; **бурыл ерән ҡолон** рыже-чалый жеребенок

**бурыл күк** сиво-чалый; **бурыл күк байтал** сиво-чалая кобыла

**бурыл ҡара** вороно-чалый; **бурыл ҡара бейә** вороно-чалая кобыла; **бурыл ҡара ҡолон** вороно-чалый жеребенок

**бурыл туры** гнедо-чалый; **бурыл туры айғыр** гнедо-чалый жеребец

**бутала** *(йылҡы малының муйынына тағыла торған дыңғырҙаҡ)* ботало

**бүгәй** *то же, что* **боға**

**бүлкә** отгороженная для молодняка часть сарая, овчарни

**бүлмә** *то же, что* **бүлкә**

**бүлтерек 1.** *(һарыҡ, кәзәнең көҙ тыуған бәрәсе; көҙләүес; әтәмбай)* поздний приплод *(у овец и коз)*; **2.** слабый, хилый; исхудалый, тощий

**бүлтерек мал** тощий скот

**бүлтерекләү** котиться, ягниться позже срока *(об овцах и козах)*

**бүреһуғар** *анат. то же, что* **туларһыҡ**

**бүреһуғар быуын** *анат.* скакательный сустав

**бүртә** *(аҡ менән туры ҡатнаш)* караковый; **бүртә бейә** караковая кобыла

**быҒау** путы *(железные)*

**быҒым ҡабырға** *анат. (бил тәңгәлендәге ҡыҫҡа ҡабырға)* ложное ребро

**быҙау** *(ярты йәшкә тиклемге һыйыр малы)* теленок
**быҙау аҙбары** *то же, что* **быҙау һарайы**
**быҙау ите** телячье мясо; телятина
**быҙау ҡараусы** телятник, телятница
**быҙау ҡушып эйҙерeү** выдаивать молоко до конца, подставляя теленка к корове
**быҙауға морондоҡ кейҙереү** теленку надеть намордник
**быҙау муйынсағы** ошейник для теленка
**быҙау сүбе** *то же, что* **сыуын**
**быҙау тилетеү** приучить теленка сосать чужую матку
**быҙау һалыу** *вет.* выкидыш у коров
**быҙау һарайы** телятник
**быҙауҙы һыйырға ҡушыу** подпускать теленка к корове
**быҙауҡай** *диал. то же, что* **быҙау**
**быҙаулау** телиться; отел *(о корове)*
**быҙаулау мәле** время отела
**бырасыл** *уст. (ат менән сауҙа иткән кеше)* прасол
**бысылғы** *вет.* грибок *(кожное заболевание у парнокопытных между копытами)*
**быуаҙ** жерёбая *(о кобыле, ослице, верблюде)*; стельная *(о корове)*; суягная *(об овце, козе)*; супоросная, супоросая *(о свинье)*
**быуаҙ бейә** жерёбая кобыла
**быуаҙ кәзә** суягная коза
**быуаҙ сусҡа** супоросная свинья
**быуаҙ һарыҡ** суягная овца
**быуаҙ һыйыр** стельная корова
**быуаҙҙау I** *то же, что* **боғаҙ**
**быуаҙҙау II** быть стельной
**быуаҙҙау III** *(тамаҡлау)* задушить
**быуаҙҙау һөйәге** *то же, что* **салыу һөйәге**
**быуаҙыу** *(быуаҙ булыу)* быть стельной
**быуын** *анат. (организмдағы һөйәктәрҙең йәки кимерсәктәрҙең ҡуҙғалмалы булып, бер-беренә тоташҡан, ялғанған урыны)* сустав
**бәйге 1.** скачки, бега; **2.** приз *(на скачках)*
**бәйге аты** скакун, скаковая лошадь
**бәйге алыу** получить приз
**бәйге сабыу** участвовать в скачках
**бәйге юлы** беговая дорожка
**бәйге эйәре** скаковое седло
**бәйләм бейә** привязанная для доения кобыла
**бәйләмес** *(мал бәйләй торған ҡаҙыҡ)* кол *(для привязывания животного)*

**бәкәл** *анат. (аяҡтың енсек түбәнендәге сурайып торған быуын һөйәге)* бабка *(сустав ноги у животного)*

**бәкәл быуыны** путовый сустав

**бәкәлсәй** *анат.* **1.** бабка *(надкопытный сустав)*; **2.** *(малдың бәкәл быуынындағы ваҡ-ваҡ тупар һөйәк)* путовая кость *(у лошади)*

**бәрәкәй** *то же, что* **бәрәс**

**бәләкәй ҡарын** *анат. (көйөшлө малдың ашҡаҙанындағы дүртенсе бүлек)* желудочек

**бәрән** коза или овца *(с момента прекращения кормления детеныша до второго окота)*

**бәрән кәзә** коза до двух лет

**бәрән йөнө** поярок

**бәрән тәкә** козел или баран до двух лет

**бәрән тиреһе** мерлушка, овечья шкура

**бәрән һарыҡ** овца до двух лет; барашек

**бәрәс** *(тыуғандан имеүҙән туҡтағанға тиклемге кәзә, һарыҡ)* ягненок или козленок, поросенок

**бәрәс һалыу** *вет.* выкидыш у овец, коз

**бәрәсләү** котиться *(об овце, козе, кошке)*, ягниться *(об овце)*

**бәрәсләү осоро** время окота *(овец и коз)*

**бәсәй** *диал. то же, что* **бәкәл**

**бәүел** *анат.* моча

**бәхмәт** *(йүгерек тоҡом аты)* рысак

**бәхмәт тоҡомло ат** конь рысистой породы

**бәшәләй** *анат. (аяҡ һөйәгенең туларһыҡ менән бармаҡ һөйәктәре араһындағы өлөшө)* голеностопный сустав плюсны, плюсен

# В

**ваҡ мал** *(һарыҡ һәм кәзәләр)* мелкий скот

**витамин** *(мал аҙығында йәшәү, шулай уҡ матдәләр алмашыныуы өсөн кәрәк булған төрлө химик составлы органик матдә)* витамины

# Г

**гельминт** *вет. (малдың эске ағзаһында була торған төрлө паразит селәүсен)* гельминт

**гельминтоз** *вет. (паразит селәүсендәр барлыҡҡа килтергән ауырыуҙар)* гельминтоз

**гематоген** *(мөгөҙлө эре малдың ҡанынан әҙерләнә торған дауалау препараты)* гематоген

**ген** *биол. (йән эйәләре һәм үҫемлек организмындағы сифатты нәҫелдән нәҫелгә күсерә торған элемент)* ген, гены

**гит** *спорт.* гит *(скачки на короткую дистанцию)*

**глист** *вет. (мал эсәгендәге паразит ҡорт)* глист

## Ғ

**ғәнимәт** *уст. то же, что* **аламан**

**ғәрәп аты** *(һыбай йөрөүгә уңайлы, талымһыҙ, әрһеҙ, нәҙек оҙон аяҡлы, бәләкәй башлы етеҙ йылҡы тоҡомо)* арабский конь

## Д

**даға** подкова, подковка

**даға ҡағыу** прибить подкову

**даға сөйө** подковный гвоздь

**даға тештәре** зубья подковы

**даға тимере** подковное железо

**дағалау** подковать, прибить подкову

**дағалы ат** подкованный конь

**дебет** *(кәзәнең шырт йөнө аҫтындағы мамығы, кәзә мамығы)* пух козий

**дебет кәзәһе** коза пуховой породы

**дебет тарау** чесать пух

**дилбегә** *(егелгән аттың башын тотоу, идара итеү өсөн йүгәнгә ике яҡлап беркетелгән оҙон бау)* вожжа, вожжи

**дилбегә тотоу** держать вожжи

**дилбегә тартыу** тянуть вожжи

**дөлдөл** *миф. (әкиәттәге ел кеүек елә, ҡош кеүек оса торған ат; толпар)* Дюль-дюль *(крылатый, сказочный конь)*

**дөмбәй** *этн.* дюмбай *(сосуд из шкуры с задних ног лошади)*

**дубыр** *диал. то же, что* **тубыр**

**дуға** *(ике тәртәне ҡамытҡа бәйләп нығытыу өсөн ике яҡ осо ҡамыт бауына кейҙерелеп ҡуйыла торған, ағасты бөгөп яһалған ат егеү ҡорамалы)* дуга

**дуға бөгөү** гнуть дугу

**дуға сыңғалау** прикрепить к дуге металлическое кольцо

**дуғасы** мастер по изготовлению дуг

**дуңғыҙ** *то же, что* **сусҡа**

**дүнәжен, дүнәжен байтал** кобыла по четвертому году; кобыла-четырехлетка

**дүнәжен, дүнәжен һыйыр** четырехлетняя корова *(реже)*

**дүнән, дүнән айғыр** жеребец по четвертому году, четырех лет

**дүнән, дүнән үгеҙ** бык по четвертому году *(реже)*

**дүңгәләк** металлическое кольцо в дуге

**дуңғырлаҡ** *этн. (малдың муйынына таға торған ҙур ҡыңғырау)* колокольчик, ботало

**дуплау** *этн. (тирене махсус шыйыҡсаға һалып иләү)* дубить

## Ҙ

**ҙурығыу** *(шәп сабып, хәлдән тайыу; яныу)* выбиваться из сил, вымотаться от быстрой скачки

**ҙурыҡтырыу** выматывать сильной скачкой, изматывать

## Е

**егеү** запрягать, впрягать; упряжь, упряжка

**егеү нәмәләре** упряжные принадлежности

**егеүле ат** запряженная лошадь

**егеүле транспорт** гужевой транспорт

**еген** *то же, что* **екке**

**егеш** *то же, что* **екке**

**еҙе** *диал. то же, что* **еле**

**еҙеләү** *диал. то же, что* **елеләү**

**еҙле йүгән** узда с медными украшениями

**ей** *спец. (тире ебетә торған матдә – эркет, көрпә һ.б. ҡушып яһалған шыйыҡлыҡ)* кислый раствор для вымачивания

**ей булыу** *(әсеп йомшарыу)* размокнуть в кислом растворе *(о коже)*

**ейетеү** мочить в кислом растворе

**ейеү 1.** *(ебеп йомшарыу)* преть, размокнуть *(о коже)*; **2.** *(ейҙә кибеп, йөнө йолоу)* лезть, выпадать *(о шерстинках шкуры при вымачивании в кислом растворе)*

**екке** упряжной, ездовой; **екке ат** ездовая лошадь; упряжной тип лошади

**еккегә өйрәтеү** приучить к упряжке

**елгер** быстрый; **елгер ат** быстроногий конь

**еле** *(ҡолондарҙы бәйләү өсөн өс-дүрт метр аралыҡтағы суҡмар башлы тәпәшәк ҡаҙыҡтарға тартылған бау)* привязь *(веревка)*

**елек** *анат. (һөйәк ҡыуыҡшлығындағы майлы матдә)* костный мозг

**елек һөйәге** *анат.* трубчатая кость

**елелек** *(ҡолондарҙы бәйләү, бейә һауыу өсөн яһалған махсус урын)* привязь, место привязывания жеребят

**елеләү** *(еле яһап ҡолон бәйләү)* привязывать (оставлять на привязи)

**елен** *анат.* вымя

**еленек** дающий много молока; молочный; **еленек һыйыр** молочная корова

**елен еткереү** *(или* **төшөрөү, тултырыу***)* набирать вымя

**еленләү** *(быуаҙ малдың быҙаулау йәки ҡолонлау һәм бәрәсләү алдынан һөт биҙҙәре эшләй башлау)* набирать вымя *(о корове перед отелом, об овце и др. перед окотом)*

**елен тирттереү** *то же, что* **елен еткереү**

**елен төбө** *(елендең иң төпкө өлөшө һәм шул өлөштәге һөт)* остаток молока *(в вымени)*

**елен төшөрөү** *то же, что* **елен еткереү**

**елен тултырыу** *то же, что* **елен еткереү**

**еле һуҙыу** натягивать привязь

**елкә** *анат. (муйындың артҡы яғы)* затылок

**елкәлек 1.** *(ҡамыт ағастарын тотторop тороу өсөн юғары осонан ҡушып бәйләгән бау)* завязка, скрепляющая верхние концы клешней хомута; **2.** *(ҡамыттың елкәһендәге ышлыя бәйләй торған ҡамыт-ышлыяны тотоп тороу һәм кәрәгенсә ҙурайтыу, кесерәйтеү өсөн хеҙмәт итә)* верхняя часть хомута

**елкә һөйәге** *анат.* затылочная кость

**елсә** *вет. (һыйыр муйынына сыҡҡан боғаҡ)* зоб на шее *(у коровы)*

**елсәү** *вет.* зоб или базедова болезнь

**енсек** *анат. (аяҡтың тубығы менән бәкәле араһындағы ҡуш һөйәк)* голень

**енсек алды, енсек алды һөйәге** *анат.* плюсна, плюсневая кость

**енсек (ашыҡ) һөйәге** *анат.* берцовая кость *(у животных)*

**ерән** *(ҡыҙыл менән һары ҡатнаш)* рыжий; **ерән ат** рыжая лошадь

**ерән ала** рыже-пегий; **ерән ала бейә** рыже-пегая кобыла

**ерән ҡашҡа** рыжий с белой звездочкой; **ерән ҡашҡа айғыр** рыжий с белой звездочкой жеребец

**ерәнсә** *(или* **ерәнсәй, ерәнсәкәй***)* рыжий конь

**ерәнһыу** рыжеватый; **ерәнһыу ат** рыжеватый конь

**етәк** вождение на поводу или на поводке

**етәккә ыңғай ат** лошадь, хорошо идущая на поводу; **етәксел** хорошо идущий на поводке; **етәксел ат** хорошо идущая на поводу лошадь

## З

**зебә** *диал. то же, что* **һебә**

**зәңгәр башмаҡ** *(йәш ярымлыҡ башмаҡ)* полуторагодовалая телка

**зәңгәрҙәү** *(миҙгелһеҙ бәрәсләү)* окотиться не по сезону *(об овцах, козах и т.д.)*

## И

**игеҙ** двойня, двойняшки

**игәт** *этн. (килен артынан килгән мал)* приданое невесты *(в виде домашнего скота)*

**иҙелмә** *вет.* болезнь копыт *(у рогатого скота)*

**илгәсәк ат** *(бирек ат)* выносливый конь

**илтер** *(йәш бәрәс тиреһе)* мерлушка, смушка

**иләнгән тире** выделанная шкура

**иләү I** горячий, резвый; **иләү ат** горячий конь

**иләү II** *этн. (сей тирене махсус юл менән эшкәртеү)* выделывать, дубить *(шкуру)*

**иләүләү** шарахнуться в сторону от испуга

**имеҙек** *(имеүен әле ташламаған)* сосунок, сосун; **имеҙек быҙау** теленок-сосун

**имеҙеү** кормить *(своим молоком)*, кормление

**имеҙеү осоро** период лактации

**имеҙеп һауыу** *(һыйырҙы быҙауынан имеҙеп алып, эйҙереп һауыу)* перемежать доение с подпуском теленка-сосунка к корове

**имеҙеүселәр** *зоол. (балаларын һөт имеҙеп аҫраған умыртҡалы хайуандар; һөтимәрҙәр)* млекопитающие

**имеүҙән айырыу** отъем; **имеүҙән айырылған йәш мал** отъемыши

**имсәк** *анат.* сосок *(у коровы, козы и т.д.)*

**имсәк (елен) төбөндәген һауыу** поддой

**имтекләү** *(һыйырҙы эйҙереү өсөн быҙауҙан еленде тылҡытыу)* подпускать теленка к корове *(перед доением)*

**ин** *этн. (малдың – ҡолағына, ҡош-ҡорттоң тәпәй ярыһына ҡырҡып һалынған тамға; инәү)* метка

**инселәү** *этн. (малды берәй кеше исеменә атап ин һалыу)* завещать кому-либо *(скот)*

**инсе мал** *этн.* завещанный кому-либо скот

**инә** самка, матка; **инә сусҡа** свиноматка

**инәү** *этн. то же, что* **ин**

**инәүләү** *(ин һалыу)* делать метки

**инһәлек** *диал. то же, что* **арҡалыҡ**

**иңбаш** *анат. (ҡулдың яурынға тоташҡан урыны; ҡулбаш)* плечо

**иңбаш һөйәге** *анат.* плечевая кость

**иңһә** *диал. то же, что* **ин**

**ипподром** *(ат ярыштыра торған урын)* ипподром

**ир-ат эйәре** мужское седло

**ирен** *анат.* губа

**иркәк** самец *(у млекопитающих)*; **иркәк ҡолон** жеребенок-самец

**иртәнге һауым** утренний удой

**ирәбе** здоровый, крепкий; **ирәбе бәрәс** крепкий ягненок

**ирәк** *этн. (ейеткән тирене ҡыра торған ҡорал)* скребок

**ирәкләү** *(ирәк менән ҡырыу)* обрабатывать шкуру скребком *(при дублении)*

**ит** мясо; **иткә һимертеү** мясной откорм

**ит боҙоу** пластать, рубить мясо, расчленить тушку

**ит сабыусы** рубщик мяса

# Й

**йоҡолоҡ** *анат. (малдың ҡарынына йәбешеп торған бер биҙ)* поджелудочная железа

**йомро тояҡлы мал** *(йылҡы малы)* непарнокопытные животные *(конь, лошадь)*

**йомро (һыңар) тояҡлылар** *зоол.* непарнокопытные

**йондоҙ ҡашҡа** звездчатая лысина *(на лбу)*; **йондоҙ ҡашҡа ат** конь со звездчатой лысиной

**йорт малы** домашний скот

**йөгөлмә** *вет.* копытница *(нагноение в месте раздвоения копыта)*

**йөк аты** ломовая лошадь, рабочая лошадь

**йөлөн** *анат. (умыртҡа һөйәгенең эсендәге йомшаҡ матдә; арҡа мейеһе)* спинной мозг

**йөн** 1. *(хайуандарҙың тәнен тотош ҡаплап торған сәс кеүек төктәр;* 2. *һарыҡ, кәзә һ. б. ҡырҡып алынған шул нәмә)* шерсть, руно, волосы *(на теле)*

**йөнҡырғыс** *зоол. (малдың йөнөн ҡырҡып ашай торған бет)* власоед

**йөрөк** быстроногий; **йөрөк ат** быстроногий конь

**йөрөмлө** ходкий; **йөрөмлө айғыр** ходкий жеребец

**йөрөмтәл** любящий бродить; **йөрөмтәл мал** любящий бродить скот

**йөрөмһеҙ** *(алыҫ юлға йөрөй алмай тиҙ арыусан)* неходкий

**йөрөмһәк** *(күп йөрөргә яратыусан)* любящий рыскать

**йөрөшлө ат** *то же, что* **аҙымлы ат**

**йөрөшләү** *(еңел генә баҫып, шәп атлау)* ходить, идти особым аллюром *(средним между шагом и рысью)*

**йөрәк** *анат.* сердце

**йөрәк ите** *анат. (аттың тояғы аҫтындағы йомшаҡ ит; тояҡ мендәре)* мякиш копыта

**йүгерек ат** быстроногий конь

**йүгән** *(менге һәм екке малдың башын тотор өсөн ауыҙлыҡлы итеп бауҙан эшләнгән нәмә)* узда, уздечка

**йүгән кейҙереү** надевать уздечку

**йүгәнде теҙгенләү** прикрепить повод к узде

**йүгән һабағы** поводок недоуздка

**йүгәнләү** надевать узду, взнуздывать

**йүгәнһеҙ ат** невзнузданная лошадь

**йүкә мөйәт** лыковая хомутина

**йылан баш эйәр** *этн.* седло в виде головы змеи

**йылғыр** быстрый

**йылҡы** конь, лошадь

**йылҡы йылы** *этн. (ун ике йыллыҡ мөсәлдең етенсе йылы)* год лошади *(седьмой год двенадцатилетнего животного цикла у мусульман)*

**йылҡы ите** конина

**йылҡы көтөүе** табун лошадей

**йылҡы көтөүсеһе** табунщик

**йылҡы малы** кони, лошади *(как вид скота)*

**йылҡы орлоғо** кобыла-матка

**йылҡы тыуы** *то же, что* **йылҡы көтөүе**

**йылҡы әйҙәү** сгонять коней

**йылҡысы 1.** коневод; **2.** табунщик

**йылҡысылыҡ** коневодство

**йылҡысылыҡ заводы** коневодческий завод

**йылҡысылыҡ менән шөғөлләнеү** заниматься коневодством

**йылҡысылыҡты үҫтереү** развивать коневодство

**йылҡысылыҡ фермаһы** коневодческая ферма

**йыллаған башмаҡ** годовалая телка

**йылы ит** парное мясо

**йыуан эсәк** *анат. то же, что* **туҡ эсәк**

**йыуын** *анат. (һыйырҙың һигеҙгүҙ өҫтө – быҙаулар алдынан йомшап соҡорланып төшә)* крестец

**йәй йөрөм ат** конь летнего нагула

**йәйҙәүкә** *диал. то же, что* **йәйләүес**

**йәйек ҡойроҡ** пушистый хвост; **йәйек ҡойроҡ бейә** кобыла с пушистым хвостом

**йәкәл** *анат. то же, что* **бәкәл, бәкәлсәй**

**йәкәл быуыны** *анат.* путовый сустав

**йәлдәк бәрәс** слабый ягненок

**йәйләү** летнее пастбище, летний выпас, выгон

**йәйләүгә сығарыу** пускать на летнее пастбище

**йәйләүес** ягненок или козленок, родившийся летом

**йәслә** *(бесән һала торған урын)* кормушка, ясли

**йәтимәк** *(етем ҡалған малға ҡарата)* осиротевший

**йәш үрсем** молодняк

**йәшән** зеленый луг

**йәшәндә йөрөү** пастись на зеленом лугу

# К

**карҙы** *то же, что* **саңлау**

**кашар** *то же, что* **һарыҡ кәртәһе**

**кеҙә** путы *(для подтягивания задней ноги кобылы к шее при дойке)*

**кеҙәләү** спутывать ноги *(кобыле при дойке)*

**кейеҙ тирлек** войлочный потник

**кейәнке** *вет.* йылҡы ауырыуы

**кейәү аты** *этн.* конь, подаренный жениху отцом невесты

**келен** *вет.* язва *(слизистой оболочки языка животных)*

**керитет** *(тоҡомло үгеҙ)* племенной бык

**керпе** *этн. то же, что* **морондоҡ**

**кесе бәйге** *спорт.* малые скачки *(на молодых лошадях перед большими скачками)*

**кешнәү** ржать, ржание

**кешнәшеү** перекликаться ржанием

**кешән** *(йылҡы малының алғы аяғын артҡы аяғының бөгәр өҫтөнә тарттырып бәйләгән бау; тышау)* путы для лошади

**кешәнләү** надевать путы

**кешәмеш** *анат. (ат аяғының тышау һала торған бәкәлдән өҫкө ере, тупырсыҡ)* лодыжка у лошади *(место наложения пута)*

**кешәнат** *(өйрәтелмәгән ат)* необъезженная лошадь

**киҙәгәй** *анат.* **1.** *(йылҡының аҫҡы яңаҡ һөйәге)* нижняя челюсть лошади; **2.** *(теш ите)* десна

**киҙәгәй ауырыуы** *вет.* паралич языка

**кикел** *(йылҡы малының маңлай сәсе)* челка

**кикел ял** *то же, что* **кикел**

**киләңке** *вет.* недержание мочи *(у кобылиц)*

**киләңке булыу** страдать недержанием мочи

**кинйә ҡымыҙ** *(көҙгө, иң аҙаҡҡы ҡуйы ҡымыҙ)* осенний густой кумыс

**киңерҙәк** *диал. то же, что* **боғарлаҡ**

**кир** *(һарғылт туры)* мухортый *(гнедой с желтоватыми подпалинами)*; **кир ат** мухортый конь

**киреп бәйләү** *(ат кешнәмәһен өсөн башын күтәреп бәйләү)* подтягивание головы лошади кверху для предупреждения ржания

**кир туры** гнедо-мухортый; **кир туры ат** гнедо-мухортая лошадь

**кирсәй** мухортый конь

**киртартма** *уст.* нагайка с вытягивающейся кистью *(у которой плеть после удара убирается в кнутовище)*

**киске һауым** вечерний удой

**кисәү** поздно спарившаяся *(о самке домашних животных)*

**кисәү һарыҡ** поздно спарившаяся овца

**коновод** *воен. уст. (ғәскәри һыбайлылар йәйәүләгән саҡта аттарҙы ҡарап тора торған кеше)* коновод

**көбө** *этн.* кюбю *(сосуд для сбивания кумыса из полого ствола дерева высотой около метра)*

**көбө бешкәге** пахталка для сбивания кумыса

**көҙгө бәрәс** осенний ягненок или козленок

**көҙгө бүлтерек** *(көҙ тыуған бәрәс)* осенний приплод

**көҙләү** осенняя стоянка *(при кочевке)*

**көҙләүес** осенний приплод *(о ягнёнке или козлёнке)*

**көҙәм** шерсть осенней стрижки

**көҙәү** подстригать *(гривы и хвосты у стригунов весной)*

**көйҙөрөү** *(аталыҡ енесе биҙҙәрен алып ташлау)* холостить, кастрировать

**көйҙөргән үгеҙ** кастрированный бык

**көйөш** *(ҡайһы бер малдарҙың ҡарындан кире сығарып көйшәгән аҙығы)* жвачка *(животных)*

**көйөш ҡайтарыу** отрыгивать пищу для вторичного пережевывания

**көйөшлө мал** жвачные животные

**көйшәм** *то же, что* **көйөш**

**көйшәү** жевать, пережёвывать

**көйшәүселәр** *зоол.* жвачные

**көйәк** *(ваҡытһыҙ артылып, ваҡытһыҙ бәрәсләү булмаһын өсөн тәкәләрҙең бауыр аҫтын бәйләп ебәрә торған кейеҙ; бауырлыҡ)* набрюшник *(специальная повязка для баранов и козлов для регулирования случки)*

**көйәнтәбил ат** *(эйәрһеҙ ҙә менеп була торған һығылма билле ат)* конь с гибкой спиной, на котором можно ездить верхом без седла

**көлөкәй** *диал. то же, что* **ҡолон**

**көләпәрә** *этн. (һарыҡ тиреһенән тегелгән осло бүрек)* головной убор из овчины

**көлһыу** пепельный; **көлһыу байтал** пепельная кобыла

**көмөш ҡашлы эйәр** *этн.* седло с серебряной лукой
**көңгөрәй** *диал. (ҡыңғырау)* ботало
**көпкә** выгородка для мелкого скота
**көр** упитанный, откормленный; **көр мал** упитанный скот
**көрлөк** упитанность, жирность
**көрөк** *диал. то же, что* **көр**
**көрпә** *(ҡуңыр һыйырға ҡарата)* бурый; **көрпә һыйыр** бурая корова
**көрпәкәй** бурая корова
**көртлөк** *диал. то же, что* **толоп**
**көртнәсе** *диал. (мал эйәһе)* домовой *(скота)*
**көрәйеү** жиреть, набирать вес, становиться упитанным *(о скоте)*
**көрәйтеү** откармливать, доводить до надлежащей упитанности
**көрән** *(ҡыҙғылт ҡара)* бурый, буровато-коричневый; **көрән ат** бурый конь
**көрәнкәй** бурая корова
**көрәнсәй** бурый конь
**көтөү I** пасти; пастьба
**көтөү II** *(утлауҙа ҡараулы йөрөгән бер төркөм мал)* стадо; гурт, косяк, табун; отара
**көтөү малы** пастбищный скот
**көтөүлек** пастбище, выгон
**көтөүсе** пастух
**көтөүсе ярҙамсыһы** подпасок
**көтөүсе муҡсаһы** *бот.* пастушья сумка
**курба** *вет.* курба *(болезнь суставов у лошадей)*
**күгелдер** *диал. (күк төҫ)* бурый *(о масти коровы)*
**күгә** *(эйәр ҡаштарын беркеткән яҫы ҡайыш)* ремешки, укрепляющие луки деревянного седла
**күгәрсен түш ат** конь с грудью как у голубя
**күҙ** *анат.* глаза
**күҙгәнсәк** *анат. то же, что* **күҙләнсек**
**күҙҙек** *диал. то же, что* **колаҡһа**
**күҙелдерек** *диал. то же, что* **колаҡһа**
**күҙләнсек** *анат. (көйөшлө малдың ашҡаҙанындағы икенсе бүлек; таҙ ҡарын)* сычуг
**күҙәгә** *этн. (һыйырҙың ыҫлаған елен тиреһенән ҡылыслап, моронлап яһаған һауыт; мурҙай)* сосуд из шкуры вымени коровы
**күк** сивый; **күк ат** сивая лошадь, сивка

**күк ала** сиво-пегий; **күк ала айғыр** сиво-пегий жеребец

**күк буҙ** белый с голубоватым оттенком, сивый, серый, светло-серый; **күк буҙ ат** белый конь с голубоватым оттенком

**күк бүртә** светло-караковый; **күк бүртә ат** светло-караковая лошадь

**күкрәк** *анат.* грудь

**күкрәк ауыҙы** *анат.* подвздошная часть

**күкрәк ҡыуышлығы** *анат.* грудная полость

**күкрәк ситлеге** *анат.* грудная клетка

**күкрәк умыртҡалары** *анат.* грудные позвонки

**күкрәк һөйәге** *анат.* грудинка

**күк саптар** седо-игреневый; **күк саптар айғыр** седо-игреневый жеребец

**күк тарлан** чалый; **күк тарлан ат** чалый конь

**күк юрға** иноходец сивой масти

**күксә (күксәй, күксәнәй)** сивка

**күкәй** *анат. (иркәктәрҙең енси күҙәнәктәр эшләп сығара торған ҡуш биҙе)* яичко

**күлек** *(эш малы)* рабочий скот

**күмелдерек** *(аттың түше аша тарттырылған эйәр ҡайышы)* нагрудник седла

**күмәгәй** *анат. (һыйыр малының урты)* полость рта *(у коровы)*

**күн** *(йөнөн екетеп, иләгән, эшкәртелгән тире)* кожа; **ҡоба күн** сыромять; **шыры күн** кожа для посуды *(обработанная копчением)*

**күн иләүсе** кожевник

**күн заводы** кожевенный завод

**күнәкәй** корова серо-белой масти

**күңәҙәк** *(ҡымыҙ көбөнө эсендә барлыҡҡа килгән күк; үңәҙ)* плесневой налет *(обычно на посуде из-под кумыса)*

**күпкәк** *вет. (һыйыр малының эсен күптерә торған ауырыу)* вздутие живота у коровы

**күрпә** *(яңы тыуған һарыҡ бәрәсе)* новорожденный ягненок

**күс** *(йәйгелеккә күсеп йәшәгән урын)* летовка

**күс юлы** дорога на летовку

**күсер** кучер

**күҫтек** *диал. то же, что* **ҡолаҡһа**

**күтән** *анат.* прямая кишка

**күтәртеү** дойти до крайней степени истощения *(о домашних животных)*

**күшәм** *диал. то же, что* **көйөш**
**кәбәркә** *диал. то же, что* **көпкә**
**кәгез мал** тощий скот
**кәзә** коза
**кәзә бәрәсе** козленок
**кәзә ите** козлятина
**кәзә кәбеҫтәһе** *бот.* икотник
**кәзә ҡымыҙы** кумыс из козьего молока
**кәзә талы** *бот.* ракита
**кәзә тәкәһе** козел
**кәзә һаҡалы** *бот.* козлобородник
**кәзә һөтө** козье молоко
**кәзә-һарыҡ** *собир.* мелкий скот
**кәзә-һарыҡ аҫрау** держать мелкий скот
**кәртә** *(мал торлағы)* хлев
**кәртәгә инеү** *(көтөүҙән туҡтау)* перестать пастись
**кәртәләге мал** стойловый скот
**кәртәгә ябыу** загнать скотину в хлев
**кәртә-ҡура** *собир.* скотный двор
**кәртә эйәһе** *(мал эйәһе)* домовой *(скота; в хлеву)*
**кәүҙә** *анат. (мал-тыуарҙың баш-тояғынан башҡа төп тән өлөшө, буй-һыны)* туловище
**кәшен 1.** *этн. (быҙау тиреһенән йөн яғын тышҡа ҡуйып теккән тоҡсай; сәрмә)* кэшэн *(мешок, сшитый из телячьей шкуры шерстью наружу);* **2.** *вет.* вздутие живота *(болезнь рогатого скота)*

## Ҡ

**ҡабырға** *анат. (умыртҡа һөйәгенән күкрәккә табан дуғаланып килгән тар ялпаҡ һөйәк)* ребро; **ҡулан ҡабырға** короткое ребро
**ҡабырға аты** *диал. то же, что* **мисәү аты**
**ҡабырға һөйәге** *анат.* реберная кость
**ҡабырғалыҡ** *диал. то же, что* **бауырлыҡ**
**ҡаҙна I** *анат.* десна
**ҡаҙна II** *(утлыҡ)* ясли
**ҡаҙы 1.** жир конский, покрывающий брюшину и ребра; **2.** домашняя колбаса из конины: жира с мясом
**ҡаҙы баулау** связать концы домашней колбасы для хранения в подвешенном состоянии

**ҡаҙылыҡ 1.** *анат.* сальник большой; **2.** домашняя колбаса из конского жира с мясом

**ҡаҙыял** жир с области конской гривы

**ҡайҡы бил** вогнутая, опущенная поясница; **ҡайҡы билле ат** лошадь с опущенной поясницей

**ҡайсы ҡолаҡ** остроухий; **ҡайсы ҡолаҡ бейә** остроухая кобыла

**ҡайсылау** *(текә сәнсеп, алмаш-тилмәш йөрөтөү)* прядать *(ушами)*

**ҡайыш дилбегә** ременные вожжи

**ҡаҡлаған ҡаҙы** вяленая домашняя колбаса из конского сала с мясом

**ҡалаҡ** *этн.* лопаточка *(при помощи которой снимают шкуру)*

**ҡалаҡ һөйәге** *анат.* лопатка

**ҡалда** *(ялан кәртә)* загон

**ҡалдау** *(тәненә ит ҡунмаған)* сухопарый, костлявый; **ҡалдау ат** сухопарая лошадь; **ҡалдау һыйыр** костлявая корова

**ҡалҡыс һөйәге** *диал. то же, что* **ҡалаҡ һөйәге**

**ҡалъя** *этн. (бешкән иттең тәмле, майлы киҫәге)* кусок жирного, вареного мяса

**ҡамасау** *вет.* экзема *(кожное заболевание животных)*

**ҡамаш** *диал. то же, что* **ҡаҙна**

**ҡамсы** плеть, плетка, нагайка, хлыст

**ҡамсы үреү** плести плетку

**ҡамыт** *(йөк тағып йөрөтөү өсөн екке малдың муйынына кейҙерә торған нәмә)* хомут

**ҡамыт ағасы** клешни хомута

**ҡамыт бауы** гуж, гужи

**ҡамыт-дуға** *собир.* сбруя

**ҡамыт кейеҙе** подушка хомута

**ҡамыт күне** кожаная обшивка хомута

**ҡамыт-ҡаранты** *диал. то же, что* **ҡамыт-дуға**

**ҡамыт-ҡулан** *диал. то же, что* **ҡамыт-дуға**

**ҡамыт мөйәте** хомутина

**ҡамыт һуғыу** натереть хомутом

**ҡамыт мөйәтләү** хомут покрыть хомутиной

**ҡамытбау** *то же, что* **ҡолаҡбау**

**ҡамыт-дуға** *собир.* сбруя

**ҡамытлау** надевать хомут

**ҡамытлап егеү** запрягать с хомутом

**ҡамыттыҡ** *анат. то же, что* **ҡамыт улағы**

**ҡамыт улағы** *анат.* яремный желоб

**ҡамыт-ыңғырсаҡ** *собир. то же, что* **ҡамыт-дуға**

**ҡамыт энәһе** большая игла для шитья

**ҡамыш ҡолаҡ** с длинными ушами; **ҡамыш ҡолаҡ айғыр** жеребец с длинными ушами

**ҡан ерән** медно-красный *(о масти лошади)*; **ҡан ерән бейә** медно-красная кобыла

**ҡантар** *(ҡыҫҡа теҙген)* короткие поводья

**ҡантарыу** **1.** *(аттың теҙгенен ҡыҫҡартып бәйләү)* привязать лошадь за поводья, подняв или закрутив голову; **2.** *(һимеҙ атты сыныҡтырыу өсөн төнгөлөккә ашатмай-эсермәй башын күтәреп бәйләп ҡуйыу)* ставить упитанную лошадь на ночь в стойло без корма и воды для сбрасывания веса и для закалки

**ҡанъяға** торока *(төрлө нәмә бәйләү өсөн эйәрҙең ҡапталына тағылған ике армытлы ҡайыш бау)*

**ҡаңғыл** *(тәненә ит ҡунмаған)* сухопарый, сухощавый, худощавый; **ҡаңғыл мал** сухопарая скотина

**ҡапасаҡ** *диал. то же, что* **салыу һөйәге**

**ҡаптал** **1.** *(эйәр-ыңғырсаҡтың ат арҡаһына ята торған ике ҡанаты)* ленчик *(часть седла)*; **2.** спина лошади, куда ставится седло и седелка

**ҡара I** вороной; **ҡара ат** вороной конь

**ҡара ала** темно-пегий; **ҡара ала бейә** вороно-пегая кобыла

**ҡара аҡһаҡ** *вет.* неизлечимая хромота

**ҡара буҙ** темно-сивый; **ҡара буҙ ат** темно-сивый конь

**ҡара ерән** темно-рыжий; **ҡара ерән ҡолон** темно-рыжий жеребенок

**ҡара кир** темно-мухортый; **ҡара кир айғыр** темно-мухортый жеребец

**ҡара көрән** темно-бурый; **ҡара көрән һыйыр** темно-бурая корова

**ҡара күк** темно-сивый; **ҡара күк байтал** темно-сивая кобыла

**ҡара II** *(эре мал, йылҡы-һыйыр малы)* крупный скот

**ҡаракүл** *(ҡыҫҡа ғына бөҙрә йөнлө затлы һарыҡ тоҡомо)* каракуль

**ҡаракүл һарығы** *(ҡыҫҡа ғына бөҙрә йөнлө затлы һарыҡ тоҡомо)* каракульская овца

**ҡаракүлселек** каракулеводство

**ҡара ҡолаҡ** темноухий; **ҡара ҡолаҡ ат** темноухий конь

**ҡара мал** *диал. то же, что* **эре мал**

**ҡара сыбар** темно-пегий; **ҡара сыбар бейә** темно-пегая кобыла

**ҡараҫҡаҡ** *вет. диал.* хромой *(от рождения)*

**ҡара тояҡ** *диал. то же, что* **тояҡ тырнағы**

**ҡара туры** темно-гнедой; **ҡара туры айғыр** темно-гнедой жеребец

**ҡара тырнаҡ** *вет.* дерматит *(болезнь копыт)*

**ҡара үпкә** *вет.* чахотка *(хроническая болезнь легких)*

**ҡара һары** темно-желтый; **ҡара һары тай** темно-желтый жеребенок

**ҡара юрға** иноходец вороной

**ҡарағусҡыл** *(ҡараға тартым)* темный; **ҡарағусҡыл ерән бейә** темно-рыжая кобыла

**ҡарлуғас ботло** с длинными тонкими ногами *(как у ласточки)*; **ҡарлуғас ботло айғыр** жеребец с длинными тонкими, как у ласточки, ногами

**ҡарпыш ҡолаҡ** лопоухий; **ҡарпыш ҡолаҡ ат** лопоухий конь

**ҡарсыға түш айғыр** жеребец с ястребиной грудью

**ҡарта** *анат. (йылҡы малының туҡ эсәге)* прямая кишка лошади

**ҡары** *анат. уст. то же, что* **енсек**

**ҡарын** *анат. (1. ашты ҡабул итеп эшкәртә торған ағза; ашҡаҙан; 2. һуйған малдың эс-ҡарыны)* желудок

**ҡарын аҫты биҙе** *анат.* поджелудочная железа

**ҡарындыҡ** *этн. (һыйыр ҡарынының эске ҡатлауынан, киреп киптереп эшләнгән йоҡа яры)* перепонка *(сделанная из брюшины жвачных животных)*

**ҡарындыҡ тәҙрә** *уст.* окно, затянутое пленчатой брюшиной

**ҡарынъяу** *анат.* 1. *(малдың ҡарынын ҡаплаған эс майы; ҡарын майы)* сальник; 2. *(ҡорһаҡ ҡыуышлығындағы ағзаларҙы ҡаплап торған ҡатлам-ҡатлам май йыйырсыҡтары)* внутреннее сало

**ҡасар** телка полуторагодовалая

**ҡасаған** 1. *(ҡасып та быҙауламаған мал)* яловая *(длительное время)* корова; 2. бегающая из стада скотина

**ҡасаған үгеҙ** убегающий из стада бык

**ҡассап** *уст.* 1. убойщик; 2. место убоя скота, бойня

**ҡассапсы** *уст.* мясник

**ҡасыр** *(айғыр менән ишәктән булған ҡатнаш тоҡом хайуан)* лошак

**ҡасырыу** случать, случка, осеменение

**ҡасырыу урыны** случной пункт, место для случки скота

**ҡасыу** случаться, случка, течка

**ҡасыу осоро** период течки

**ҡаҫа** *анат.* **1.** *(айғыр ғәүрәтенең тышҡы ҡабы)* крайняя плоть; **2.** *(айғыр тоҡсаһы)* мошонка, яичник

**ҡатлансыҡ I** *анат.* *(көйөшлө малдың ашҡаҙанындағы дүрт бүлектең береһе; ҡатлы-ҡатлы булып торған ҡарын; ҡырҡ ҡарта)* книжка *(часть желудка у жвачных животных)*

**ҡатлансыҡ II** обшитый кожей войлок, накладываемый на седло

**ҡатма 1.** *(үҫә алмай ҡатып ҡалған)* щуплый, хилый; **2.** осенний приплод овец и коз

**ҡатма быҙау** щупленький теленок

**ҡатнаш тоҡом** *(төрлө тоҡом ҡатнашҡандан килеп сыҡҡан мал)* помесь

**ҡатылыҡ** *диал.* *(тапанды)* объедки

**ҡаты морон** *эвф.* свинья

**ҡаты салыу** *диал. то же, что* **салыу һөйәге**

**ҡатын-ҡыҙ эйәре** *этн.* женское седло

**ҡауҙан** *(яҙғы йөн)* весенняя стрижка шерсти

**ҡаш** *(эйәрҙең алдан һәм арттан дуғаланып ҡалҡып торған өлөшө)* лука *(седла)*

**ҡашаныу** мочиться *(о лошади)*

**ҡашандырыу** подождать, пока лошадь справит малую нужду *(во время езды)*

**ҡашҡа** с белой продолиной на лбу, с лысиной; белая отметина

**ҡашҡа айғыр** жеребец с белой проточиной на лбу

**ҡашлау I** *(ҡаш яһап ҡуйыу)* торочить луку

**ҡашлау II** *(йүгән маңлайсаһы)* налобник, налобный ремень

**ҡоба I** *(салт асыҡ булмаған, көлһыуланып торған, аҡһыл һары)* светло-бурый, светло-коричневый, палевый; **ҡоба ат** сиво-бурая лошадь; сивка-бурка; **ҡоба һыйыр** светло-бурая корова

**ҡоба II** недубленный, сыромятный; **ҡоба күн** сыромятная кожа

**ҡоба ҡыҙыл** муругий; **ҡоба ҡыҙыл байтал** муругая кобыла

**ҡоба туры** каурый; **ҡоба туры айғыр** каурый жеребец

**ҡойошҡан** *(эйәр алға шылмаһын өсөн аттың ҡойроғо аҫтынан тарттырыла торған бау)* подхвостник *(ремень у седла, идущий под хвостом лошади)*

**ҡойроҡ** *анат.* хвост

**ҡойроҡбау** *то же, что* **ҡойошҡан**

**ҡойроҡ өҫтө** *анат.* круп

**ҡойроҡ төбө** *анат.* репица *(хвостовой отросток)*

**ҡойроҡ һөйәге** *анат.* репица

**ҡола** *(үҙе һары, ҡойроҡ-ялы ҡара)* саврасый; **ҡола айғыр** саврасый жеребец

**ҡола ала** саврасо-пегий; **ҡола ала тай** саврасо-пегий жеребенок *(по второму году)*

**ҡола ерән** булано-саврасый; **ҡола ерән айғыр** булано-саврасый жеребец

**ҡолажын** *диал. (икенсе быҙаулар һыйыр)* корова второго отела

**ҡола ҡашҡа ат** буланый конь с белой отметиной

**ҡолаҡ** *анат.* ухо, уши

**ҡолаҡ ҡарпайтыу** навострить уши

**ҡолаҡ торғоҙоу** *то же, что* **ҡолаҡ ҡарпайтыу**

**ҡолаҡбау** *(ҡамыттың тәртә менән дуға башына эләктерә торған бауы)* гуж

**ҡолаҡһа** *(сығынсы аттың күҙен ҡаплау өсөн йүгәнгә ике яҡлап тегелгән күн)* шоры уздечки

**ҡолан I** *(һорғолт һары)* светло-коричневый; светло-каштановый; **ҡолан тай** светло-коричневый жеребенок

**ҡолан II** *(кәүҙәһе аттан бәләкәйерәк, башы ҙурыраҡ, текә яллы, йомро тояҡлылар ғаиләһенә ҡараған ишәк ҡойроҡло ҡырағай дала аты)* кулан, онагр

**ҡолан көтөүе** стадо куланов

**ҡолаңса** *вет.* твердая мозоль на внутренней стороне передних ног лошади

**ҡоласай** савраска

**ҡолатҡа** *уст.* деревяная колодка, накладываемая на ноги неудержимых лошадей

**ҡолоҡ** *диал. то же, что* **байтал**

**ҡолонҡай** *ласк. то же, что* **ҡолон**

**ҡолонҡас** *диал. то же, что* **ҡолон**

**ҡолон** *(йылҡы малының бер йәшкә тиклемге балаһы)* жеребенок *(до года)*

**ҡолон ағытыу** пускать жеребят с кобылицами на волю после дойки

**ҡолон ите** жеребятина

**ҡолондарҙы елеләү** оставлять жеребят на привязи
**ҡолондар сыңрауы** нежное ржание жеребят
**ҡолон кешнәүе** жеребячье ржание
**ҡолон таҡыры** *то же, что* **елелек** привязь
**ҡолон тилетеү** приучить жеребенка сосать другую кобылицу
**ҡолон һалыу** *вет.* выкидыш у кобылы
**ҡолонғойроҡ** *бот.* вейник наземный
**ҡолонлау** жеребиться
**ҡолонсаҡ** *(яңы тыуған йәш йылҡы малы – өс айға тиклем)* жеребенок *(до трех месяцев)*; жеребенок-сосунок
**ҡолос** *то же, что* **ҡолон**
**ҡонажын, ҡонажын байтал** кобыла-трехлетка
**ҡонайын** *(тыу һыйыр)* яловая корова
**ҡонан** жеребец-трехлетка
**ҡонан үгеҙ** *(ике йәштән өс йәшкә тиклемге үгеҙ)* бык-трехлетка *(реже)*
**ҡонанса** *диал. то же, что* **ҡонажын**
**ҡорбан** *рел. (мосолман динендә: алла исеменә салынған мал)* жертва, жертвоприношение в память усопшего
**ҡорбан байрамы** *(ураҙанан һуң 70 көн уҙғас, Зөлхизә айының 10-сы көнөндә уҙғарыла торған дини байрам)* праздник жертвоприношения – на десятый день месяца Зульхиджа
**ҡорбан малы** *этн.* жертвенное животное
**ҡорбан әйтеү** дать обет жертвоприношения
**ҡормандыҡ** *то же, что* **ҡорбан малы**
**ҡоро ҡорсаңғы** *вет.* сухая чесотка
**ҡороҡ** *(иректәге малды тотоу өсөн ҡулланылған мәскәүле ҡолға)* лассо, укрюк
**ҡороҡ ташлау** бросать лассо
**ҡороҡ һалыу** набрасывать лассо
**ҡороҡ тотоу** *этн.* выбор коня во время свадьбы
**ҡороҡлау** набрасывать лассо
**ҡоромта** *то же, что* **сбруй**
**ҡоро теш** *анат. (артҡы урт теше)* волчий зуб *(у лошади)*
**ҡорсаңғы** *вет.* чесотка
**ҡорсаңғы ат** чесоточная лошадь
**ҡорсаңғы һарыҡ** паршивая овца
**ҡорһаҡ** *анат.* брюхо
**ҡорһаҡ ите** брюшина

**ҡорһаҡ ҡыуышлығы** брюшная полость

**ҡотан** плетеный хлев *(для овца)*

**ҡотан үреү** сплести хлев

**ҡотло мал** скотина, приносящая хороший приплод и продолжающая породу

**ҡотороҡ** *вет.* бешенство

**ҡотороҡ йоғоу** заразиться бешенством

**ҡотороҡ менән ауырыу** заболеть бешенством

**ҡотороҡтан прививка яһау** прививка против бешенства

**ҡотороу** *вет.* беситься, становиться бешеным *(о животных)*

**ҡубаға һебә** *(йылҡы малының бөйөрөнә дуғалай килеп тоташҡан ҡыҫҡа ҡабырғаһы)* короткое ребро *(у лошадей)*

**ҡуҙы** *(һарыҡ бәрәсе)* ягненок

**ҡуҙы тиреһе** ягнячья шкура, шкура ягненка

**ҡуй, ҡуй һарығы** *(оса майы яҫтыҡланып торған үҙенә бер төрлө һарыҡ)* курдючная овца

**ҡуй йылы** *этн. (ун ике йыллыҡ мөсәлдең һигеҙенсе йылы)* год овцы *(восьмой год двенадцатилетнего животного цикла у мусульман)*

**ҡуй майы** курдючный жир, курдючное сало

**ҡуйсы** чабан *(пасущий курдючных овец)*

**ҡуйылыҡ** жирность

**ҡулан ҡабырға** *анат. (иң аҫтағы ҡыҫҡа ҡабырға)* короткое ребро

**ҡулау** хромая на переднюю ногу *(о лошади)*

**ҡулау ат** лошадь, которая хромает на переднюю ногу

**ҡулашҡа** *(аттың аяғы аяҡҡа бәрелмәһен өсөн бәкәленә ураған бәй)* повязка для бабки лошади *(на надкопытные суставы ног, предостерегающая от соприкосновения копыт)*

**ҡулбаш** *анат.* плечо

**ҡулбаш быуыны** *анат.* плечевой сустав

**ҡулбаш һөйәге** *анат.* плечевая кость

**ҡулға эйеү** *(һыйырҙы быҙауһыҙ һауыу)* доить корову без подпуска теленка

**ҡулдағы мал** наличный скот

**ҡулдан һауыу** *(һыйырҙың быҙауын имеҙҙермәй һауыу)* ручная дойка

**ҡулдау** *этн. то же, что* **ҡуллыҡ**

**ҡуллыҡ** *этн.* куллык *(узкогорлый сосуд из шкуры передней ноги лошади)*

**ҡулсаҡ** *этн. то же, что* **ҡуллыҡ**

**ҡум** *(эйәр ҡапталына аҫтан ҡуша тегелгән күн тышлы кейеҙ)* чепрак

**ҡуңыр** *(ҡыҙғылтыраҡ ҡара, көрәнһыу)* темно-бурый, бурый; **ҡуңыр һыйыр** бурая корова, буренка

**ҡур I** закваска, солод *(ҡымыҙ, ҡатыҡ әсеткеһе)*

**ҡур II** основа, фонд *(башланғыс, нигеҙ булған мал-мөлкәт)*

**ҡур өйөр** косяк-элита, фондовый косяк *(про табун лошадей)*

**ҡур йылҡы** *то же, что* **ҡур өйөр**

**ҡура** хлев

**ҡураҡ** *(ҡурға ҡалдырылған өйөр айғыры)* породистый жеребец-производитель

**ҡуралағы мал** стойловый скот

**ҡурҙаҡ** *кул. (ҡурылған ит)* жареное мясо

**ҡурйын** переметная сума

**ҡурйыу** перекисать *(о кумысе)*

**ҡурйыған ҡымыҙ** перекисший кумыс

**ҡурландырыу** освежать, омолаживать кумыс, добавляя свежее молоко

**ҡурлау** *(ҡур менән емләү)* заквашивать *(кумыс)*

**ҡурлы** *(бәрәкәтле, үрсемле)* плодовитый

**ҡурлы мал** плодовитый скот

**ҡусҡаҡ** двухгорбый верблюд

**ҡусҡар, ҡусҡар тәкә** племенной баран

**ҡуш** парный; **ҡуш ат** пристяжная лошадь

**ҡушар** *анат. то же, что* **енсек**

**ҡуштояҡ** *этн. диал. (бүләк итеп бирелгән мал)* скот, преподнесенный в дар

**ҡуш (айыры) тояҡлылар** *зоол.* парнокопытные

**ҡушаҡлау** *(эргәләш итеү)* находиться рядом

**ҡушарбаш** *анат. то же, что* ***туларһыҡ***

**ҡушйелкә** *вет.* мозолистое утолщение на холке лошади от натирания хомутом

**ҡушкендек** *вет.* двойной пупок *(болезнь пупка жеребят)*

**ҡушҡар** *анат. то же, что* **енсек**

**ҡушсы** *уст.* проводник *(в пути)*

**ҡуштамаҡ** *вет.* зоб или базедова болезнь

**ҡушыу** *(ашарға йәки имергә ҡуйыу)* подпускать, припускать; допуск

**ҡуяға** *то же, что* **ҡанъяға**

**ҡуянсыҡ** *вет.* болезнь суставов *(у мелкого скота)*

**ҡыҙыл** красный *(о масти животных)*

**ҡыҙыл көрән** красно-бурый; **ҡыҙыл көрән ҡолон** красно-бурый жеребенок

**ҡыҙыл күк** красно-сивый; **ҡыҙыл күк ат** красно-сивая лошадь

**ҡыҙыл ҡола** красно-саврасый; **ҡыҙыл ҡола айғыр** красно-саврасый жеребец

**ҡыҙыл туры** красно-гнедой; **ҡыҙыл туры ат** красно-гнедая лошадь

**ҡыйма** *анат. диал. то же, что* **туҡ эсәк**

**ҡыйты ат** *диал. то же, что* **билендәк ат**

**ҡыл** *(аттың ялы, ҡойроғондағы сәсе)* волос

**ҡылауыр** *вет. (ҡып-ҡыҙыл булып сурайып, эренләп аҡҡан муйын шешеге)* туберкулез шейных желез

**ҡыл дилбегә** волосяные вожжи

**ҡыл тышау** волосяные путы

**ҡылау** *вет. (ҡолондарҙың теленә сығып, имергә ҡамасаулап, эсен китәргән сабыртҡы)* колибактериоз *(у жеребят)*

**ҡылаулау** болеть колибактериозом

**ҡылғойроҡ** *зоол.* шилохвост

**ҡылйебәк** *бот.* повилика

**ҡылйылан** *зоол.* волосатики

**ҡылс-ҡылс** подражание звуку скрежета *(удил во рту лошади)*; **ҡылс-ҡылс итеү** скрежетать удилами

**ҡымран** *(һыйыр һөтө ҡушылған ҡымыҙ)* кумыс, смешанный коровьим молоком

**ҡымыҙ** *(бейә һөтөнән әсетеп яһалған ҡымыҙ)* кумыс

**ҡымыҙ бешеү** взбивание кумыса

**ҡымыҙ ҡуры** закваска кумыса

**ҡымыҙ яһау** приготовление кумыса

**ҡымыҙ менән дауалау** лечение кумысом

**ҡымыҙлыҡ I** кумысная *(помещение, где делают кумыс)*

**ҡымыҙлыҡ II** *бот.* горец альпийский

**ҡымыҙсы 1.** кумысодел; **2.** кумысник, тот, кто лечится кумысом

**ҡымыҙсылыҡ** производство кумыса

**ҡымыҙсылыҡ фермаһы** ферма по производству кумыса

**ҡымыҙхана** кумысхана; кумысная

**ҡыр кәзәһе** *зоол* косуля

**ҡыр һыйыры** *зоол.* лось

**ҡырас яллы айғыр** жеребец с крутой гривой

**ҡырғын** *вет.* мор *(повальная смерть, эпидемия)*

**ҡырғыс** *(йылҡы малын ҡырып таҙартыу өсөн ҡулланылған тешле тараҡ)* гребница

**ҡыржан** *(оҙон тороҡло)* с длинным туловищем; **ҡыржан бейә** кобыла с длинным туловищем

**ҡырҡ ҡарта** *анат. (көйөшлө малдың ашҡаҙанындағы дүрт бүлектең береһе; ҡатлы-ҡатлы булып торған ҡарын; ҡатлансыҡ)* книжка *(часть желудка у жвачных животных)*

**ҡырҡмыш** *(ялы, ҡойроғо ҡырҡылған)* стригун, стригунок

**ҡырҡмыш тай** жеребенок-стригунок

**ҡырҡҡыс** ножницы *(для стрижки коз, овец)*

**ҡырҡым 1.** стрижка *(овец)*; **2.** настриг

**ҡырҡым ваҡыты** пора стрижки

**ҡырсау** *(тәбиғәтенән ялҡау)* ленивый; **ҡырсау һыйыр** ленивая корова *(от природы)*

**ҡырылыу** *(күпләп үлеү)* гибнуть

**ҡыһҡа сас** *диал. то же, что* **кикел**

**ҡысыр** яловый

**ҡысыр һарыҡ** яловая овца

**ҡысыр һыйыр** яловая корова

**ҡысыр ҡалыу** оказаться яловым, яловеть

**ҡысыраҡ** яловка, яловица

**ҡысыраҡтар өйөрө** яловый косяк или неплодоносящий табун

**ҡыуал-ерән** бледно-рыжий; **ҡыуал-ерән һыйыр** бледно-рыжая корова

**ҡыуғыл** *(аҡһыл һары)* бледно-рыжий; **ҡыуғыл бейә** бледно-рыжая кобыла

**ҡыуғын 1.** отгонный; **2.** гурт, который летом отгоняют на пастбище

**ҡыуғын малсылыҡ** отгонное животноводство

**ҡыуғынсы** гуртовщик, табунщик

**ҡыуғыр 1.** *(көйҙөрөлмәгән ата мал)* некастрированный: **ҡыуғыр тәкә** некастрированный баран; **ҡыуғыр үгеҙ** некастрированный бык; **2.** молодой жеребец, которого еще нельзя использовать в качестве производителя

**ҡыулыҡ 1.** *(беренсе тапҡыр ҡолонлаған йәш бейә)* кобыла *(принесшая первого жеребенка)*; **2.** *(тәүге ҡолон)* жеребенок-первенец

**ҡыуғынсы** гуртовщик, гуртоправ
**ҡыуын** *то же, что* **ҡыуғын**
**ҡыуыр үгеҙ** *диал. то же, что* **екке үгеҙ**
**ҡышлау үгеҙ** перезимовавший бык
**ҡышлыҡ** *вет. диал. то же, что* **маңҡа**
**ҡышлыҡлау** *вет.* болеть сапом
**ҡышлыҡлы мал** зимостойкий скот, зимующий скот
**ҡыяҡ теш** *вет. (йылҡы малының аҙау тешенә ҡапланып үҫкән артыҡ теш)* волчки; болезнь зубов

# Л

**лайка** (*махсус юл менән кәзә-һарыҡ тиреһенән эшләнгән йомшаҡ күн*) лайка *(кожа, выделанная из овце-козьей шкуры)*
**лактация** *физиол. (һөт биҙҙәренең һауым биреше һәм һауым биргән осор)* лактация
**лактометр** *(һөттөң сифатын ҡуйылығына ҡарап билдәләй торған прибор)* лактометр
**лактоскоп** *(һөттөң ҡуйылығын билдәләй торған прибор)* лактоскоп
**лапаҡай** *(оҙон тороҡло)* с длинным туловищем *(о лошади)*
**лапаҡ ыңғырсаҡ** *диал. то же, что* **ятма ыңғырсаҡ**
**лапам ит** *этн. (туйҙың икенсе көнөндә әҙерләнгән һый)* угощение на второй день свадьбы
**лапшы** *диал. (тиҙ арыусан)* быстро устающая *(о лошади)*
**лапшыу** *(ҡапыл арыу)* быстро уставать
**латҡа** *этн. (ит быҡтырып бешерә торған суйын көршәк)* чугунок для тушения мяса
**лауыр** *вет. (ҡып-ҡыҙыл булып сурайып, эренләп аҡҡан муйын шешеге)* туберкулез шейных желез

# М

**май 1.** масло; **2.** сало, жир
**май бешеү** сбивать масло
**май биҙҙәре** *анат.* сальные железы
**май таҫҡау** выжимать сливочное масло в холодной воде
**мал** скот, скотина

**мал аҙығы** корм для животных
**мал ауырыуҙары** болезни животных
**мал баҙары** *разг.* скотный рынок
**мал вагоны** скотный вагон, вагон для скота
**мал врачы** ветеринар, ветеринарный врач
**малғыуар** *(мал, байлыҡ артынан ғына ҡыуған кеше)* человек, стремящийся разбогатеть
**малдар** *уст.* богач
**мал көтөү** пасти скотину
**мал көтөүе** стадо
**мал көтөүсе** пастух
**мал күтәртеү** падеж скота
**мал-ҡара** *собир. то же, что* **мал-тыуар**
**мал ҡарау** уход за скотом
**мал ҡараусы** скотник, скотница
**мал ҡото 1.** *этн. (йортҡа, малға бәрәкәт килтерә, тип иҫәпләнгән тоҡомло мал)* племенной, породистый скот *(оставленный для разведения);* **2.** украшение табуна
**мал ҡуры** скот на развод
**мал ҡырылыу** *(үлеү)* падеж скота
**маллы** 1) имеющий много скота; 2) состоятельный, имеющий, богатый
**мал өйө** *то же, что* **мал һарайы**
**мал сәсәге** *вет.* оспа животных
**малды эйектереү** приручить животных
**малға таяндырыу** *этн.* при встрече невесты свекровь обещает ей подарить какое-либо домашнее животное *(теленка, лошадь, овцу и т. д.)*
**малды өйгә эйәләтеү** приучать скотину возвращаться домой
**мал теле** *бот.* кактус
**мал утлауы** выгон для скота
**мал үрсеме** расплод скота
**мал үрсетеү** заниматься разведением скота
**малһаҡ** *(мал һөйөүсән)* любящий скот
**мал һарайы** скотный двор
**мал һимертеү** откорм скота
**мал һуйыу** резать и разделывать скот
**мал әйтеү** *этн. (төшкән киленгә мал атау)* обещать снохе скотину
**малсы** скотовод; скотник; скотница
**малсылыҡ** *(ауыл хужалығының мал үрсетеү, халыҡты ит-һөт аҙыҡтары сәнәғәтте – йөн, тире һ.б. менән*

*тәьмин итеүсе мөһим тармағы)* животноводство, скотоводство

**малсылыҡ бригадаһы** животноводческая бригада

**малсылыҡ хужалығы** животноводческое хозяйство

**малсылыҡты үҫтереү** развивать животноводство

**мал-тыуар** домашний скот; скот и птица

**мал-тыуар тотоу** держать домашний скот

**маңдай сас** *диал. то же, что* **кикел**

**маңдайса** *диал.* налобник *(у узды)*

**маңҡа, маңҡа ауырыуы** *вет. (йылҡы малында була торған йоғошло ауырыу)* сап *(заразное заболевание однокопытных, сопровождающееся появлением гнойных пузырьков в носоглотке)*

**маңҡалау** болеть сапом

**маңлай** *анат.* лоб, чело

**маңлай йөнө** *диал. то же, что* **кикел**

**маңлай сәсе** челка

**маңлай һөйәге** *анат.* лобная кость

**маңлай ялы** *то же, что* **кикел**

**маңлайса** *(йүгәндең маңлай өлөшөндәге арҡыры ҡайышы)* налобник

**маңлайса бәйләү** навязать налобник *(лошади)*

**матау** *(ҡасмаһын өсөн аттың теҙгенен тышауына тартып бәйләү)* прикреплять поводья лошади к путам; **арбаны матау** *(тау түбәненә төшкәндә тәгәрмәсте әйләнмәҫлек итеп бәйләү)* завязывать задние колеса телеги *(для торможения при спуске с горы)*

**мейе** *анат.* мозг

**менге 1.** верховой тип лошадей; верховой; **2.** верховая езда, езда верхом

**менге ат** верховая лошадь

**менгегә өйрәтеү** учить верховой езде *(лошадь)*

**менгәшеү** садиться вдвоем на лошадь

**менгәшеп йөрөү** ездить верхом вдвоем на одной лошади

**меринос** *(нәҙек йомшаҡ аҡ йөнлө һарыҡ тоҡомо)* меринос *(порода овец с длинной тонкой шерстью)*

**мис** *этн.* бурдюк, сделанный из козьей шкуры для перевозки кумыса

**мисәү I** *(төптәге атҡа тағы бер атты ҡушарлау)* запрягать пристяжным, припрягать; пристяжка, припряжка

**мисәү II** *(ҡушарлап егеү өсөн хеҙмәт иткән бау)* постромки

**мисәү аты** пристяжная лошадь, пристяжка, припряжка

**мисәү ҡайышы (бауы)** постромки *(толстый ремень или веревка, идущая от хомута к вальку или в дышло)*

**мисәүҙе эләктереп ҡуйыу** пристегивать постромки

**мисәүҙәге ат** *то же, что* **мисәү аты**

**мисәүгә егеү** припрячь, запрягать пристяжным

**мисәүле** *(мисәүләп егелгән, мисәү аты егелгән)* пристяжной

**мисәүле ат** пристяжная лошадь

**мисәүләү** запрягать пристяжным; припрягать

**мисәүләп егеү** запрягать в пристяжку

**моғолой** *диал. то же, что* **туҡал**

**морғаҡ** *диал. то же, что* **морондоҡ**

**морон** *анат.* морда, рыло

**морондоҡ** *этн. (инәһен иммәһен өсөн быҙау, бәрәстең моронона кейҙерелә торған сәнскеле нәмә)* намордник; **морондоҡ кейҙереү** надеть намордник

**моронса** *диал. то же, что* **морондоҡ**

**морон сиге, танау биле** *анат.* храп

**моронһа** *диал. то же, что* **морондоҡ**

**моронһалыҡ** *(йүгәндең морон өҫтөнән арҡыры торған өлөшө)* намордник

**моронһалыҡ кейҙереү** надеть намордник *(лошади)*

**мөгөҙ** *анат.* рог; рога

**мөгөҙғойроҡ** *зоол.* рогохвост

**мөгөҙлө** рогатый

**мөгөҙлө мал** рогатый скот

**мөгөҙһөҙ** безрогий, комолый *(о корове, козе и т.п.)*

**мөгөҙьяпраҡ** *бот.* роголистник

**мөгөлөй** *диал. то же, что* **туҡал**

**мөйәт** *этн.* хомутина *(хомут без деревянного остова, мягкий валик, обкладка на внутренней стороне хомута)*

**мөйәт үреү** плести хомутину

**мөйәтләү** покрыть хомутиной *(хомут)*

**мөстән** *вет. то же, что* **түләмә**

**мөсһөҙ ат** *то же, что* **арымтал ат**

**мөтөр ҡолаҡ** корноухий; **мотор ҡолаҡ ҡара айғыр** корноухий вороной жеребец

**мөһөр** *этн. (ҡайыш сбруйҙы биҙәр өсөн ҡуйылған йомро көмөш ҡалай)* украшение на шлее

**мөшкә 1.** *(аттың башына элеп, һоло ашата торған тоҡсай; торба)* торба; **2.** *(морондоҡ)* намордник

**муйнаҡ** с белой шеей; **муйнаҡ кәзә** коза с белой шеей

**муйын** *анат.* шея

**муйын ите** *анат.* ошеек *(часть мясной туши, прилегающая к шее)*

**муйынсаҡ** ошейник

**муйынсаҡ бәйләү** надевать ошейник

**муйынсаҡлау** надевать ошейник; привязывать за ошейник

**муйын умыртҡалары** *анат.* шейные позвонки

**муйын һырты** *анат.* гребень шеи

**мунда** *анат. (аттың ҡулбашы өҫтөндәге ҡалҡыу ер)* холка; **мундаһы бейек ат** лошадь с высокой холкой

**мурҙай** *диал. то же, что* **күҙәгә**

**муртай** *этн.* муртай *(узкогорлый мешочек из кожи животного)*

**мүкләк** комолый, безрогий; **мүкләк кәзә** комолая коза

**мыстар** *этн.* мыстар *(посуда в виде бурдюка для кумыса)*

**мышыу** *этн. (атты юлда ашатыу өсөн ҡулланылған септә тоҡсай)* мешок для овса

**мәңке, мәңкә** *то же, что* **маңҡа**

**мәргән** *вет. (тамаҡ аҫты шешеп, танауынан ҡан килтерә торған йоғошло йылҡы ауырыуы)* мыт *(инфекционная болезнь лошадей, когда опухают подчелюстные железы и истекают из носа)*

**мәсәй** *диал.* то же, *что* **һеңер**

**мәстәк** низкорослая рабочая лошадь

**мәтәү** *(аттың дүрт аяғын тышау)* стреножить коня на четыре ноги

**мәһәр малы** *этн. (никах ваҡытында егет яғынан ҡыҙ яғына бирелә торған мал)* **1.** приданое в виде скота; **2.** подарок в виде скота невесте от жениха

# Н

**нескә бөйөр** поджарый в поясе; **нескә бөйөр туры ат** гнедой поджарый конь

**ниәт** *диал. то же, что* **мөйәт**

**нуҡта** *(ауыҙлыҡһыҙ йүгән)* недоуздок

**нуҡта кейҙереү** надевать недоуздок *(лошади)*

**нуҡта күрмәгән мал** пасущийся на воле скот

**нуҡта үреү** сплести недоуздок

**нуҡталау** надевать недоуздок

**нәҙек эсәк** *анат. то же, что* **ас эсәк**

**нәҙер малы** *этн. (берәй теләктең ҡабул булыу шартына бәйләп вәғәҙә ителгән мал)* завещанный, предназначенный кому-либо или какому-либо событию скот

**нәҙәрә** *анат. диал. (танау биле)* переносица

**нәҫел** *(яҡшы сифатҡа эйә булған мал заты)* порода

**нәҫелле малдар төркөмө** *(урындағы тәбиғәт шарттарына яраҡлашҡан һәм махсус үҙенсәлектәре булған бер тоҡомдағы малдар төркөмө)* отборный табун породистого скота

**нәҫел үгеҙе** породистый бык

# О

**оҙам ат** *(сыҙамлы)* выносливый конь

**оҙам йүгерек** *спорт.* скакун на длинные дистанции; стайер; **оҙам йүгеректәр сабышы** стайерский забег

**оҙон торҡон** *(оҙон тороҡ)* с длинным туловищем

**оҙон үҙәк** *диал. то же, что* **оҙон тороҡ**

**оздой һарыҡ** *(оҙон ҡойроҡло һарыҡ тоҡомо)* порода длиннохвостных овец

**оло бәйге** *спорт. (йәш аттар сабышынан һуң үҙгәрыла торған һыналған оло аттар сабышы)* большие скачки скакунов

**оло ҡабырға** *анат. то же, что* **һебә ҡабырғаһы**

**оло ҡарын** *анат. (көйшәлә малдың ашҡаҙанындағы беренсе иң ҙур бүлек)* брюховина

**орғасаҡ** *диал. то же, что* **орғасы**

**орғасы** *(инә енесле быҙауға, бәрәскә ҡарата)* самка

**орғасы башмаҡ** телка

**орғасы быҙау** телка

**орғасы бәрәс** ярочка; козочка

**орлоҡ** *(үрсем өсөн ҡалдырылған инә мал)* матка; самка-производительница

**орлоҡҡа ҡалдырыу** оставить на расплод

**оро** *вет. (ат аяғында була торған ҡаты шеш)* шишка на ноге лошади

**оса** *анат. (арт һан)* ягодица; круп *(у лошади)*

**осалыҡ** *этн. (ышлыяның һыртынан оса аша төшкән нәҙек ҡайыштар)* откоски шлеи

**оса мускулдары** *анат.* ягодичные мышцы

**оса һөйәге** *анат.* таз, тазовая кость

**осҡау** *(аттарҙы аллы-артлы ҡуйып, теҙеп егеү)* запрягать цугом

**осҡаулау** запрягать цугом

**осеменатор** *(малды яһалма юл менән аталандырыу эшендәге белгес)* осеменатор

**осҡо ат** передняя лошадь при упряжке цугом

**осҡолап егеү** *диал. то же, что* **ослап егеү**

**ослап егеү** запрягать цугом

**осҡолоҡ** *уст. (мал һатыуға биргән рөхсәт ҡағыҙы)* справка, разрешающая продажу скота

# Ө

**өҙәңге** *(эйәрҙең аяҡты кейҙереп, баҫып ултыра торған өлөшө)* стремя

**өҙәңге** *диал. (тырантас, арба баҫҡысы)* подножка тарантаса, телеги

**өҙәңгегә баҫыу** наступать на стремя; наступать на подножку

**өҙәңге бауы** путы

**өйкәтмә** *вет. (йылҡы малының, ҡайһы саҡта һыйырҙың ҡойроҡ төбөндә була торған ҡысынма)* чесотка

**өйөр** *(бер айғыр ҡарап йөрөткән көтөү)* табун, косяк лошадей

**өйөр айғыры** жеребец-вожак косяка

**өйөр булып йөрөү** ходить табунами

**өйөр йылҡысылығы** табунное коневодство

**өйөрлө** табунный, групповой

**өйөрлө мал** табунные животные

**өйрәнсектәр эйәре** *этн.* седло для обучения верховой езде

**өйсөк** *вет. (һынған урынды ҡоршап, ныҡ итеп бәйләгән ҡабыҡ йәки башҡа нәмә)* шина, лубок

**өйсөк һалыу** наложить шину

**өйсөкләү** *(кәзә-һарыҡ аяғына өйсөк һалыу)* крепко обтягивать переломанную ногу козы, овцы и т.п.

**өйәҙәү** заваливаться *(о лошадях и др.)*

**өйәрһәк мал** скот, не покинувший стадо, табун

**өлкән ҡабырға** *диал. то же, что* **быҒым ҡабырға**

**өлкән һөйәк** *диал. то же, что* **топош һөйәк**

**өлпө яллы ат** конь с лохматой гривой

**өпсө** *этн. (ҡойошҡанға беркетеп ҡуйылған көмөш көмбәҙ)* серебряные насечки *(украшение для сбруи)*

**өпсөн 1.** *(ғәскәри кәрәк-ярағы)* военное снаряжение; **2.** *этн. (матурлап, биҙәп эшләнгән ат ябыуы)* попона, украшенная серебряными насечками

**өпәк** *вет. (ат муйынының ҡамыт һуғып шешкән ере)* нагнет холки

**өпәнләү** *(сейәлеү – йылҡының ял-ҡойроғона ҡарата)* спутываться, запутываться *(о хвосте и гриве)*

**өркөтөү** *(ҡапыл ҡурҡытып ҡасырыу)* пугать

**өркөү** *(ҡапыл ҡурҡып ҡасыу)* шарахнуться в сторону

**өркәк** пугливый, боязливый; **өркәк ат** пугливая лошадь; **өркәк һарыҡ** пугливая овца

**өсбәйге** *спорт.* троеборье; **өсбәйге эйәре** седло для троеборья

**өшән мал** тощий скот

# С

**сабан, сабан ат** *(ялҡау тәбиғәтле, яй йөрөүсән)* ленивая лошадь

**сабанланыу** становиться ленивым

**сабыу** скакать на лошади

**сабыуыл** *уст. воен.* лава, атака *(конницы)*

**сабыу быуыны** *анат. то же, что* **бүреһуғар быуын**

**сабыш** *(һыбайлылар ярышы)* бега, скачки

**сабыш аты** скакун, скаковая лошадь

**сабышҡы** *(бәйгелә сабыша торған)* скаковой, беговой

**сабышҡы ат** скаковая лошадь

**сабыштырыу** *(шәп сабыуҙа ярыштырыу)* организовать состязания, бега

**сабышыу** *(шәп сабыуҙа ярышыу)* состязаться в скачках, в бегах

**сағыр күҙ** *диал. то же, что* **шағыр күҙ**

**сағыу ерән** ярко-рыжий; **сағыу ерән айғыр** ярко-рыжий жеребец; **сағыу ерән бейә** ярко-рыжая кобыла

**саҡма тояҡ (ат)** *(бик етеҙ, шәп атҡа ҡарата әйтелә)* искрометный конь *(скачущий, высекая искры из-под копыт)*

**саҡса** *этн. (мөгөҙҙән эшләнгән тәмәке һауыты)* рожок для хранения табака

**саҡсур** *этн. (тиренән тегелгән аяҡ кейеме)* меховая обувь

**сал** белый, чалый; седой

**сал баш һыйыр** седоголовая корова

**сал ҡойроҡло ат** лошадь с белым хвостом

**сала** *(тейешле кимәлгә етмәгән)* не дошедший до кондиции; **сала ҡымыҙ** кумыс, не дошедший до кондиции

**салан** быстро худеющий; **салан ат** быстро худеющая лошадь

**салғау** *диал. то же, что* **салыҡлау**

**салҡыу** *то же, что* **салыҡлау**

**салт** *(етеҙ, йылдам)* быстрый, проворный *(о лошади)*; **салт айғыр** быстрый, проворный жеребец

**салтын** *вет. то же, что* **тилбә**

**салыҡлау** *(башын аҫҡа-өҫкә һелкеү)* мотать, дёргать головой *(о лошади)*

**салыу I** *анат. то же, что* **тамаҡ**

**салыу II** *(бысаҡ менән боғаҙҙан ҡырҡыу)* резать, бить, забивать, колоть, закалывать *(животных)*

**салыу һөйәге** *анат.* шейный позвонок животного *(обычно предподносится тому, кто резал скот)*

**салыусы** закалывающий скот

**сандыр** *анат. (мал ҡорһағының сат тирәһендәге өлөшө)* пах

**саңға билле ат** конь с гибкой спиной *(с вогнутым крупом)*

**саңлау 1.** *(көн эҫеһендә мал тупланып ята торған күләгә йәки еләҫ урын; туплау)* летнее стойбище для скота; **2.** *(көн эҫеһендә күләгәлә йәки еләҫ ергә тупланыу)* сбор скота в летнее стойбище

**сапҡын I** скакун; беговая лошадь

**сапҡын II** гонец, конный посыльный, конный связной

**сапҡыр** *(бик шәп сабыусан, етеҙ; сапҡын)* скаковой

**сапҡыр ат** скаковая лошадь, скакун, беговая лошадь

**сапма** *диал. то же, что* **бәйге**

**сапсан** проворный; прыткий, резвый; **сапсан ат** резвый конь

**сапсыу** *(түҙемһеҙләнеп, алғы тояҡтары менән ерҙе тибеү – атҡа ҡарата)* нетерпеливо бить копытами о землю *(о лошади)*

**саптар** *(ялы һәм ҡойроғо сал булған ерән)* игреневый

**саптар айғыр** жеребец игреневой масти

**саптар бейә** игреневая кобыла

**саптырыу I** пустить вскачь

**саптырыу II** случать кобылу

**сапыҡ** *диал. то же, что* **сапсан**

**сарға** *(ярһып, үрәпсеп торған)* дикий, необузданный *(о лошади)*

**сарға айғыр** необузданный жеребец

**сарыҡ** *этн. (башы күндән, ҡуңысы туланан тегелгән боронғо аяҡ кейеме)* чарык *(старинная обувь с кожаным носком и суконным голенищем)*

**сасаҡ** *анат. то же, что* **сәсә**

**сасаҡ һөйәге** *анат. то же, что* **сәсә һөйәге**

**саулыҡ** *диал. то же, что* **орғасы**

**саф тоҡомло** чистопородный; **саф тоҡомло айғыр** чистопородный жеребец

**сбруй** *этн. то же, что* **ҡамыт-дуга**

**сеҙәр** *(аттың алғы ике аяғын артҡы бер аяғына ҡушып бәйләгән тышау)* тренога *(перевязь, путы, когда связывают две передние и одну заднюю ноги лошади)*

**сеҙәр һалыу** стреножить

**сеҙәрле** стреноженный; **сеҙәрле ат** стреноженная лошадь

**сеҙәрләү** стреножить

**селтәрбаш** пятнистая голова; **селтәрбаш быҙау** теленок с пятнистой головой

**сенаж** *(махсус башняла һаҡланып, малға ашатыу өсөн бер аҙ һурыҡтырылып һалынған үлән)* сенаж

**сенаж башняһы** сенажная башня

**сенаж һалыу** закладывать сенаж

**сенсек** *диал. то же, что* **енсек**

**серге** *(үңлек өҫтөнән эйәр аҫтына һалына торған тышлы кейеҙ)* чепрак, подкладываемый между седлом и потником

**серге ҡағыу** *этн. (ҡунаҡтан һуң ҡалған эсемлекте эсеп бөтөү)* угощаться после гостей

**сергетыш** *(серге өҫтөнән көпләгән биҙәкле күн йәки буҫтау)* кожа, которой обтягивается войлочная часть седла

**серкеү** *(ҡапыл юҡҡа сығыу)* пасть внезапно *(о животных)*

**сикә** *анат. (баш һөйәгенең ҡолаҡтан маңлай һөйәгенә тиклем булған ике яҡ эргәһе)* висок

**сикә һөйәге** *анат.* височная кость

**сикәлек** *(йүгәндең сикә буйлап төшкән ян ҡайышы)* лобный перекресток *(уздечки)*

**силек бауы** *то же, что* **тамаҡбау**

**силос** *(туралған йәш үләнде, үсемлек һабаҡтарын махсус ҡорамалдарҙа томалап әсетеү юлы менән әҙерләнгән һутлы мал аҙығы)* силос

**силсә** *то же, что* **бешмә**

**сираҡ (енсек)** *анат. (аяҡтың бәкәлдән тубыҡҡа тиклемге өлөшө)* голень *(часть ноги от колена до стопы)*

**сираҡ һөйәге** большая берцовая кость

**сираҡ ҡушары** малая берцовая кость

**ситән кәртә** плетневое стойло *(для скота)*

**солғау** *диал. то же, что* **салыҡлау**

**сонтор ҡойроҡло үгеҙ** бык с коротким хвостом

**сөйҙөлкә (сөйҙәркә)** *диал. то же, что* **ыңғырсаҡ**

**сөйлөк; сөйлөк бауы** *диал. то же, что* **тамаҡбау**

**сөйөлдөрөк** *диал. то же, что* **тамаҡбау**

**сөлкәр** *диал. то же, что* **сыбар**

**сөркә** *(күк ат)* сивка

**спорт аты** *то же, что* **бәйге аты**

**спорт эйәре** *то же, что* **бәйге эйәре**

**стайер** *спорт. то же, что* **оҙам йүгерек**

**стайерҙар сабышы** *то же, что* **оҙам йүгеректәр сабышы**

**стиплер** *спорт. (ҡаршылыҡтар аша үткәндә беренселекте алған бәйге аты)* стиплер

**суҡ сас** *диал. то же, что* **кикел**

**суҡлы ҡум** чепрак, украшенный тисненой булгарской кожей, серебром и наборными кожаными кистями

**суҡлы ышлыя** шлея с наборными кистями

**сулаҡ инәү** *(мал инәүе)* метка животных *(надрезают кончики ушей)*

**суртан бил ат** лошадь с прогибающейся спиной

**сусҡа** свинья

**сусҡа аҙбары** свинарник

**сусҡа бәрәсе** подсвинок, поросенок

**сусҡа ите** свинина

**сусҡа көтөүсе** свинопас

**сусҡа ҡараусы** свинарь, свинарка

**сусҡа ҡылы** свиная щетина

**сусҡа мороно** *анат.* свиное рыло, рыло свиньи

**сусҡа фермаһы** свиноферма

**сусҡасы** свинарь, свинарка

**сусҡасылыҡ** свиноводство, свиноводчество

**сусҡасылыҡты үҫтереү** развивать свиноводство

**сүп** *диал. то же, что* **сыуын**

**сыбай** *(тар ғына буй һыҙат)* продолговатый, удлиненный

**сыбай ҡашҡа** продолговатое белое пятно на лбу животного

**сыбай ҡашҡа буҙ ат** сивая лошадь с проточиной на лбу, лысиной

**сыбай ҡашҡа һары ат** соловая лошадь с проточиной на лбу, лысиной

**сыбар** чубарый *(о масти лошади)*; **сыбар ала ат** чубарый конь

**сыбар күк ат** пего-сивая лошадь

**сыбар туры** гнедо-чубарый; **сыбар туры ат** гнедо-чубарый конь

**сыбар ҡарын** *диал. то же, что* **таҙғарын**

**сыбарсай** *то же, что* **таҙғарын**

**сыбата** *(аттарҙы аллы-артлы ҡуйып, теҙеп егеү)* цуг

**сыбата егеү** запрягать цугом

**сыбаталап егеү** *то же, что* **сыбата егеү**

**сыбыртҡы** кнут

**сыбыртҡы һабы** кнутовище

**сыбыртҡы ите** *этн. (туйҙа төп ҡоҙала үткән һуңғы һый)* последнее угощение в доме отца невесты

**сыбыртҡылау** стегать, хлестать, подгонять, бить кнутом

**сығым** *(ярһыу булыу сәбәпле тиҙ арыусан)* быстро устающий

**сығым үгеҙ** быстро устающий бык

**сығынсы** *(ҡапыл туҡтап, кире сигеп, ҡарышыусан – атҡа ҡарата)* норовистый

**сығынсы ат** норовистая лошадь

**сығынсылау** упрямиться

**сығыу** *вет.* волдыри *(появляющиеся весной на спинах лошадей)*

**сығыулау** покрываться волдырями

**сыҙам ат** *то же, что* **бирек ат**

**сыҡта** *(ҡолонға кейҙерелә торған нуҡта)* узда, недоуздок жеребенка

**сылбыр** *(ҡылдан ишелгән оҙон һыңар теҙген)* веревка *(обычно из конского волоса)*

**сылым** *диал. то же, что* **сыуын**

**сынйыра** *вет. (аттың түшенә сыға торған ҡаты шешек)* фурункул *(у лошади)*

**сыңға** металлическое кольцо *(в дуге, узде)*

**сыңғалау** снабдить металлическим кольцом

**сыңғара** *вет. (аттың түшенә сыға торған ҡаты шешек)* фурункул *(у лошади)*

**сыңғырау** нежно ржать *(о жеребятах, лошадях)*

**сысҡан һырт** с темной полосой вдоль спины; **сысҡан һырт ат** лошадь с темной полосой на спине

**сысҡансыҡ** *вет. (һыйыр малының ҡорһағына биҙ һымаҡ төйөн ҡалҡып, эсен таштырған сир)* колики *(у коров и лошадей)*

**сысҡансыҡ ҡалҡыу** *(әйләнсек менән ауырыу)* болеть вертячкой

**сысҡансыҡлау** страдать коликой

**сыт** *(ситәндән үрелгән утлыҡса)* большие плетеные ясли

**сыу** *анат. то же, что* **сыуын**

**сыуын** *анат. (мал ҡарынындағы бала ята торған төргәк; сыу)* послед *(у самки животного)*

**сыуын һалмау** задержание последа

**сәгәй** *диал. то же, что* **йылғыр**

**сәйнәшкәк ат** *диал. (тешләшә торған ат)* кусающаяся лошадь

**сәңгәр** *(гәҙәттәге ваҡыттан һуң тыуған; йәйләүес, көҙләүес)* родившийся летом или осенью; поздний *(о теленке или ягненке)*

**сәңгәр быҙау** летний или осенний теленок

**сәңгәсәр 1.** *(быҙаулар йәшендә быҙауламаған, өс йәшенә ҡәҙәр тыу ҡалған – һыйырға ҡарата)* яловая телка *(до трех лет)*; **2.** самка теленка, ягненка, родившихся летом или осенью

**сәркәш** *(екке үгеҙ)* ездовой бык

**сәрмә** *диал. то же, что* **кәшен**

**сәрмә** *этн.* дорожная сума всадника

**сәпәк** *(һыйыр тиҙәген һаламға ҡушып, сәпәләп эшләнгән яғыулыҡ)* кизяк

**сәскәктәү** *(себенләү)* вести себя беспокойно от укуса мух

**сәскәнәй** *(яҙғы бәрәс)* ягненок весеннего окота

**сәсә I** *(аттың бәкәлендәге оҙон йөн)* щетка *(над копытом лошади)*

**сәсә II** *то же, что* **кикел**

**сәсә мөйөҙө** *то же, что* **сәсә һөйәге**

**сәсән** *(ярһыу)* горячий, резвый; **сәсән айғыр** резвый жеребец

**сәсә һөйәге** *анат.* сесамовидные кости

# Т

**табалдырыҡ** *диал. то же, что* **өҙәңге**

**табын** *(йылҡы өйөрө)* косяк лошадей

**тағараҡ** *(күмәк малға һыу йәки башҡа аҙыҡ һала торған оҙонса сөм һауыт)* корыто

**тағун** *вет., уст. (йоғошло үләт ауырыуы)* чума

**таҙ** *вет.* парша

**таҙғарын** *анат. (көйөшлө малдың ашҡаҙанындағы беренсе бүлек; күҙләнсек)* сычуг

**таҙ ҡарын кейҙереү** *этн. (туйҙа ҡарын ашау йолаһы)* свадебный обряд угощения сватьев со стороны жениха, сопровождающийся шутками, песнями

**тай** *(бер йәше тулып, икенсе йәшкә киткән йылҡы малы)* жеребенок *(по второму году)*

**тай байтал** кобыла по второму году; кобыла-двухлетка

**тай ите** жеребятина

**тай үгеҙ** *диал. то же, что* **тана үгеҙ**

**тайлаҡ** *(бер йәшлек тай)* годовалый жеребенок

**тайлаҡ үгеҙ** годовалый бычок

**тайса** *(инә тай)* **1.** жеребенок-самка *(до двух лет)*; **2.** *(ике йәшлек үгеҙ)* двухгодовалый бык

**тайсаҡай** *(бер йәштән ике йәшкә тиклемге үгеҙ малы)* бычок от полутора до двух лет

**тайтояҡ** *бот. (ике өлөшлө үләндәр ғаиләһенә ҡараған, түңәрәк япраҡлы, ҡара ҡыҙыл ваҡ сәскәле, йөнтәҫ ҡыҫҡа һабаҡлы күп йыллыҡ урман үләне)* копытень

**тай-тулаҡ** *собир. (йәш йылҡы малы)* конский молодняк

**тай үгеҙ** *(бер йәшлек үгеҙ)* годовалый бык

**тайыҙ** *(йөнө, ялы бик йоҡа булған)* короткий *(о ворсе, шерсти)*

**тайыҙ бейә** короткошерстная кобыла

**тайыш** косолапый; **тайыш аяҡ ат** косолапая лошадь

**таҡым** *анат. (боттоң сат янындағы һум ите)* бедро, ляжка

**талаҡ I** *анат. (умыртҡалы хайуандарҙың ҡан эшләүҙә, матдә алмашыныуында ҡатнашҡан эске ағзаһы)* селезенка

**талаҡ II** *вет.* **1.** опухоль селезенки *(болезнь лошадей)*; **2.** заворот кишок *(у лошади)*

**талаҡлау** *вет.* страдать от опухоли селезенки

**талау** *вет.* злокачественная опухоль *(у лошади)*

**талаулау** *вет.* страдать злокачественной опухолью

**талауһырау** *вет. то же, что* **маңка**

**талғыр** *(юлаҡ-юлаҡ һыҙаттары булған)* полосатый

**талғыр ат** полосатый конь

**талыҡ** *вет. (ваҡ малдың һынған аяғын ҡоршап бәйләгән ҡабыҡ йәки башҡа нәмә)* шина

**тамаҡ** *анат.* горло

**тамаҡбау** *(атты еккәс, ҡамыт ағасының башын тарттырып бәйләй торған бау)* супонь

**тамаҡбауҙы бушатыу** ослабить супонь

**тамаҡса** *диал. то же, что* **тамаҡбау**

**тамаҡһа** *то же, что* **тамаҡбау**

**тамға** клеймо, тавро, метка

**тамға баҫыу** выжечь тавро

**тамға һалыу** клеймить, таврить

**тамға һалыусы** клеймовщик

**тамғалы ҡолон** жеребенок с тавром

**тана** *(бер йәштән ике йәшкә тиклемге һыйыр малы)* телка двухгодовалая

**тана башмаҡ** двухгодовалая нетель

**танау тишеге** *анат.* ноздри

**тана үгеҙ** двухгодовалый бычок

**тана һыйыр** молодая корова *(до третьего отела)*, первотелка

**тана-торпо** *собир. (йәш һыйыр малдары)* телки и бычки

**таңатыу** *(шәп килеп янған атты үлән менән дауалап, кистән таңға хәтле ашатмай-эсермәй ҡуйыу)* ставить вспотевшего коня на выстойку

**таңлай** *анат.* мягкое нёбо

**тапам** *(мал йөрөгән урын)* вытоптанное поле

**тапанды** *(мал ашап тапалғандан ҡалған; һандыҡ)* объедки сена, соломы и т.д.

**тапандыҡ** *(һандыҡ)* объедки сена, соломы

**тапатыу** потрава

**тапау** *диал. то же, что* **тапанды**

**таралғы** *диал. то же, что* **айыл**

**тарамыш** *анат. (мускул һәм һөйәктәрҙе тоташтырған һуҙылыусан нығ, тығыҙ туҡыма)* сухожилие

**тарғыл** *(юлаҡ-юлаҡ һыҙаттары булған)* красно-бурый с черными полосками; **тарғыл һыйыр** красно-бурая с черными полосками корова

**тарлан буҙ** *или* **күк тарлан** *(саҡ ҡына башҡа төҫ ҡатыш буҙ-атҡа ҡарата)* чалый *(о масти лошади)*

**тарлан буҙ айғыр** чалый жеребец

**тарлан күк бейә** чалая кобыла

**тарлау** *(мал йөрөү өсөн кәртәләп ҡуйылған урын)* выгон

**тарпан (буҙ тарпан)** тарпан *(вымерший подвид обыкновенной лошади)*

**тартҡы** *диал.* **1.** *то же, что* **айыл; 2.** *то же, что* **бауырлыҡ**

**тартҡыс; тире тартҡыс** *то же, что* **ирәк**

**тау кәзәһе** *зоол.* козерог

**таш имсәк** *вет.* мастит *(у дойных животных)*

**таш ҡорһаҡ** *вет.* брюшная водянка

**ташын** *вет. (эс күбеү)* тимпания *(вздутие живота)*

**таянсыҡ** *этн. (килен йортҡа төшкәндә ҡәйнәһе биргән аяҡлы мал – килен арбанан шул малға таянып төшә)* домашний скот, подаренный при первом входе невесты в дом жениха

**теҙген** *(нуҡта, йүгәндең ат башын тота торған ҡайышы)* повод, поводья

**теҙген осо** концы поводьев

**теҙгендән тотоу** держать за поводья

**теҙгенде тартыу** натянуть поводья *(чтобы умерить ход)*

**теҙгенләү** прикреплять повод

**теҙгенһеҙ йүгән** уздечка без поводья

**тел** *анат.* язык

**тейәк 1.** перекладина *(для подвешивания туши при свежевании);* **2.** валек *(на который надеваются постромки упряжи)*

**телбешмә** *вет. то же, что* **бешмә**

**тел иҙелмәһе** *вет. то же, что* **бешмә**

**телмә** *вет. (йоғошло шешек)* рожа

**терек** *уст.* скот

**терек аҫрау** держать скот

**теркә мал** *уст.* наследственный скот *(имущество)*

**теркәп егеү** запрягать в пристяжку

**терпе** *этн.* намордник *(специальное колючее приспособление, надеваемое на морду теленка, чтобы отучить его сосать корову)*

**терпе кейҙереү** надевать намордник

**терпәк ат** *диал. то же, что* **сабан ат**

**теш** *анат.* зуб

**теше** *(инә енесле)* самка *(животного)*

**теше быҙау** тёлка

**теше бәрәс 1.** ярочка; **2.** козочка

**теш ҡаҙнаһы** *анат. (теш ултырған нигеҙ һөйәк)* десна

**тешәү** *(теш алмаштырған йәштә)* находящийся в период выпадения молочных зубов *(о скоте)*

**тешәү йылы** *(малдың теше алмашына торған йылы)* год смены зубов у скота

**тешәү мал** скот в период смены зубов *(от двух до трех лет)*

**тешәү теш** (һөт теше) молочный зуб

**тешәү һарыҡ** овца после второго окота

**тешәү һыйыр** корова после второго отела

**тибексә** *диал. то же, что* **өҙәңге**

**тибен** *(йылҡы малының ҡыш көнө ҡарҙы тибеп утлаған ере)* тебеневка

**тибен ваҡыты** сезон тебеневки

**тибен малы** тебеневочный скот *(лошади, овцы и др.)*

**тибендә утлау** пастись на тебеневке, тебеневать

**тибен тибеү** тебеневать

**тибен өйөрө** косяк, находящийся на тебеневке

**тибенге 1.** шпора *(на сапогах у всадников)*; **2.** тебенек *(кожаная полоса прикрепляемая к ленчику седла под потником и служащая для предохранения ноги всадника от трения, потения)*

**тибенгеләү** шпорить

**тибенеү** бить копытами

**тибенлек** *то же, что* **тибен**

**тибенләү** *(йылҡыларҙың ҡышын ҡарҙы тибеп тибендә утлап йөрөүе)* тебеневать

**тибешкәк** имеющий привычку лягаться, брыкливый

**тибешкәк ат** брыкливый конь

**тикес** *диал. то же, что* **бәкәл**

**тил** *(бүтән, сит инәне имгән)* сосущий чужую матку *(о детеныше)*

**тил быҙау 1.** теленок, сосущий чужую матку; **2.** чучело теленка, подставляемая к корове при дойке

**тил бәрәс** ягненок, сосущий чужую матку

**тил ҡолон** жеребенок, сосущий чужую матку

**тилбә** *вет. (йылҡы малын тартыштырып әйләнсек яһай торған яман ауырыу)* менингит *(у лошади)*

**тилетеү** *(бер-береһенә сит булған мал инәһе менән балаһын ҡушып эйәләштереү)* приучать друг к другу; приучать сосать другую матку

**тилеү** *(бер-береһенә сит булған инә менән баланың эйәләшеп китеүе)* привыкание друг к другу чужих матки и теленка

**тилсә** *вет. (йылҡының ауыҙ эсенә сыҡҡан шешек)* золотуха

**тилсә төшөү** заболеть золотухой

**тиләҫкәү һыйыр** *(күп йөрөүсән, йөрөмтәл)* блудливая корова

**тимгел күк** сивый с голубоватыми отметинами; **тимгел күк бейә** сивая кобыла с голубоватыми отметинами

**тимер күк** темно-сивый *(о масти лошади)*; **тимер күк бейә** темно-сивая кобыла; **тимер күк ҡолон** темно-сивый жеребенок

**тимер тышау** железные путы

**тире** *анат.* шкура; кожа; **һарыҡ тиреһе** овчина; **сей тире** сырая шкура

**тире иләү** *(тирене ирәк менән ҡырыу, ирәкләү)* выделывать шкуру

**тире ейетеү** *(ейгә һалып ебетеү, йомшатыу)* мочить в кислом растворе *(о коже)*

**тирене ейгә һалыу** положить кожу в кислый раствор для вымачивания

**тире тартҡыс** *то же, что* **ирәк**

**тире тартыу** *диал. то же, что* **ирәкләү**

**тире тунау** снимать шкуру; обдирать, сдирать, драть *(шкуру)*

**тире эшкәртеү** скорняжить, скорняжничать

**тирҙек** *диал. то же* **үңдек**

**тирлек** *(эйәрҙең үңлеге аҫтынан һалына торған кейеҙ)* потник

**тиртеү** *(һөт йыйып тулышыу)* переполняться; набухать – о вымени коровы и др.

**тирсел** потливый; **тирсел ат** потливый конь

**тоҙһау** *диал. то же, что* **тоҙһорау**

**тоҙһорау** *(тоҙ теләү)* хотеть соли, нуждаться в соли

**тоҡол** *анат. (ҡойроҡ һөйәге)* репица

**тоҡом** *(яҡшы сифатҡа эйә булған мал заты; нәҫел)* порода, племя

**тоҡом айғыры** племенной жеребец

**тоҡом боҙолоу** деградировать, вырождаться

**тоҡомға ҡалдырыу** оставить на племя

**тоҡом йылҡысылығы** племенное коневодство

**тоҡом малы 1.** племенное животное; **2.** племенной скот

**тоҡом тәкәһе** породистый баран

**тоҡом үгеҙе** племенной бык

**тоҡом һынау** породоиспытание

**тоҡомло** *(яҡшы тоҡомдан булған, тоҡомо яҡшы булған)* породистый, племенной

**тоҡомло мал** породистый скот

**тоҡомлолоҡ** породистость, порода

**тоҡомлолоҡто яҡшыртыу** улучшать породу

**тоҡомсолоҡ** *(яҡшы тоҡом малы алыу һәм үрсетеү эше)* породность

**тоҡомсолоҡ менән шөғөлләнеү** заниматься породностью

**тоҡомсолоҡ совхозы** племенной совхоз

**тоҡон** *диал. то же, что* **ҡотан**

**тоҡсай** *анат. (ата енес биҙе урынлашҡан тире мускул, ҡап)* мошонка

**тол; тол ат** *(ауға, бәйгегә яратылған)* боевой или беговой конь

**тол бесән** *диал. то же, что* **аҙау бесән**

**толоп 1.** *(бөтөн көйө тунап алған хайуан тиреһе)* тулуп; шкура, снятая чулком; **2.** *(тиреһен бөтөн көйө тунап, һалам тултырып яһаған йәш мал)* чучело

**толоплап һуйыу** *(мал тиреһен ярмайынса тоҡон килеш һыҙырып алыу)* обдирание шкуры в цельном виде

**толоплау 1.** *(тотош көйө тунау)* снимать шкуру чулком; **2.** *(толоп ярҙамында әйҙереү)* при помощи тулупа выдаивать молоко до конца

**толпар 1.** *миф.* тулпар, крылатый конь; **2.** *(яҡшы тоҡомло ат)* порода рослых и легких верховых лошадей

**томолдороҡ** *(кешнәп тауыш сығармаһын өсөн ат ауыҙына кейҙерелә торған киндер морондоҡ)* намордник *(в виде мешка, надевается на голову коня, чтобы не ржал)*

**тоноҡ һары ат** палевая лошадь

**топош һөйәге** *анат. (ҡулбаш һөйәге)* плечевая кость

**тораҡ** стойбище, стоянка

**торба** *(аттың башына элеп, һоло ашата торған тоҡсай; мөшкә)* торба

**торғалыҡ** *(ат бәйләү өсөн ике осон бағана башына һалған буй ағас)* коновязь

**торҡон** *диал. то же, что* **тороҡ**

**торогоу** *(айғыр менән ҡауышыу; аталаныу)* случаться *(о кобыле)*, случка

**торогоу осоро** случной период

**тороҡ** *(хайуандарҙың буй-һыны)* туловище

**тороҡтороу** *(айғырға ҡушыу; аталандырыу – бейәне)* случать кобылу

**торого оҙон арғымаҡ** аргамак с длинным туловищем

**торпаҡ** *(үгеҙ башмаҡ)* молодой бычок, теленок

**торпо 1.** годовалый теленок; **2.** *(өс йәшлек һыйыр)* трехлетняя корова

**тояҡ** *анат. (мал аяғының осондағы ҡаты өлөшө)* копыто

**тояҡ ауырыуҙары** *вет.* копытные болезни

**тояҡ быуыны** *(йәкәл)* бабки

**тояҡ йөрәге** *анат. то же, что* **тояҡ мендәре**

**тояҡ ҡатаһы** *анат. (тояҡтың мөгөҙ матдәһе)* роговая оболочка копыт

**тояҡ мендәре** *анат. (аттың тояғы аҫтындағы йомшаҡ ит; йөрәк ите)* мякиш копыта

**тояҡ тажы** *анат.* венчик

**тояҡ төбө, тояҡ йөйө** *то же, что* **тояҡ тажы**

**тояҡ үксәһе** *анат.* пятка копыта

**тояҡ тырнағы** *анат.* зацеп копыта

**тояҡ шешеү** *вет.* жабка

**тояҡ ярылыу** *вет.* трещины копытной стенки

**тояҡлы хайуандар** копытные животные

**төйәк** пристанище, стоянка, обиталище

**ток** *анат. (хайуандар тиреһендәге шырт йөн)* волос, волосок, шерсть, шерстина

**төкө** *вет.* твердая опухоль или мозоль на шее лошади от натирания хомутом

**төкөү** бодаться *(о козе, баране и др.)*

**топкө ат** *(төпкә егелгән ат)* основная лошадь в тройке

**төпкә егеү** запрягать в корень

**төпөш** *анат. (боттоң төптәге йыуан ҡыҫҡа һөйәге)* большая берцовая кость

**тубал** *вет. то же, что* **бүҫер** *(ҡолонда)* грыжа у жеребенка

**тубыҡ** *анат. (алғы аяҡтарҙың бот һөйәге менән балтыр һөйәген тоташтырған быуыны)* колено

**тубыҡ быуыны** *анат.* коленный сустав; сустав колена

**тубыҡ ҡапҡасы** *анат. (тубыҡ өҫтөндәге йомро һөйәк)* надколенная чашка; надколенник

**тубыҡ тупсыуы** *анат.* тупой конец коленной кости

**тубыҡ һөйәге** *анат.* коленная кость

**тубыр 1.** жевак *(на теле животных)*; **2.** опой *(болезнь лошадей, вызванная поением или кормлением их в разгоряченном состоянии)*

**тубыр булыу** лишиться способности ходить, ступать *(в результате долгой ходьбы)*

**туғарыу** *(егелгән еренән бушатыу)* распрягать, выпрягать; **ат туғарыу** распрягать лошадь

**туйлыҡ мал** *этн.* скот, предназначенный для проведения свадьбы

**туйыр ҡамсы** *этн.* толстая нагайка

**туҡ эсәк** *анат. (эсәктең ас эсәктән тура эсәккә тиклемге йыуан өлөшө)* толстая кишка

**туҡал** *(мөгөҙө булмаған, мөгөҙһөҙ)* комолый, безрогий *(о корове, козе и др.)*

**туҡал үгеҙ** безрогий бык

**туҡал һыйыр** комолая корова

**туҡмаҡ** *этн. (уҫал айғырҙың маңлайына таға торған тимер)* железка для подвешивания на лоб буйного жеребца

**туҡты** *(һарыҡ бәрәсе)* ягненок, которому более шести месяцев

**туҡым** *этн. (эйәр аҫтына һала торған япма)* чепрак

**тулаҡ I 1.** *(иләнмәй кипкән мал тиреһе – аяҡ аҫтына, ҡул тирмәне аҫтына һалғандар)* высушенная без выделки шкура домашнего животного; **2.** *(үлгән быҙауҙың инәһен алдап эйҙереү өсөн тиреһенә һалам тултырып эшләнгән яһалма быҙау; толоп)* чучело дохлого теленка, используемое для обмана коровы при дойке

**тулаҡ II** исхудавшая, обессиленная лошадь

**туларһыҡ** *анат. (малдың артҡы аяғының терһәге менән бәкәле араһындағы өлөшө)* предплюсна

**тулау** брыкаться, бросаться туда-сюда

**тунау** обдирать, сдирать, драть *(шкуру)*

**тунап алыу** содрать шкуру

**туп** стадо, табун, косяк, отара, гурт животных

**тупай** *анат. то же, что* **ашыҡ** *(атта)* альчик

**тупалан** *вет. (йоғошло мал ауырыуы)* мор; *то же, что* **ҡырғын**

**тупалан тейгән** *вет.* мор напал

**тупан** *вет. то же, что* **иҙелмә**

**туплан** *вет. (йоғошло мал ауырыуы)* мор

**туплау** летнее стойбище скота *(на продуваемом тенистом месте)*

**тупсыу** *анат. (һөйәктең тупалсаҡ башы)* тупой, закругленный конец кости

**тупырсыҡ** *диал. (ат бәкәленең тышау һала торған урыны; кешәмеш)* место на щиколотке лошади, куда накладываются путы; лодыжка у лошади

**тура эсәк** *анат. (эсәктең арт юлға килеп бөткән һуңғы өлөшө; күтән)* прямая кишка

**турлама** *зоол. то же, что* **ат күгәүене**

**турпыша** *диал. то же, что* **торба**

**турһыҡ** *этн. (тар ауыҙлы тире һауыт)* бурдюк

**туры** *(ҡараһыу ҡыҙыл, ялы-ҡойроғо ҡара)* гнедой; **туры ат** гнедой конь

**туры ала** гнедо-пегий; **туры ала ат** гнедо-пегий конь

**туры ҡашҡа ат** гнедой конь с проточиной

**турыҡай, турыса, турысай** гнедой конь

**туса** *то же, что* **тыуса**

**тусабай** *(бер өйөр йылҡыһы булған хужа)* хозяин, имеющий табун лошадей

**түбәл** *диал. (йондоҙ ҡашҡа)* масть лошади со звездочкой на лбу

**түбәлек** *диал. то же, что* **лапаҫ**

**түбән көрлөк** низкая упитанность

**түл** *(һөтимәр хайуандарҙа үрсем бирә торған енси күҙәнәк)* плод, женская половая клетка

**түлдәү** *диал. то же, что* **ҡасыу**

**түлле** способный оплодотворяться; **түлле мал** способный оплодотворяться скот

**түллек** *анат. (түл ярала торған инәлек төйөнө)* семяприемник

**түлләнеү** плодиться

**түлләү** приносить приплод; размножаться

**түлһеҙ** бесплодный

**түлһеҙлек** бесплодие, бесплодность

**түләмә** *вет.* сибирская язва

**түш** *анат. (мал кәүҙәһенең алғы ҡабырғаларҙы тоташтырған алға сығыбыраҡ торған өлөшө)* грудь

**түшбау** *диал. то же, что* **тамаҡбау**

**түшелдерек** *диал. то же, что* **күмелдерек**

**түш ите** грудинка

**түшкә** *(һуйып тотошлай ҡуйған мал)* туша *(мясная)*; **бер түшкә ит** туша мяса; **һыйыр түшкәһе** туша говядины

**түшлек 1.** *(бауырлыҡ)* подбрюшник; **2.** *(күмелдерек)* нагрудник

**тын** *(эшләп йәки йөрөп йонсомаған)* откормленный

**тын мал** откормленный на воле скот

**тыу I** стадо

**тыу II** *(тоҡом килтермәгән, үрсем бирмәгән)* яловый; **тыу бейә** яловая кобыла; **тыу ҡалыу** остаться яловой; **тыу һыйыр** яловая корова

**тыуар** *(бәрәнләгән, быҙаулаған)* оягнившаяся, отелившаяся; **өсөнсө тыуар һыйыр** корова, отелившаяся третий раз

**тыуса I** *(ике йәше тулып ҡыҫыр ҡалған – һыйырға, һарыҡҡа ҡарата)* нетель двухгодовалая овца или корова, не давшие приплода

**тыуса һарыҡ** овца, не давшая первого приплода

**тыуса һыйыр** корова, не давшая первого приплода

**тыуса II** *(ике йәштән өскә тиклемге һыйыр малы)* корова в возрасте от двух до трех лет

**тыусыҡ** *(ҡолонлаған байтал)* кобыла, ожеребившаяся на втором году

**тыуһыу** *(түле бөтмәгән килеш быҙауламай йөрөгән мал)* не приносящий по болезни или возрасту приплод

**тыуһыу мал** скот, не приносящий по болезни и возрасту приплод

**тышау I** *(ситкә китмәһен өсөн малдың ике алғы аяғын ара ҡалдырып, ҡуша бәйләү)* спутать, спутывать

**тышау II** *(малды тышай торған бау)* путы

**тышау быуыны** *анат.* путовый сустав

**тышаулау** спутать, спутывать

**тәғәйен мал** *этн.* предназначенный кому-либо или к какому-либо событию скот

**тәзе** *(тәртәне тарттырып алғы күсәр башына эләктергән бау)* тяжи

**тәкә** *(һарыҡ-кәзәнең иркәге)* название самцов мелкого рогатого скота

**тәкә бестереү** кастрировать барана *(козла)*

**тәкә мөгөҙө** *этн.* узор в виде бараньего рога, рогообразный узор

**тәкә һаҡалы** *бот.* вайда

**тәңкә сыбар** с мелкими крапинками; чубарый в крапинку *(о масти животных)*; **тәңкә сыбар туры ат** гнедой конь с мелкими крапинками

**тәртә** *(арба-сананың екке малды егә торған оҙон ағасы)* оглобля

**тәтке** *диал. то же, что* **тейәк**

**тәүге бүкә** *этн. то же, что* **инсе мал**

**тәүер ат** *диал.* ухоженный конь

# У

**уғыҙ** *диал. то же, что* **ыуыҙ**

**уҙамтан** *(уҙарға, алға сығырға тырышыусан – атҡа ҡарата)* старающийся опередить, обогнать, превзойти; ретивый

**уҙамтан ат** ретивый конь

**уҙармандан сабыу** скакать наперегонки

**уҙарманлау** стараться обогнать, опередить

**уҙыу** *спорт.* обогнать, перегонять, объезжать

**уҙыштырыу** *спорт.* устраивать соревнования

**уйма** *диал. то же, что* **бешмә**

**уйнаҡ** резвый; **уйнаҡ тай** резвый жеребенок

**уйнаҡлатыу** позволять играть, резвиться

**уйнаҡлау** *(елеп, һикереп уйнау)* играть, резвиться

**уҡра** *зоол.* личинка овода *(под кожей у рогатого скота)*

**уҡраныу** *(йомшаҡ ҡына итеп тауыш биреү)* тихо призывно ржать

**улаҡ** колода *(водопойная)*; кормушка

**улъя** *уст. то же, что* **аламан**

**умрау** *диал. то же, что* **яурын**

**умрау һөйәге** *анат. (ҡалаҡ һөйәге менән түш һөйәген тоташтырып торған һөйәк)* ключица

**умыртҡалыҡ** *анат.* позвоночник

**уңғы ат** правая лошадь *(при запряжке лошадей парами)*

**уңҡылдау** *екать (при беге – о лошади)*

**упай** *анат. (һыйыр ашығы)* альчик коровы

**упый** *вет.* болезнь копыт у лошадей *(возникает от сырости)*

**урай** *анат. (малдың маңлайындағы йөндөң өйрөлөп үҫкән ере)* вихор *(на макушке)*

**урман кәзәһе** *(ҡоралай)* косуля

**урталыҡ ат** коренная лошадь *(при упряжке в тройку)*

**уртаса көрлөк** средняя упитанность

**уртаса һауым** средний надой

**уртеш** *анат.* *(йылҡы малында аҙау тешкә ҡапланып үҫкән артыҡ теш)* лишний зуб у лошади

**уршылдау** фыркать, фырчать

**уҫтыҡ** *диал.* 1. *то же, что* **утлыҡ**; 2. *то же, что* **һандыҡ**

**утар** 1. *(малды ҡышлатыу урыны)* зимовье скота; 2. *(яҙғы йәйләү урыны)* место весенней кочевки; 3. *(ялан кәртә)* летнее стойбище скота

**утлаҡ** *то же, что* **көтөүлек**

**утлау** 1. пастись; 2. пастбище, выгон; **утларға ебәреү** пастись на пастбище

**утлауыҡ** *(мал утлай торған ер)* пастбище, выгон

**утлыҡ** стойло *(для лошадей)*

**утлыҡса** 1. сеновал, сенник; 2. кормушка, ясли *(для лошадей)*

**уттау** 1. *(көтөүлек)* пастбище; 2. *(ваҡ мал аҙбары)* овчарня

**уттыҡ** *(малға бесән һала торған ҡулайлама)* ясли

**утығыу** 1. *(йәш үләнгә туйыу)* насыщаться весенней травой; 2. *(көскә ултырыу, үҫеп нығыныу)* крепнуть, набираться сил

**ушҡырыу** фыркать

# Ү

**үбәк** *(ат муйыны боҙолғанда яраһына ҡамыт теймәһен өсөн бәйләп ҡуйылған йомшаҡ нәмә)* кусок войлока или холста *(подкладываемый под хомутину, чтобы предохранить шею лошади от натирания)*

**үгеҙ** бык; вол

**үгеҙ балдаҡ** *этн.* *(йөҙөк йәшереп уйнала торған ҡыҙҙар уйыны)* название девичьей игры

**үгеҙ балыҡ** *зоол.* *(этеш)* ёрш

**үгеҙ башмаҡ** годовалый бычок, подтелок

**үгеҙ быҙау** бычок

**үгеҙ егеү** запрягать быка

**үгеҙ ите** бычатина

**үгеҙ күне** бычья кожа

**үгеҙ көйҙөрөү** *вет.* холостить быка

**үгеҙ күгәүене** *зоол.* слепень бычий

**үгеҙ күҙе** *бот. (аҡһырғаҡтыҡы һымаҡ эре япраҡлы, ҡыҙғылт һары сәскәле, төҙ, бейек һабаҡлы дарыу үләне)* арника горная

**үгеҙ ҡамыты** ярмо

**үгеҙ тана** *(ҡышлаған үгеҙ)* годовалый бык

**үгеҙ теле** *бот.* анхуза лекарственная

**үгеҙ тиреһе** бычья шкура

**үгеҙ ут** *бот.* зубровка душистая, лядник

**үктәү** *диал. то же, что* **сығынсылау**

**үкһеү** призывно реветь *(теленок, корова)*

**үкһәү** *(үгеҙ теләү, үгеҙ һорау)* находиться в периоде течки *(о корове)*

**үле тыуған** мертворожденный; **үле тыуған быҙау** мертворожденный теленок; **үле тыуған бәрәс** мертворожденный ягненок

**үле һөт** переохлажденная закваска для кумыса

**үлән утлау** есть траву, пастись на траве

**үмгән** *иҫк. (ат түше, ат күкрәге)* место под хомутом у коня на груди

**үмелдерек** *диал. то же, что* **күмелдерек**

**үңдек** *диал. то же, что* **үңлек**

**үңдерсәк** *анат. (муйындан түбәнгә һанағанда, умыртҡа һөйәгенең алтынсы быуыны)* шестой шейный позвонок

**үңелдерек 1.** *то же, что* **үңлек; 2.** *то же, что* **күмелдерек**

**үңер** *анат.* впадина на позвоночнике между ключицами

**үңер һөйәк** *анат. (күкрәк һөйәге)* грудная кость

**үңлек** *этн. (эйәрҙең сергеһе менән тирлеге араһына һалына торған кейеҙ)* потник

**үңлек кейеҙе** потниковый войлок

**үңәҙ** *вет. то же, что* **бешмә**

**үпкә** *анат. (умыртҡалы йән эйәләренең күкрәк ҡыуышында урынлашҡан тын алыу ағзаһы)* легкое, легкие

**үреш** выгон, выпас

**үрешләү** пастись

**үрмә** *диал. то же, что* **урай**

**үрсел** быстрый, ходкий на подъемах; **үрсел ат** ходкий на подъемах конь

**үрсем 1.** *(үрсетеү өсөн тәғәйенләнгән мал)* приплод; **2.** *(үрсегәндән барлыҡҡа килгән мал)* расплод

**үрсемгә ҡалдырыу** оставить на расплод

**үрсемле** плодовитый

**үрсетеү** разводить, выращивать, размножать

**үрсеү** плодиться; размножаться

**үрәпсеү** *(сапсынып, үрә һикереү – атҡа ҡарата)* встать на дыбы, дыбиться

**үрәт ат** *диал. то же, что* **сығынсы ат**

**үткәшеү** *(оҙаҡ ас йөрөүҙән нык тартылыу)* становиться впалым, впасть *(о животных)*

**үшән** ленивый; **үшән ат** ленивый конь

## Ф

**фаворит** *спорт. (бәйгеләрҙә еңеүенә күпселек кеше ышаныс тотҡан ат)* фаворит

**фарасат** *спорт. (һыбай йөрөү оҫталығы)* мастерство верховой езды

**фляйер** *спорт. (ҡыҫҡа аралыҡҡа саба торған ат)* фляйер *(лошадь, скачущая на короткие дистанции)*

## Х

**хайуан** скот, животное *(домашнее)*

## Һ

**һаба** *этн.* хаба *(прокопченный кожаный сосуд из шкуры крупных животных для хранения кумыса)*

**һабаҡ** *этн. (нуҡтаның эйәк аҫтынан үткәреп бәйләгән бауы)* поводок

**һабан аты** конь для пахоты

**һабан күргән тай** *диал. (бер йәшлек тай)* годовалый жеребенок

**һабанға егеү** запрягать в плуг

**һағалдырыҡ** *этн. (йүгәндең тамаҡ аҫтынан бәйләй торған бауы)* подбородник, подгубник *(конской узды)*

**һағалдырыҡлау** прикреплять подбородником

**һаҙаған** многолетний, долголетний; долго хранившийся, прошлогодний

**һаҙаған айғыр** жеребец 10–15-ти лет

**һаҙаған бесән** прошлогоднее сено

**һайҙаҡ** лошадь, отобранная из общего косяка

**һайлан ат** отборный конь

**һаҡа айғыр** *диал. то же, что* **һаҙаған айғыр**

**һаҡау** *вет. (тамаҡ аҫты шешеп, танауынан ҡан килтерә торған йоғошло йылҡы ауырыуы)* мыт

**һала** *этн. (йылҡы йәки һыйыр тиреһенән яһалған һауыт)* хала

**һала ҡолонлау** *(ҡолон һалыу)* выкидыш *(у лошади)*

**һалпы ҡолаҡ ат** вислоухий конь

**һамай сасы** *диал. то же, что* **кикел**

**һан** *(мал түшкәһенең бер өлөшө)* часть туши

**һандау** *(ҡымыҙ һала торған ағас күнәк)* деревянное ведро для кумыса

**һандыҡ** *(мал ашағандан ҡалған эре-торо бесән йәки һалам)* объедки, остатки сена от корма животных

**һандыҡлау** оставить объедки, остатки сена от корма

**һандуғас ботло ат** лошадь со стройными, тонкими ногами

**һарай** хлев, сарай

**һараҡ; һараҡ башмаҡ** годовалый осенний теленок

**һары I** *вет. то же, что* **һаҡау**

**һары II** светло-рыжий, сивый; соловый

**һары ат** соловая лошадь

**һары ала** желто-пегий; **һары ала айғыр** желто-пегий жеребец

**һары ҡола** солово-саврасый; **һары ҡола ат** солово-саврасый конь

**һары туры** солово-гнедой, темно-гнедой; **һары туры ат** темно-гнедой конь

**һары ял ат** лошадь с сивой гривой

**һарыса (һарысай)** соловая лошадь

**һарыҡ** овца; **бәрән һарыҡ** (*имеҙеүҙән туҡтағас икенсе тапҡыр бәрәсләгәнсе*) овца с момента прекращения кормления до второго окота; **шешәк һарыҡ** *(икенсе тапҡыр бәрәсләгәс өсөнсө тапҡыр бәрәсләгәнгә ҡәҙәр)* овца в возрасте между вторым и третьим окотом; **тыу һарыҡ** *(бер тапҡыр ҙа бәрәсләмәгән)* овца ни разу не окотившаяся

**һарыҡ аҙбары** кошара, овчарня, овчарник

**һарыҡ бәрәсе** ягненок

**һарыҡ ите** баранина

**һарыҡ йөнө** овечья шерсть

**һарыҡ йыуаһы** *бот. (сөсө йыуа)* лук горный

**һарыҡ көтөүе** отара

**һарыҡ көтөүсеһе** чабан

**һарыҡташ** *этн. (боҙ дәүеренән ҡалған ҙур йомро таш)* валун

**һарыҡ тиреһе** овечья шкура, овчина

**һарыҡ тәкәһе** баран

**һарыҡ-кәзә** *собир.* мелкий рогатый скот

**һарыҡ-кәзә көтөүе** стадо мелкого рогатого скота

**һарыҡ-кәзә малы** овцы и козы *(как вид скота)*

**һарыҡсылыҡ** овцеводство

**һарыҡсылыҡ совхозы** овцеводческий совхоз

**һарыҡсылыҡ менән шөғөлләнеү** заниматься овцеводством

**һарыу 1.** мочиться; **2.** моча

**һауғыс** *разг.* доильный аппарат

**һауҙыҡ** *диал. то же, что* **орғасы**

**һауҙырыу** доиться, давать молоко

**һаумал 1.** *(яңы ғына һауылған бейә һөтө)* свежее кобылье молоко; **2.** *(йәш ҡымыҙ)* свежий кумыс

**һаумал ҡымыҙ** кумыс, приправленный свежим кобыльим молоком

**һауры** *анат.* **1.** *(ат һыртының артҡы өлөшө, янбашы)* круп; **2.** *(һыйыр малы тиреһенән ҡыҙылға буяп эшләнгән күн)* кожа из коровьей шкуры, выкрашенная в красный цвет

**һауры ситек** ичиги из коровьей шкуры

**һауым** *(һауып алынған һөт күләме)* удой

**һауым артыу** повышение удоя

**һауым күнәге** подойник, дойник

**һауын** дойка

**һауын бейә** *(һауҙырған, һөт биргән)* дойная кобыла

**һауын малы** дойный скот

**һауын һыйыр** дойная корова

**һауынды** *диал. (һауа торған малы, һыйыры булған)* имеющий корову

**һауынсы** доярка; дояр

**һауыр** *анат. то же, что* **һауры**

**һауыу 1.** доить; доение; **2.** *(буйҙан-буй йайлап тартыу, һуҙып тартып алыу)* тянуть, вытягивать что; **ауҙы һауыу** вытягивать сеть

**һаяҡ** *(менелмәй, егелмәй, өйөрҙән айырылып үҙ яйына яңғыҙ йөрөгән)* одиноко пасущийся, свободный

**һаяҡ ат** одиноко пасущийся конь

**һаяҡ мал** одиноко пасущийся скот

**һебә** *анат. этн. (бөйөр янындағы ҡыҫҡа ҡабырға ите – ярышта еңеүселәргә бирелә)* приз в виде куска баранины, вручаемый победителю на соревнованиях

**һебәлек** кусок мяса на бараньих ложных ребрах

**һейҙек** *то же, что* **һарыу**

**һейҙек ҡыуығы** *анат.* мочевой пузырь

**һейҙек юлы** мочеиспускательный канал

**һейеү** мочиться, испускать мочу

**һергә** *диал. то же, что* **морондоҡ**

**һере** *(бирешмәй торған, сыҙамлы)* выносливый, крепкий

**һере ат 1.** выносливый конь; **2.** *то же, что* **сығынсы ат**

**һигеҙгүҙ** *анат. (умыртҡа һөйәгенең оса һөйәгенә тоташҡан иң аҫҡы өлөшө)* крестец

**һигеҙгүҙ һөйәге** *анат.* крестцовая кость

**һикертеп сабыу** галоп, галопировать

**һимеҙ** жирный; упитанный

**һимеҙ ит** жирное мясо

**һимеҙ һарыҡ** упитанная овца

**һимеҙлек** жирность; упитанность

**һимертеү** откармливать; откорм

**һимертеү тибы** тип откорма

**һороҡай** лошадь коричневой масти

**һоро** светло-бурый, светло-коричневый; **һоро ат** светло-коричневый конь

**һөҙгө** *диал. то же, что* **һөт һөҙгөсө**

**һөҙгәк** *то же, что* **һөҙөшкәк**

**һөҙлөк** навар *(на мясном бульоне)*

**һөҙөк** *диал. то же, что* **һөҙлөк**

**һөҙөшәк** бодливый

**һөҙөшәк үгеҙ** бодливый бык

**һөҙөү** бодать

**һөйһөн** *этн. (туй мәһәренән тыш ҡыҙҙы оҙатып алырға килгәндә һыйлау өсөн кейәү килтергән мал)* скот, подаренный женихом невесте в честь ее переезда в его дом

**һөйһөн туйы** *этн. (ҡыҙҙы оҙатып алырға килгәндә яһаған туй)* пир в честь переезда невесты в дом жениха

**һөйәк** *анат. (умыртҡалы хайуандарҙың һөлдәһен тәшкил иткән ҡаты өлөшө)* **1.** кость; **2.** кусок мясной туши

**һөлдә** *анат. (умыртҡалы хайуандарҙың кәүҙәһен тотоп торған һөйәктәр берекмәһе)* скелет

**һөр** вяленый *(о мясе)*

**һөргө** *диал. то же, что* **ирәк**

**һөргөс** *диал. то же, что* **ирәк**

**һөркә** бурый *(о масти животных)*; **һөркә һыйыр** бурая корова

**һөрөнсәк ат** спотыкливый конь

**һөртәш** *диал. (һорғолт күрәнһыу)* бурый

**һөт** молоко

**һөт арттырыу** раздоить, раздой

**һөт биҙҙәре** *анат.* молочные железы

**һөт күнәге** дойница, подойник

**һөт күтәреү** перестать доиться

**һөт ҡуйылығы** жирность молока

**һөт таҙартҡыс** молокоочиститель

**һөт теше** *анат.* молочный зуб

**һөт төшөү** прибавлять молока, раздоиться

**һөт үлсәгес** молокомер

**һөт үткәргес** молокопровод

**һөт һауыты** молочник

**һөт һөҙгөсө** цедилка

**һөт фермаһы** молочная ферма

**һөтимәр хайуан** млекопитающее животное

**һөтимәрҙәр** *зоол. (балаларын һөт менән туҡландыра торған умыртҡалы хайуандар; имеҙеүселәр)* млекопитающие

**һөтлө** молочный, дающий много молока

**һөтлө һыйыр** молочная корова

**һөтлөгән** *бот. (ике өлөшлөләр ғаиләһенә ҡараған тар ғына ваҡ япраҡлы, йәшел һары сүк сәскәле, һөтлө үлән)* молочай

**һөтлөк** *этн. уст. (йәйләүҙә һөт һаҡлай торған соҡор)* яма для хранения молока на летовке

**һөтлөкәй** *бот. то же, что* **һөтлөгән**

**һөтләнеү** прибавлять молока *(о дойных животных)*

**һөтсө** *разг.* продавец молока

**һуғарыу** поить, поение

**һуғарыу урыны** водопой
**һуғым** скот, предназначенный на убой
**һуғым аты** конь, предназначенный на убой
**һуғым йылҡысылығы** мясное коневодство
**һуғым малы** убойный скот
**һуғым ашына саҡырыу** *этн. (ҙур һуғым һуйғандан һуң ҡунаҡтар саҡырып, шул ит менән һыйлау)* приглашать гостей после забоя скота в гости
**һуғым һимертеү** откармливать скот на убой
**һуғымлыҡ** убойный скот
**һуйыу** *(малды салып, тейешенсә эшкәртеү)* резать и разделывать *(скот)*
**һулғы ат** левая лошадь *(при запряжке лошадей парами)*
**һум ит** мясо *(огузок; мякоть)*
**һунар аты** охотничий конь
**һыбай 1.** верхом; **2.** всадник, верховой
**һыбай аты** верховая лошадь
**һыбай йөрөү** ездить верхом
**һыбай йөрөүсе** всадник
**һыбай сабыу** скакать верхом
**һыбайлау** садиться верхом на коня
**һыбайлы** всадник, верховой
**һыбайса** *диал. то же, что* **менге ат**
**һыбайсы** *то же, что* **һыбай йөрөүсе**
**һыҙҙырыу** *(эс майын ҡыҙҙырып иретеп туң май яһау)* топить *(сало)*
**һыҙлыҡ** *(эс майының иретеп майын алғандан һуң иремәй ҡалған ҡалдығы)* шкварки
**һыйыр** корова
**һыйыр аҙбары** коровник, хлев для коров
**һыйыр елене** *анат.* коровье вымя
**һыйыр ите** говядина
**һыйыр йылы** *этн. (ун ике йыллыҡ мөсәлдең икенсе йылы)* год коровы *(второй год двенадцатилетнего животного цикла у мусульман)*
**һыйыр малы** коровы, рогатый скот *(как вид скота)*
**һыйыр сәнскәге** *то же, что* **уҡра**
**һыйыр теле** *бот.* серпуха
**һыйыр һарайы** коровник, хлев для коров
**һыйыр һауыу** доить корову
**һыйыр һауыусы** дояр, доярка
**һыйыр эймәй** корова доится плохо

**һыйыр һөтө** коровье молоко

**һыйырғойроҡ** *бот. (һары сүк сәскәле, алмаш япраҡлы бейек ҡый үләне)* коровяк

**һыйыр шалҡаны** *бот.* брюква

**һыйыр ятағы** *то же, что* **ялан кәртә**

**һылыулау** *вет. (аталыҡ биҙҙәрен ҡырҡып алыу)* холостить, кастрировать

**һыңар тояҡлылар** *то же, что* **йомро тояҡлылар**

**һыпыртмаҡ** *этн. (һыпырылып торған тоҡанлы бау)* лассо, аркан

**һырға ауырыуы** *вет.* воспаление околоушной железы

**һыртаҡ** *(һырт буйы аҡ)* с белой полосой вдоль спины

**һыртаҡ һыйыр** корова с белой полосой вдоль спины

**һыртҡы** *диал. то же, что* **арҡалыҡ**

**һыртлыҡ** *этн. (шлеяның һырттан үткән буй ҡайышы)* продольник, продольный ремень шлеи

**мамка** һөт инәһе *(сит бәрәсте имеҙеүсе һарыҡ)*
**масса животных** малдарҙың ауырлығы
**масса зеленая** йәшел масса *(яңы сабылған үлән)*
**масса сухая** ҡоро масса *(киптерелгән үлән)*
**масса фекальная** тиҙәк-тиреҫ массаһы *(ашлама)*
**мастит** *вет.* мастит, таш имсәк *(елен шешеү)*
**мастер машинного доения** машина менән һауыу оҫтаһы
**масть** төҫ *(малдарҙың төҫө)*; **лошадь вороной масти** ҡара төҫтәге ат
**матка 1.** инә хайуан; **2.** *анат.* балаятҡы, ҡарын
**матка племенная** тоҡомло инә мал
**матка подсосная** имеҙеүсе инә мал
**матка супоросная** быуаҙ сусҡа
**матка суягная** быуаҙ һарыҡ
**матка холостая** ҡыҫыр хайуан *(тейешле ваҡытында быуаҙламаған мал)*
**матки разовые** бер тапҡыр балалай торған сусҡалар *(балалағас та һимертеп һуялар)*

**маткавозка** һарыҡ ташығыс *(бәрәсләгән һарыҡтарҙы ташый торған махсус арба)*

**машина доильная** һауыу машинаһы

**мелкий рогатый скот** һарыҡ-кәзә

**менингит** *вет.* тилбә *(йылҡы малын тартыштырып, әйләнсек яһай торған яман ауырыу)*

**мерин** алаша *(бестерелгән айғыр)*

**меринос** меринос *(нәҙек йомшаҡ аҡ йөнлө һарыҡ тоҡомо)*

**мерлушка** илтер *(йәш бәрәс тиреһе)*

**мертворожденный** үле тыуған *(бәрәс, быҙау, ҡолон һ. б.)*

**метизация** метизлаштырыу *(төрлө тоҡомло малдарҙы ҡасырыу)*

**метис** метис *(төрлө тоҡом ҡушылыуынан килеп сыҡҡан мал)*

**мешок для овса** моронһалыҡ, мышыу *(атты юлда ашата торған септә моҡсай)*

**микоз** *вет.* микоз *(малдарҙа була торған бәшмәк ауырыуы)*

**млекопитающие** *зоол.* имеҙеүселәр, һөтимәрҙәр

**мозг спинной** *анат.* йөлөн, арҡа мейеһе

**мозоль твердая** *вет.* ҡолаңса *(ат тубығының эс ягындағы ҡаты сөйәл)*

**молодняк** йәш мал

**молодняк крупного рогатого скота** йәш һыйыр малы

**молодняк овец** йәш һарыҡтар

**молодняк конский** тай-тулаҡ

**молозиво** ыуыҙ һөт *(1. һөтимәрҙең бала килтергәс имсәккә төшкән тәүге һөтө; 2. быҙаулаған һыйырҙың иң тәүге һөтө һәм шунан бешерелгән ашамлыҡ)*

**молоко** һөт

**молоко коровье** һыйыр һөтө

**молоко, выдоенное при повторном доении** эйенде *(ҡабат эйҙереп һауылған елен төбө)*

**молоко парное** яңы һауған һөт

**молоко цельное** өҫтө алынмаған (айыртылмаған) һөт

**молочница** *вет.* ауыҙ эсе боҙолоу *(йәш малға ҡарата)*

**молочность** һөтлөлөк

**молочный** *(дающий много молока)* еленек *(һыйырға ҡарата)*

**молочная корова** һөтлө һыйыр

**молочные железы** *анат.* һөт биҙҙәре

**молочный зуб** һөт теше *(һуңынан төшә торған теш)*

**молочный теленок** йәш, имсәк быҙау

**монокорма** бер төрлө аҙыҡ

**мор** *вет. (повальная смерть, эпидемия)* ҡырғын, үләт *(малды ҡуплап үлтергән афәт)*

**морда** *анат.* морон

**мотать головой** салҡыу, салыҡлау *(башты аҫҡа-өҫкә һелкеү – атҡа ҡарата)*

**мочиться** *(о лошади)* ҡашаныу

**мошонка** *анат.* ҡаҫа *(1. айғыр һәм аттарҙың тоҡсаһы; 2. айғыр ғәүрәтенең тышҡы ҡабы, ҡаплап торған көбө)*

**мул** ҡасыр *(бейә менән ишәк гибриды)*

**мундштук** ауыҙлыҡ *(йүгәндең ат ауыҙына кейҙерелә торған быуынлы тимере)*

**муртай** *этн.* муртай *(ыҫланған мал тиреһенән тар ауыҙлы, ялпаҡ итеп тегелгән бәләкәй һауыт)*

**муругий** *(рыже-бурый или буро-черный – о масти лошади)* ҡоба ҡыҙыл; **муругий жеребец** ҡоба ҡыҙыл айғыр

**мухортый** *(гнедой с желтоватыми подпалинами – о масти лошади)* кир *(һарғылт туры)*; **мухортая кобыла** кир бейә

**мыт** *вет.* һаҡау *(тамаҡ аҫты шешеп, танауынан ҡан килтерә торған йоғошло йылҡы ауырыуы)*

**мышастый** һоро *(көл төҫө)*; **мышастый жеребец** һоро айғыр

**мякиш копыта** *анат.* тояҡ мендәре, йөрәк ите *(аттың тояғы аҫтындағы йомшаҡ ит)*

**мясо** ит

**мясо парное** йылы *(яңы һуйылған)* ит

**мясозаготовка** ит әҙерләү

**мясопоставка** ит тапшырыу

**мясосовхоз** итселек совхозы

# Н

**набирать вымя** елен еткереү *(төшөрөү, тултырыу)*; еленләү *(быуаҙ малдың быҙаулау һәм ҡолонлау, бәрәсләү алдынан һөт биҙҙәре эшләй башлау, елен тулышыу)*

**набрасывать лассо** ҡороҡ һалыу, ҡороҡлау

**набрюшник 1.** бауырлыҡ *(аттың бауыр аҫтынан үткәреп ике тәртәгә бәйләгән бау – һарҡыу тотоу өсөн)*;

2. көйәк *(тейешһеҙ ваҡытта артылмаһын өсөн һарыҡкәзә тәкәһенең бауыр аҫтына бәйләй торған кейеҙ)*

**навес** лапаҫ, япма, әүеҫлек, түбәлек

**наглазник** ҡолаҡһа *(сығынсы аттың күҙен ҡаплау өсөн йүгәнгә ике яҡлап тегелгән күн)*

**нагнет** *вет.* өпәк *(ат муйынының ҡамыт һуғып шешкән ере)*

**нагрудник** *(седла)* күмелдерек *(аттың түше аша тартылған эйәр ҡайышы)*

**нагул** көтөүҙә һимертеү

**надевать путы** кешәнләү

**надой** һауым *(һауып алынған һөт)*

**надой средний** уртаса һауым

**надой суточный** көндәлек *(тәүлек)* һауым

**наезживание** ат өйрәтеү

**накостник** *вет.* һөйәк шеше *(аттарҙа була торған ауырыу)*

**налив** *вет.* аяҡҡа һыу төшөү *(йылҡы ауырыуы)*

**налобник** маңлайса *(йүгәндең маңлай өлөшөндәге арҡыры ҡайышы)* ҡашлау

**наминка** *вет.* табан шеше *(йылҡы менән һыйыр малында була торған ауырыу)*

**намордник 1.** морондоҡ *(инәһен иммәһен өсөн быҙау, бәрәстең моронона кейҙерелә торған сәнскеле нәмә; борғаҡ)*; **2.** моронһалыҡ *(йүгәндең өҫтөнән арҡыры торған өлөшө)*; **3.** томолдороҡ *(кешнәп тауыш сығармаһын өсөн ат ауыҙына кейҙерелә торған киндер морондоҡ)*

**нарост** *вет.* оро *(аттың аяғында була торған ҡаты шешек)*

**насморк** *вет.* тымау *(ғәҙәттә йылҡы малында була торған ауырыу)*

**настриг шерсти** йөн ҡырҡыу

**насытиться весенней травой** утығыу

**натереть хомутом** ҡамыт һуғыу *(атҡа ҡарата)*

**натягивать привязь** еле һуҙыу

**нёбо** *анат.* аңҡау

**негретти** негретти *(һарыҡ тоҡомо)*

**недержание мочи** *(у кобылиц) вет.* киләңке *(бейәләрҙең бәүел тота алмаған ауырыуы)*

**недоуздок** нуҡта *(ауыҙлыҡһыҙ йүгән)*

**недубленный, сыромятный** *(о коже)* ҡоба, *(иләнмәгән, эшкәртелмәгән)* тулаҡ

**некастрированный** бестерелмәгән, көйҙөрөлмәгән; ҡыуғыр

**некастрированный бык** ҡыуғыр үгеҙ

**необъезженный, неприрученный** аҫау

**необъезженный жеребец** аҫау айғыр

**непарнокопытные** *зоол.* йомро *(һыңар)* тояҡлылар

**нетель** тыуса **1.** *ике-өс йәшлек һыйыр;* **2.** *ике йәше тулып, ҡыҫыр ҡалған һыйыр, һарыҡ*

**нетель двухгодовалая** тана башмаҡ

**неук** өйрәтелмәгән ат

**ножницы** *(для стрижки овец)* ҡырҡҡы *(һарыҡ, кәзә йөнөн ҡырҡа торған ҙур ҡайсы)*

**ноздри** *анат.* морон тишеге

# О

**обводнение пастбищ** көтөүлектәргә һыу үткәреү

**обмер животных** малдарҙы үлсәү

**обножка** аяҡ йөнө *(һарыҡтың аяғынан ҡырҡылған йөн)*

**оборот стада** көтөү әйләнеше *(малдарҙың тотонолоп һәм өҫтәлеп тороуы)*

**обуздывать** ауыҙлыҡлау

**объездчик** ат өйрәтеүсе

**объедки, остатки** *(сена от корма)* тапанды; һандыҡ *(мал ашағандан ҡалған бесән йәки һалам)*

**овод кожный** *зоол.* уҡра *(һыйыр малдарын зарарлаған бөжәк)*

**овод лошадиный** *зоол.* бөгәләк, бөгәлсән *(йылҡының ҡорһаҡ аҫтына йомортҡа һалып, эсен ҡортлата торған себен)*

**овод овечий** рәшә себене *(һарыҡтарҙы зарарлаған бөжәк)*

**овца** һарыҡ *(дөйөм исем);* **1.** бәрән һарыҡ; **2.** шешәк һарыҡ; **3.** тыу һарыҡ

**овца в возрасте между вторым и третьим окотом** шешәк һарыҡ

**овца грубошерстная** тупаҫ йөнлө һарыҡ

**овца с момента прекращения кормления до второго окота** бәрән һарыҡ

**овца каракулевая** ҡаракүл һарығы *(ҡыҫҡа ғына бөҙрә йөнлө, затлы һарыҡ тоҡомо)*

**овца курдючная** ҡуй һарығы *(оса майы яҫтыҡланып торған үҙенә бер төрлө һарыҡ)*

**овца, не давшая первого приплода** тыуса һарыҡ

**овца после второго окота** тешәү һарыҡ

**овца поздно спарившаяся** кисәү һарыҡ

**овца суягная** быуаҙ һарыҡ

**овца цигайская** цигай һарыға

**овца яловая** ҡыҫыр *(тыу)* һарыҡ

**овца тонкорунная** нәҙек йөнлө һарыҡ

**овцевод** һарыҡсылыҡ белгесе; һарыҡ үҫтереүсе

**овцеводство** һарыҡсылыҡ, һарыҡ аҫрау менән шөғөлләнеү

**овцематка** һарыҡ

**овцеферма** һарыҡ фермаһы

**овчар** һарыҡ ҡараусы

**овчарня** һарыҡ аҙбары

**овчина** иләнгән һарыҡ тиреһе

**окот** бәрәсләү *(һарыҡ-кәзәгә ҡарата)*, балалау *(сусҡаға ҡарата)*

**оплодотворение** аталаныу

**опорос** балалау *(сусҡаға ҡарата)*

**опухоль злокачественная** *вет.* талау *(малдарҙа була торған бик йоғошло яман шешек)*; түләмә

**оседлать** эйәрләү

**осеменение** ҡасырыу

**осеменение искусственное** яһалма ҡасырыу

**основная лошадь, запряженная пристяжным** төпкө ат

**остаток молока** *(в вымени)* елен төбө

**остужать коня** *(после долгой езды)* ат йөрөтөү, ат һыуытыу

**отара** һарыҡ көтөүе

**отгон** көтөүҙә йөрөтөү

**отгонное животноводство** ҡыуғын малсылыҡ

**откармливать** көрәйтеү, һимертеү

**откармливать скот на убой** һуғым һимертеү

**откорм скота** мал һимертеү, һуғымға ашатыу

**откорм беконный** беконға һимертеү *(бекон алыу өсөн сусҡаларҙы махсус һимертеү)*

**откорм мясной** иткә һимертеү

**откорм сальный** майға һимертеү

**откормленный** *(упитанный)* көр

**откорм на воле скота** тын мал

**отродье животных** нәҫелле малдар төркөмө

**отрыгивать пищу** *(для вторичного пережевывания)* көйөш ҡайтарыу

**отъем** имеүҙән айырыу *(бәрәстәргә, бызауҙарға ҡарата)*

**отъемыш** имеүҙән айырылған йәш мал

**ошейник** *(для теленка)* бызау муйынсағы

# П

**падалище** үләкһә соҡоро

**падаль** үләкһә

**падеж** үлеү, ҡырылыу

**панариций** *вет.* панариций *(һыйыр малдарында була торған тояҡ ауырыуы)*

**панзоотия** *вет.* панзоотия *(йоғошло ауырыуҙарҙың бер нисә илгә таралыуы)*

**паратиф** *вет.* паратиф *(йоғошло мал ауырыуы)*

**парафиляриоз** *вет.* парафиляриоз *(йылҡы һәм һыйыр малдарында була торған селәүсен ауырыуы)*

**парнокопытные** *зоол.* айыры *(ҡуш)* тояҡлылар

**пастбище** утлау; көтөүлек

**пастбище горное** тау көтөүлеге

**пастбище искусственное** яһалма көтөүлек

**пастбище культурное** культуралы көтөүлек

**пастбищеоборот** көтөүлек әйләнеше *(көтөүлекте сиратлап файҙаланыу системаһы)*

**пастбищное содержание животных** малдарҙы көтөүлектә аҫрау

**пастух** көтөүсе

**пастух электрический** электр көтөүсе *(электр үткәрелгән кәртә)*

**пастушья сумка** *бот.* көтөүсе муҡсайы

**пастьба** мал көтөү

**пастьба вольная** иректә көтөү

**пастьба загонная** загонлап көтөү

**пастьба круглосуточная** тәүлек әйләнәһенә көтөү

**пастьба на привязи** арҡанлап көтөү *(ауырыу малдарға ҡарата)*

**пах** *анат. (место между бедрами в нижней части живота, а также между одним бедром и нижней частью)* сандыр *(мал ҡорһағының сат тирәһендәге өлөшө)*

**пахотный конь** һабан аты

**пегий** ала, сыбар *(атҡа ҡарата)*; **пегий конь** ала ат

**пего-сивая лошадь** сыбар күк ат
**первотелка** тана һыйыр
**передняя лука седла** эйәрҙең алғы ҡашы
**передний зубец подковы** дағаның алғы имсәге *(теше)*
**передняя часть туши** ал һан *(түшкәгә ҡарата)*
**перекисать** *(о кумысе)* ҡурйыу
**перекладина** *(для подвешивания туши при свежевании)* тейәк
**перекликаться ржанием** кешнәшеү
**перемежать доение с подпуском теленка-сосунка к корове** имеҙеп һауыу
**перепись скота** малдарҙы иҫәпкә алыу
**переохлажденная закваска для кумыса** үле һөт *(ҡымыҙ емләр өсөн кәрәгенән артыҡ һыуынған һөт)*
**перестать доиться, пропадать** *(о молоке)* һыуалыу
**перестриг** көҙгө йөн
**период лактации** һауҙырыу осоро
**период молозивный** ыуыҙ осоро
**период окота** бәрәсләү осоро
**период подсосный** имеү *(имеҙеү)* осоро
**период послеродовый** тыуҙырғандан һуңғы осор
**период стойловый** аҙбарҙа аҫрау осоро
**период сухостойный** һыуалыу осоро
**период течки** ҡасыу осоро
**период удойный** һауыу *(һөт биреү)* осоро
**печень** *анат.* бауыр
**пластать мясо** ит боҙоу
**племенное хозяйство** тоҡомсолоҡ хужалығы
**племенной жеребец** тоҡом айғыры
**племенное коневодство** тоҡом йылҡысылығы
**плечо** *анат.* яурын
**плод** *анат.* яралғы
**плодиться** үрсеү
**плодовитый** үрсемле, ҡурлы
**плодовитый скот** ҡурлы мал
**площадка доильная** һауыу майҙансығы *(фермаларҙа)*
**площадка откормочная** һимертеү майҙансығы
**плюсна** *анат.* бәшәләй
**повод** теҙген *(нуҡта, йүгәндең ат башын тота торған бауы)*
**поводок** һабаҡ *(нуҡтаның эйәк аҫтынан үткәреп бәйләгән бауы)*

**повязка специальная** *(для баранов и козлов для регулирования случки)* көйәк

**подбородочная яма** *анат.* эйәк соҡоро

**подбородник** һағалдырыҡ *(йүгәндең тамаҡ аҫтынан бәйләй торған бауы)*

**подбрюшник** бауырлыҡ *(аттың бауыр аҫтынан үткәреп ике тәртәгә бәйләгән бау)*

**поддой** елен төбөн һауыу

**подкова** даға

**подковать** дағалау

**подойник** һауым *(һөт)* күнәге

**подпасок** көтөүсе ярҙамсыһы

**подпруга** айыл *(1. ыңғырсаҡты бауыр аҫтынан тарттырып нығыта торған яҫы бау; 2. эйәрҙең сандырҙан алып тарттыра торған ҡайышы)*

**подпускать, припускать** ҡушыу

**подпускать теленка к корове** быҙауҙы һыйырға ҡушыу

**подседельник** ыңғырсаҡ бауы

**подстилка** аҫлыҡ *(малдар өсөн)*

**подсвинок** сусҡа балаһы *(дүрт-алты айлыҡ)*

**подушка хомута** ҡамыт кейеҙе

**подтелка** тана, башмаҡ

**подхвостник** ҡойошҡан

**поилка** һыу эсергес

**поилка групповая** төркөмләп (күмәкләп) эсергес

**поилка индивидуальная** берәмләп эсергес

**поилка сосковая** имеҙлекле эсергес

**пойло** малдарҙың һыу эсеү урыны

**позвонок** *анат.* умыртҡа, умыртҡа һөйәге

**позвоночные** *зоол.* умыртҡалылар

**поздний теленок** сәңгәр быҙау

**помесь** аҙман, ҡатнаш тоҡом *(төрлө тоҡом ҡатнашҡандан килеп сыҡҡан мал)*

**помет 1.** тиҙәк; **2.** сусҡаның балалағанда тыуҙырған балалары

**поперечник, поперечный ремень** *(у шлеи)* биллек

**порода** тоҡом

**порода бестужевская** бестужев тоҡомо *(һыйырға ҡарата)*

**порода главная** төп тоҡом

**порода молочно-мясная** ит-һөт тоҡомо

**порода мясная** ит тоҡомо

**порода плановая** планда билдәләнгән тоҡом

**порода симментальская** симменталь тоҡомо *(һыйырға ҡарата)*

**порода черно-пестрая** ҡара-сыбар тоҡом *(һыйырға ҡарата)*

**породистость** тоҡомлолоҡ

**породность** тоҡомсолоҡ

**породоиспытание** тоҡом һынау

**породы лошадей** йылҡы тоҡомдары

**породы овец** һарыҡ тоҡомдары

**породы свиней** сусҡа тоҡомдары

**пороки шерсти** йөндөң кәмселеге

**пороз** ата сусҡа *(бестерелмәгән)*

**поросение** бәрәсләү *(сусҡаға ҡарата)*

**поросенок** сусҡа бәрәсе

**послед** *анат.* сыу, сыуын *(мал ҡарынындағы бала ята торған төргәк)*

**постромка** мисәү *(арҡаны, бауы)* ҡайышы

**потник** тирлек, ыңғырсаҡ кейеҙе

**потниковый войлок** үңлек кейеҙе

**потрава** тапатыу *(ашлыҡ хаҡында)*

**попона** ат ябыуы

**почки** *анат.* бөйөр

**почтовая лошадь** *тар.* ям аты

**поярок** бәрән йөнө

**поясница** *анат.* бил

**предплюсна** *анат.* туларһыҡ, ҡушарбаш

**привыкать друг к другу** тилеү *(бер-береһенә сит булған мал инәһенең ҡушылып балаһына эйәләшеүе)*

**привязное содержание скота** малдарҙы бәйләп аҫрау

**привязь** бәй, еле

**пригон** туплау *(малдарҙы туплап ял иттерә торған урын)*

**приданое в виде скота** *(со стороны невесты) этн.* мәһәр малы

**приз** бәйге *(на скачках)*

**приплод** үрсем

**приплод осенний** *(о ягненке, козленке)* көҙләүес

**приплод поздний** *(у овец, коз)* бүлтерек

**припрягать** мисәү, мисәүләү

**приучить жеребенка сосать другую кобылицу** ҡолон тилетеү

**приучить к упряжке** еккегә өйрәтеү

**проба** һынау

**проба табунная** көтөүҙәге һынау *(енси теләгә булыу-булмауын)*

**пробник** һынаусы

**продолговатое белое пятно на лбу животных** сыбай ҡашҡа

**продолговатый, удлиненный** сыбай

**продольник** һыртлыҡ *(шлыяның һырттан үткән буй ҡайышы)*

**производитель** иркәк мал *(айғыр, үгеҙ, тәкә)*

**прямая кишка** *анат.* ҡарта *(йылҡы малының туҡ эсәге);* эсәктең арт юлға килеп бөткән һуңғы өлөшө; күтән

**прямая седелка** ятма ыңғырсаҡ

**пункт ветеринарный** ветеринария пункты

**пункт карантинный** карантин пункты

**пункт случной** ҡасырыу пункты

**пункт убойный** мал һуйыу пункты

**пункт стригальный** йөн ҡырҡыу пункты

**пускать на волю** *(после дойки)* ағытыу *(ҡымыҙға бәйләнгән һауын бейәләрҙе ҡолондары менән иркенгә ебәреү)*

**путлище** өҙәңге бауы

**путовый сустав** *анат.* бәкәл (йәкәл) быуыны *(аяҡтың енсек түбәнендәге сурайып торған быуын һөйәге)*

**путы** тышау; кешән *(йылҡы малының алғы аяғын артҡы аяғының бөгәр өҫтөнә тарттырып бәйләгән бау);* кеҙә *(уҫал бейәне һауған саҡта һыңар артҡы аяғын муйынына тарттырып бәйләгән бау)*

**пясть** *анат.* тикес, бәкәл

**пятка копыта** *анат.* тояҡ үксәһе, бүреһуғар

# Р

**рабочая лошадь** эш аты

**раздатчик кормов** аҙыҡ тараҡҡыс

**раздатчик кормов передвижной** күсмә аҙыҡ тараҡҡыс

**раздатчик кормов стационарный** стационар аҙыҡ тараҡҡыс

**раздоиться** һөт төшөү, һөтләнеү *(һөт биҙенә ҡарата)*

**размножение** үрсеү

**разномастный** төрлө төҫтәге *(хайуандарға ҡарата)*

**разъяренный** *(горячий)* аҫау, ярһып торған, уҫал

**рамбулье** *(порода овец)* рамбулье *(һарыҡ тоҡомо)*

**расплод скота** мал үрсеме *(үрсеү өсөн тәғәйенләнгән мал)*

**рацион кормовой** аҙыҡ рационы

**реберная кость** ҡабырға һөйәге

**реберные мышцы** *анат.* ҡабырға ите

**ребро** *анат.* ҡабырға

**резвиться** уйнаҡлау

**резвый жеребенок** уйнаҡ тай

**резцы** *анат.* алғы тештәр

**репица хвоста** *анат.* ҡойроҡ һөйәге, тоҡол

**ретивый** сапсан, уйнаҡлап *(бейеп)* торған

**рештак** улаҡ, тағараҡ *(һарыҡтарға аҙыҡ һалыу өсөн)*

**рог** мөгөҙ

**родильная** быҙаулатыу бүлеге

**рожа** *вет.* рожа *(суҫкаларҙың йоғошло тире ауырыуы)*

**руминоцентоз** *вет.* руминоцентоз *(газ сығарыу өсөн көйшәүсе малдарҙың ҡарынын тишеү)*

**руно** һарыҡ йөнө *(бер һарыҡтан тотош ҡырҡып алынған йөн)*

**рыжий** ерән *(ҡыҙыл менән һары ҡатыш; ҡыҙғылт һары)*; **рыжая лошадь** ерән ат, ерәнсә, ерәнсәй

**рыже-пегий** ерән ала *(йылҡы төҫө)*; **рыже-пегий жеребец** ерән ала айғыр

**рыже-чалый** ерән бурыл *(йылҡы төҫө)*; **рыже-чалая кобыла** ерән бурыл бейә

**рысак** *(рысистая лошадь)* юртаҡ

**рысь** юртыу *(аттың)*

# С

**савраска** ҡола ат; ҡоласай

**саврасо-пегий** ҡола ала *(йылҡы төҫө)*; **саврасо-пегий жеребенок** ҡола айғыр

**саврасый** (светло-гнедой с черными гривой и хвостом – о масти лошади) ҡола *(үҙе һары, ҡойроҡ-ялы ҡара)*; **саврасый жеребенок** ҡола тай

**садиться верхом** *(на коня)* атҡа атланыу; ат менеү

**садиться верхом без седла** яйҙаҡлау

**сало** туң май

**сало внутреннее** эс майы; ҡарынъяу

**сало конское, покрывающее брюшину и ребра** ҡаҙы

**сало конское с мясом приготовленное в виде колбасы** ҡаҙы

**сало щетинное конской гривы** ҡаҙылы ял

**сальник большой** *анат.* ҡаҙылыҡ, ҙур ҡарынъяу, ҡаҙы

**самец** ата, иркәк

**самка** инә, орғасы, теше

**санитария ветеринарная** ветеринария санитарияһы

**сап** *вет.* маңҡа ауырыуы *(йылҡы малында була торған йоғошло ауырыу)*

**сап легочный** *вет.* үпкә маңҡаһы

**сарай** һарай, аҙбар

**сбой** баш-тояҡ, эс-ҡарын

**сбруйня** сбруйҙар урыны

**сбруя** сбруй, ҡамыт-дуға, өпсөн, ат егәре

**сбор скота в летнее стойбище** саңлау *(малдарҙың көн эҫеһендә күләгәгә йәки еләҫ ергә тупланыуы)*

**светло-бурый** аҡ ҡоба, ҡоба; **светло-бурая корова** ҡоба һыйыр

**светло-караковый** күк бүртә; **светло-караковый жеребец** күк бүртә айғыр

**светло-каштановый** ҡолан *(һорғолт һары)*; **светло-каштановая кобыла** ҡолан бейә

**светло-коричневый** һоро; **светло-коричневый конь** һоро ат

**светло-серый** буҙ *(көлһыу күгелйем)*

**светло-сивый** аҡ буҙ; **светло-сивый конь** аҡ буҙ ат

**свинарник** сусҡа аҙбары

**свинарник-маточник** инә сусҡалар аҙбары

**свинарник-откормочный** сусҡа һимертеү аҙбары

**свинарь, свинарка** сусҡа ҡараусы

**свинина** сусҡа ите

**свиноводство** сусҡасылыҡ

**свиноматка** инә сусҡа

**свиноматка основная** төп инә сусҡа

**свиноматка со шлейфом** инә сусҡа бәрәстәре менән

**свинопас** сусҡа көтөүсе

**свиноферма** сусҡа фермаһы

**свинья** сусҡа

**свинья холостая** ҡыҫыр сусҡа

**севооборот сенокосно-пастбищный** сабынлыҡ-көтөүлек әйләнеше

**седалищный бугор** *анат.* арт һан ҡалҡыулығы

**седелка** ыңғырсаҡ *(өҫтөнән арҡалыҡ үткәреү өсөн аттың һыртына һалына торған, ҡуш кейеҙ мендәрҙән ғибәрәт екке әйбере)*

**седелка горбатая** атлама ыңғырсаҡ

**седельная лука** эйәр ҡашы

**седельная подушка** эйәр мендәре

**седельник** ыңғырсаҡ яһаусы

**седлать** эйәрләү

**седло** эйәр *(һыбай йөрөү өсөн аттың һыртына һала торған ҡулайлама)*

**седло в виде головы медведя** айыу баш эйәр

**седло в виде головы змеи** йылан баш эйәр

**седло для обучения верховой езде** өйрәнсектәр эйәре

**седло для троеборья** өсбәйге эйәре

**седло женское** ҡатын-ҡыҙ эйәре

**седло мужское** ир-ат эйәре

**седло с серебряной лукой** көмөш ҡашлы эйәр

**седло скаковое** бәйге эйәре

**сервис-период** сервис осоро *(һыйырҙың быҙаулаған-дан алып сираттағы ҡасҡанға тиклемге осоро)*

**серый** тимер күк; **серая кобыла** тимер күк бейә

**серый в яблоках** алмасыбар *(ике янбашына алма рәүешендәге таптар төшкән)*; **серый в яблоках конь** алмасыбар күк ат

**сибирская язва** *вет.* түләмә

**сивая лошадь с проточной лысиной на лбу** сыбай ҡашҡа буҙ ат

**сивка** күк ат, күксә, күксәй, күксәнәй

**сивка-бурка** ҡоба ат

**сиво-пегий** күк ала; **сиво-пегий жеребенок** күк ала ҡолон

**сивый** *(серовато-сизый – о масти лошади)* күк *(аҡ)*; **сивый конь** күк ат

**сиво-чалый** бурыл күк; **сиво-чалый жеребец** бурыл күк айғыр

**сивый в яблоках** алмасыбар күк; **сивый в яблоках конь** алмасыбар күк ат

**скакательный сустав** *анат.* бүреһуғар быуын, тулар-һыҡ быуыны

**скаковая лошадь** сапҡыр ат

**скакун на длинные дистанции** *спорт.* оҙам йүгерек

**скачки** бәйге

**скачки большие** оло бәйге

**скачки малые** кесе бәйге

**скот** мал, мал-тыуар

**скот аборигенный** урындағы мал *(урындағы шарттарға яраҡлашып барлыҡҡа килгән мал тоҡомо)*

**скот бродячий** аҙғын мал

**скот годовалый** бер йәшлек мал

**скот домашний** йорт малы

**скот живой** аяҡлы мал

**скот, завещанный, предназначенный к какому-либо событию или кому-либо** *этн.* нәҙер малы *(берәй теләктең ҡабул булыу шартына бәйләп вәғәҙә ителгән мал)*

**скот зимостойкий** ҡышлыҡлы мал

**скот крупный** ҡара мал; эре мал *(йылҡы, һыйыр малы)*

**скот крупный рогатый** һыйыр малы

**скот костлявый** шауҡал мал

**скот мелкий рогатый** ваҡ мал *(кәзә, һарыҡ)*

**скот мясо-молочный** ит-һөт малы

**скот наличный** ҡулдағы мал

**скот на развод** мал ҡуры

**скот откормленный** бағымтал мал

**скот откормленный на воле** тын мал

**скот, пасущийся на воле** буҙ мал

**скот пастбищный** көтөү малы

**скот, подаренный женихом невесте в честь переезда ее в его дом** *этн.* һөйһөн *(туй мәһәренән тыш ҡыҙҙы оҙатып алырға килгәндә һыйлау өсөн кейәү килтергән мал)*

**скот, подаренный при первом входе невесты в дом жениха** *этн.* таянсыҡ *(килен йортҡа төшкәндә ҡәйнәһе биргән мал; килен арбанан шул аяҡлы малға таянып төшә)*

**скот, подлежащий разделу между родственниками умершего** *уст.* аҫаба *(муллаға биргәндән ҡалған мал: уны туғандары үҙ-ара бүлешә)*

**скот в период смены зубов** *(от двух до трех лет)* тешәү мал

**скот, предназначенный для свадьбы** *этн.* туйлыҡ мал

**скот, предназначенный на убой** һуғым малы

**скот, не приносящий приплод** *(по болезни или возрасту)* тыуһыу

**скот, приобретенный путем набегов** *уст.* аламан

**скот продуктивный** продуктивлы мал

**скот прожорливый** асҡаҡ *(ашамһаҡ)* мал

**скот рабочий** эш малы *(ат, үгеҙ)*
**скот слабый** ыуыҙ мал
**скот, способный оплодотворяться** түлле мал
**скот стойлового содержания** ҡуралағы мал; аран малы
**скот сухопарый** ҡаңғыл мал
**скот тощий** арыҡ, ябыҡ мал
**скот, убегающий из стада** ҡасҡалаҡ мал, ҡасаған
**скот убойный** һуғым малы
**скот упитанный** көр мал
**скот яловый** бизәү *(ҡыҫыр)* мал
**скотина** *см.* скот
**скотник, скотница** малсы, мал ҡараусы
**скотобойник** мал һуйыу урыны
**скотовод** мал ҡараусы
**скотоводство** малсылыҡ
**скотовоз** мал ташыу машинаһы
**скотолечебница** мал дауалау йорто
**скотомогильник** үләт соҡоро
**скотопромышленность** малсылыҡ сәнәғәте *(мал һатып алып һуғымға һимертеүсе хужалыҡ)*
**скребни** *вет.* сусҡа селәүсене
**скребница** ат ҡырғысы
**скрепи овец** *вет.* һарыҡ ҡысытмаһы
**скрещивание** ҡасырыу
**скрещивание вводное** башлап ҡасырыу
**скрещивание гибридное** гибридлы ҡасырыу
**скрещивание межпородное** тоҡом-ара ҡасырыу
**скрещивание промышленное** сәнәғәт ҡасырыуы *(продуктивлығын арттырыу өсөн)*
**скрещивание чистопородное** саф тоҡомло ҡасырыу
**слизь** *вет.* ҡышлыҡ *(маңҡа ауырыулы аттың танауынан аҡҡан лайла)*
**служба зоотехническая** зоотехник хеҙмәт
**случать** *вет.* ҡасырыу
**случка** ҡасырыу *(һыйыр, һарыҡ, инә сусҡалар һ.б. ҡарата)*; тороҡтороу *(бейәләргә ҡарата)*
**случка варковая** аҙбарҙа ҡасырыу
**случка вольная** ирекле ҡасырыу
**случка контрольная** күҙәтеп ҡасырыу
**случка косячная** өйөрҙә тороҡтороу
**случной пункт** ҡасырыу *(тороҡтороу)* пункты
**смушка** илтер *(бәрән тиреһе)*
**снаряжение для верховой езды** эйәр-өпсөн

**снимать шкуру чулком** толоплау *(мал тиреһен тотош килеш тунау)*

**содержание** аҫрау *(мал тотоу)*

**содержание безвыгульное** аҙбарҙа аҫрау

**содержание лагерное** йәйләүҙә аҫрау

**содержание отгонно-пастбищное** ҡыуғын көтөүлектә аҫрау

**содержание пастбищное** көтөүлектә аҫрау

**содержание стойловое** аҙбарҙа аҫрау

**содержание стойлово-пастбищное** аҙбарҙа һәм көтөүлектә аҫрау

**соловый** *(желтоватый, со светлым хвостом и светлой гривой – о масти лошади)* һары

**соловая лошадь** һары ат, һарыса, һарысай

**солово-гнедой конь** һары туры ат

**солово-саврасый конь** һары ҡола ат

**соловый конь с проточной лысиной** сыбай ҡашҡа һары ат

**состязаться на конях** ат сабыштырыу

**сосание** имеү

**сосок, вымя** имсәк; имеҙлек

**сосунок** имеҙек *(имеүен әле ташламаған)*

**сосущий чужую матку** тил *(быҙау, бәрәс)*

**спина** *анат.* арҡа

**спутать** тышау, кеҙәләү

**средний надой** уртаса һауым

**средняя упитанность** уртаса көрлөк

**ставить потного коня на выстойку** ат һыуытыу; таңатыу

**стадо** көтөү; тыу

**стельный** быуаҙ, тыуар; **стельная корова** быуаҙ һыйыр

**стойбище** туплау *(мал йыйылып ята торған еләҫ, күләгәле урын; саңлау)*

**стойбище летнее для скота** *(на продуваемом месте)* туплау

**стойло 1.** аран *(һарайҙа айырып бер мал өсөн бүлеп эшләнгән урын)* **2.** утлыҡ *(малға бесән һала торған урын)*

**стремя** өҙәңге *(эйәрҙең аяҡты кейҙереп, баҫып ултыра торған өлөшө)*

**стреножить** сеҙәр һалыу *(атҡа)*

**стреноженная лошадь** сеҙәрле ат

**стригун, стригунок** ҡырҡмыш, ҡырҡмыш тай

**стрижка** йөн ҡырҡыу

**стрижка весенняя** яҙғы ҡырҡым

**стрижка осенняя** көҙгө ҡырҡым

**супонь** тамаҡбау *(атты еккәс, ҡамыт ағасының башын тартып бәйләй торған бау)*

**супоросность** быуаҙлыҡ *(сусҡаға ҡарата)*

**супоросная свинья** быуаҙ сусҡа

**сустав локтевой** *анат.* терһәк *(сығанаҡ)* быуыны

**сустав путовый** *анат.* бәкәл быуыны

**сухожилие** *анат. (плотная, упругая мышечная связка)* тарамыш

**сухопарый** *(костлявый)* ҡалдау; **сухопарый козел** ҡалдау кәзә тәкәһе

**суягная** *(об овце, козе)* быуаҙ; **суягная овца** быуаҙ һарыҡ

**сычуг** таҙғарын *(көйөшлө малдың ашҡаҙанындағы икенсе бүлек; күҙләнсек)*

## Т

**табун** өйөр *(йылҡы көтөүе)*

**табун неплодоносящий** ҡысыраҡтар өйөрө *(ҡысыр мал өйөрө)*

**табунные животные** өйөр малы

**табунное коневодство** өйөр йылҡысылығы

**табунщик** йылҡы көтөүсе

**тавро, клеймо** тамға *(малға көйҙөрөп һалына)*

**таврить, клеймить** тамға һалыу

**тарпан** тарпан *(ҡырағай ат)*

**тебеневка** тибен, тибендә йөрөтөү *(йылҡының ҡыш көнө ҡарҙы тибеп утлаған ере)*

**тебенек** тибенге *(өҙәңге бауы аҫтынан эйәрҙең ҡапталына тағып, һалындырып ҡуйған бер ҡат ҡалын күн)*

**тебеневать** тибенләү, тибендә йөрөү

**тебеневочный скот** тибен малы

**теленок** быҙау

**теленок новорожденный, питающийся молозивом** ыуыҙ быҙау

**теленок-сосун** имеҙек быҙау

**теленок, сосущий чужую матку** тил быҙау *(1. бүтән инәгә ҡушылған быҙау; 2. быҙауы үлгән һыйырҙы алдап һөтөн эйҙерер өсөн шул быҙау тиреһенә һалам тултырып яһаған ялған быҙау; толоп)*

**теленок-сосунок** *(до двухлетнего возраста)* арҙа

**теленок годовалый** торпо

**тёлка 1.** башмаҡ *(яҙ тыуып, бер йәшкә еткәне)*; **2.** һараяҡ *(көҙ тыуып, бер йәшкә еткәне)*; **3.** тана һыйыр *(бер йәштән тәүге быҙаулағанға тиклем)*; **4.** сәңгәсәр тана *(өс йәшкә тиклем – быҙауламағаны)*, орғасы быҙау, теше быҙау

**тёлка годовалая** башмаҡ, орғасы башмаҡ, йыллаған башмаҡ

**тёлка годовалая осенняя** һараяҡ башмаҡ

**тёлка полуторагодовалая** ҡасар *(йәш ярымлыҡ тана)*

**тёлка двухгодовалая до первого отела** тана

**тёлка трехгодичная, не приносящая приплода** сәңгәсәр тана

**тёлки и бычки** *собир.* тана-торпо

**телок, молодой бычок** торпаҡ *(үгеҙ башмаҡ)*

**телиться** быҙаулау

**телятник** быҙау аҙбары

**телятина** быҙау ите

**телятница, телятник** быҙау ҡараусы

**тёмно-бурый** ҡуңыр; **темно-бурая корова** ҡуңыр һыйыр

**тёмно-гнедой** ҡара туры *(йылҡы төҫө)*; **темно-гнедой жеребец** ҡара туры айғыр

**тёмно-пегий** ҡара ала, ҡара сыбар; **темно-пегий конь** ҡара сыбар ат

**тёмно-мухортый** ҡара кир; **темно-мухортый жеребенок** ҡара кир ҡолон

**тёмно-рыжий** ҡара ерән; **темно-рыжий жеребец** ҡара ерән айғыр

**тёмно-сивый** тимер күк, ҡара күк, ҡара буҙ; **темно-сивая кобыла** тимер күк бейә

**тепляк** йылы аҙбар *(ҡышын һарыҡ бәрәсләтеү өсөн)*

**течка** енси теләк

**тимпанит** *вет.* тимпанит *(малдарҙа эс күбеү ауырыуы)*

**тимпания рубца** *вет.* ҡарын күбеүе *(көйшәүсе малдарҙың эс күбеү ауырыуы)*

**толстая кишка** *анат.* туҡ эсәк *(эсәктең ас эсәктән тура эсәккә тиклемге өлөшө)*

**тонкорунная овца** нәҙек йөнлө һарыҡ

**торба** *этн.* торба *(аттың башына элеп һоло ашата торған моҡсай)*

**торока** ҡанъяға *(нәмә бәйләү өсөн эйәр ҡапталына тағылған ике армытлы ҡайыш бау)*

**транспорт гужевой** атлы транспорт

**трензель** айыссыҡ *(йүгәндең ауыҙлыҡ дүңгәләгендәге тейәге)*

**тренированный конь** ярау ат *(яуға, бәйгегә һ.б. махсус рәүештә әҙерләнгән, яратылған ат)*

**тренога** сеҙәр *(аттың алғы ике аяғын артҡы бер аяғына ҡушып бәйләнгән тышау)*

**треножить** сеҙәрләү

**трусить** *(идти трусцой)* юртаҡлау, юртыу

**трусца** *(мелкая рысь)* юртыш

**туловище** тороҡ *(хайуандарҙың буй-һыны)*

**тулпар** толпар *(1. экиәттәге ҡанатлы ат; 2. яҡшы тоҡомло йүгерек ат; арғымаҡ)*

**тулуп** толоп *(1. бөтөн көйө тунап алынған хайуан тиреһе; 2. тиреһен бөтөн көйө тунап, һалам тултырып яһалған йәш мал)*

# У

**убой** һуйыу, салыу

**убой вынужденный** мәжбүри салыу

**убойный** һуғымлыҡ *(һуғымға ҡалдырылған)*

**угон косяка кобылиц жеребцом** айғыр һөрөүе

**удила** ауыҙлыҡ *(йүгәндең ат ауыҙына кейҙерелә торған быуынлы тимере)*

**удой** һауым *(һауып алынған һөт күләме)*

**удой вечерний** киске һауым

**удой годовой** йыллыҡ һауым

**удой контрольный** контроль һауым

**удой пробный** һынау һауымы

**удой утренний** иртәнге һауым

**удой суточный** көндәлек һауым

**удойник** һөт күнәге

**узда, уздечка** йүгән *(менге йә екке малдың башын тотар өсөн ауыҙлыҡлы итеп бауҙан эшләнгән нәмә)*

**укрюк** ҡороҡ *(ат тотоу өсөн)*

**упитанность** көрлөк *(ит-май ултырыу, һимеҙ булыу сифаты)*

**упитанность высшая** юғары көрлөк

**упитанность нижесредняя** уртасанан түбәнерәк көрлөк
**упитанность низкая** түбән көрлөк
**упитанность средняя** уртаса көрлөк
**упряжные принадлежности** егеү нәмәләре *(еккәндә ҡулланылған бөтә нәмә: ҡамыт-дуға, арба-сана һ.б.)*
**упряжь** сбруй, ҡамыт-дуға
**установка доильная** һауыу ҡорамалы
**установка доильная передвижная** күсмә һауыу ҡорамалы
**уши** *анат.* ҡолаҡтар

# Ф

**ферма** ферма
**ферма животноводческая** малсылыҡ фермаһы
**ферма коневодческая** йылҡысылыҡ фермаһы
**ферма молочная** һөтсөлөк фермаһы
**ферма овцеводческая** һарыҡ фермаһы
**ферма племенная** тоҡомсолоҡ фермаһы
**ферма свиноводческая** сусҡа фермаһы
**фонд** ҡур
**фондовый косяк** ҡур өйөр
**фураж** фураж *(мал-тыуар өсөн әҙерләнгән аҙыҡ)*
**фуражир** фуражсы
**фуражная корова** фураждағы һыйыр *(өҫтәмә фураж алған һауын һыйыр)*
**фуражное зерно** фураж ашлығы
**фуражня** фураж һаҡлау урыны

# Х

**хлев** аҙбар, аран, кәртә, һарай, ҡура
**хлев плетеный** *(для овец)* ҡотан
**хозяйство** хужалыҡ
**хозяйство мясо-молочное** ит һәм һөт хужалығы
**хозяйство племенное** тоҡомсолоҡ хужалығы
**холка** мунда *(аттың ҡулбашы өҫтөндәге ҡалҡыу урыны)*
**холодильник молочный** һөт һыуытҡыс

**хомут** ҡамыт *(йөк тағып һөйрәтеү өсөн екке малдың муйынына кейҙерелә торған нәмә)*

**хомутина** мөйәт *(ҡамыт ағасының эске яғына уратып ҡуйған йомшаҡ нәмә)*

**холостить** *вет.* бестереү, көйҙөрөү

**хотеть соли** тоҙһорау *(тоҙ теләү)*

**храп** *анат.* морон биле

**хребет** *анат.* арҡа *(малдың муйынынан ҡойроғона тиклем булған һырты)*

**хромой на переднюю ногу** ҡулау *(атҡа ҡарата)*

**хромота неизлечимая** *вет.* ҡара аҡһаҡ

**хряк** ата сусҡа

**хурда** ауырыу һарыҡтар көтөүе

# Ц

**цена заготовительная** әҙерләү хаҡы

**цена закупочная** һатып алыу хаҡы

**ценуроз** *(вертячка) вет.* әйләнсек ауырыуы *(һарыҡ һәм кәзәләрҙә була)*

**цех комбикормовый** ҡатнаш аҙыҡ цехы

**цех кормоприготовительный** мал аҙығы әшкәртеү цехы

**цех отела** быҙаулатыу цехы

**цех производства молока** һөт етештереү цехы

**цех раздоя и осеменения** һөт төшөрөү һәм мал ҡасырыу цехы

**цех сухостойных коров** һыуалған һыйырҙар цехы

**цуг** сыбата *(аттарҙы аллы-артлы ҡуйып егеү төрө)*

# Ч

**чабан** һарыҡ көтөүсе, ҡуйсы

**чалый** бурыл *(буҙ менән ҡара ҡатнаш – йылҡы төҫөнә ҡарата)*; **чалый конь** бурыл ат; **запрягать чалого** бурылды егеү

**чало-пегий** бурыл ала; **чало-пегая кобыла** бурыл ала бейә

**челка** кикел *(йылҡының маңлай сәсе)*

**чепрак** серге, туҡым *(1. эйәр аҫтына һала торған япма; 2. эйәр аҫтындағы бөтә булған япма)*

**чересседельник** арҡалыҡ *(ҡамыт, дуғаны күтәреү өсөн ыңғырсаҡ аша тәртәнән тәртәгә тарттырыла торған бау)*

**чистокровный** саф тоҡомло

**чистопородность** саф тоҡомлолоҡ

**чубарый** *(с темными пятнами по светлой шерсти или с пятнами другой шерсти – о масти лошади)* сыбар *(йылҡы төҫө)*; **чубарый конь** сыбар ат

**чубарый в крапинку** тәңкә сыбар *(йылҡы төҫөнә ҡарата)*; **чубарый в крапинку кобыла** тәңкә сыбар бейә

**чучело теленка, подставляемое к корове при дойке** тил быҙау, тулаҡ *(үлгән быҙауҙың инәһен алдап һөтөн эйҙереү өсөн тиреһенә һалам тултырып эшләнгән яһалма быҙау; толоп)*

# Ш

**шарахнуться в сторону** *(о животных)* биленләү

**шерсть** йөн *(1. хайуандарҙың тотош тәнен ҡаплап торған сәс һымаҡ төктәр; 2. һарыҡ, кәзәнән ҡырҡып алынған шул нәмә)*

**шерсть весенней линьки** *(у лошадей и коров)* баҡта, ябаға *(у жеребят)*, ҡаулан *диал.*

**шерсть весенней стрижки** яҙғы йөн

**шерсть голодная** ас йөн *(асығып йонсоған һарыҡ йөнө)*

**шерсть овечья** һарыҡ йөнө

**шерсть осенней стрижки** көҙгө йөн, көҙәм

**шерсть ягнячья** бәрән йөнө

**шест для подвешивания мяса** һырыҡ *(ҡаҡларға ит элә торған ҡолға)*

**шина** *вет.* өйсөк, талыҡ *(ваҡ малдың һынған аяғын ҡоршап бәйләгән ҡабыҡ йәки башҡа нәмә)*

**шишка на ноге у лошади** *вет.* оро *(йылҡы малының аяғында була торған ҡаты шешек)*

**шкура** тире

**шкура, высушенная без выделки** тулаҡ

**шлея** ышлыя *(тау төшкәндә алға шылмаһын өсөн ҡамыт менән ат кәүҙәһенә кейҙерелә торған яҫы ҡайыш бау)*

**шорник** шорник *(сбруй яһаусы йәки йүнәтеүсе)*

**шоры уздечки** ҡолаҡһа *(сығынсы аттың күҙен ҡаплау өсөн йүгәнгә ике яҡлап тегелгән күн)*

**шпанка** шпанка *(һарыҡ тоҡомо)*

**шпора** тибенге *(һыбайлыларҙың итек үксәһенә ҡуйылған тимер)*

**шпорить** тибенгеләү

# Щ

**щавель конский** *бот.* ат ҡуҙғалағы

**щетка** сәсә *(йылҡы малының бәкәлендәге оҙон йөн)*

**щипать траву** үлән ашау, юшау *(йылҡы малына ҡарата)*

# Э

**экзема** *вет.* ҡамасау *(малдарҙа була торған тире ауырыуы)*

**экстерьер** экстерьер *(малдарҙың тышҡы формаһы һәм тән төҙөлөшө)*

**элита** элита *(билдәле бер тоҡом эсендәге иң яҡшы мал)*

**эрозия кожи** *вет.* тире эрозияһы *(тиренең бөтәү яра булып боҙолоуы)*

**эстроз овец** *вет.* һарыҡтар эстрозы *(ваҡ малдарҙа була торған селәүсен ауырыуы)*

# Я

**ягненок 1.** бәрәс, һарыҡ бәрәсе, ҡуҙы; **2.** йәйләүес; **3.** этәмбай

**ягненок, родившийся весной** яҙғы бәрәс, яҙлауыс

**ягненок, родившийся летом** йәйге бәрәс, йәйләүес

**ягненок, родившийся осенью** көҙгө бәрәс, көҙләүес

**ягненок новорожденный** күрпә *(яңы тыуған һарыҡ бәрәсе)*

**ягненок, которому более шести месяцев** туҡты *(алты айлыҡ һарыҡ бәрәсе)*

**ягненок позднего окота** этәмбай *(көҙ тыуған һарыҡ йәки кәзә бәрәсе; көҙләүес; бүлтерек)*

**ягненок, сосущий чужую матку** тил бәрәс *(сит инәне имгән бәрәс)*

**ягненок слабый** йәлдәк бәрәс

**ягниться** бәрәсләү, бәрәнләү

**ягодица** *анат.* оса, арт һан

**ягодичные мышцы** *анат.* оса мускулдары

**язва сибирская** *вет.* түләмә *(малдарҙа була торған йоғошло ауырыу)*

**яловая** ҡыҫыр, тыу *(тоҡом килтермәгән, үрсем бирмәгән)*

**яловая кобыла** тыу бейә

**яловая телка** *(до трех лет)* сәңгәсәр *(быҙаулар йәшендә быҙауламаған, өс йәшкә тиклем тыу ҡалған һыйыр малы)*

**яловеть** ҡыҫыр *(йәки тыу)* ҡалыу

**яловка, яловица** ҡыҫыраҡ, ҡыҫыр мал

**яловость** ҡыҫырлыҡ

**яремный желоб** *анат.* ҡамыт улағы

**ярка** бәрән һарыҡ *(бәрәсләмәгән йәш һарыҡ)*

**ярмо** үгеҙ ҡамыты

**ярко-рыжий жеребец** сағыу ерән айғыр

**ярочка** орғасы *(йәки теше)* бәрәс

**ясли** утлыҡ

**ящур** *вет.* бешмә

**ящурное заболевание** *вет.* бешмә ауырыуы

## Ҡайһы бер йорт хайуандарының, ҡош-ҡорттарҙың ғүмер оҙонлоғон күрһәткән йәҙүәл

| Хайуандарҙың, ҡош-ҡорттарҙың исемдәре | | Нисә йыл (аҙна, көн) йәшәй |
|---|---|---|
| Башҡортса | Урыҫса | |
| Ишәк | Осел | 100–105 йыл самаһы |
| Ҡасыр | Мул | 40–45 йыл самаһы |
| Йылҡы малы | Лошади | 35–45 йыл самаһы |
| Һыйыр малы | Коровы | 20–25 йыл самаһы |
| Һарыҡтар, кәзәләр | Овцы, козы | 10–15 йыл самаһы |
| Суҫҡалар | Свиньи | 15–20 йыл самаһы |
| Эттәр, бесәйҙәр | Собаки, кошки | 10–15 йыл самаһы |
| Тауыҡтар | Курицы | 10–12 йыл самаһы |
| Ҡорт инәһе | Пчелиная матка | 3–5 йыл самаһы |
| Эшсе ҡорттар | Рабочие пчелы | 6 аҙна |

## Башҡортса-урыҫса анатомия терминдары

**аҙау тештәр** коренные зубы
**алғы тештәр** резцы
**аңҡау** нёбо
**арҡа** спина, хребет
**ас** (*или* **нәҙек) эсәк** тонкая кишка
**аҫҡы яңаҡ** нижняя челюсть
**ауыҙ** рот, пасть
**ашыҡ һөйәге** берцовая кость
**бил** поясница
**боғаҡ** свисающая часть шкуры в нижней части шеи
**боғаҙ** горло
**бот** бедро

**бот һөйәге** бедренная кость
**бөйән** двенадцатиперстная кишка
**бәкәл** бабка
**бәкәл быуыны** путовый сустав
**бәкәл, бәкәл һөйәге** бабка
**бәләкәй ҡарын** желудочек
**бәшәләй** плюсна
**елек** костный мозг
**елен** вымя
**елкә** затылок
**елкә һөйәге** затылочная кость
**енсек алды, енсек алды һөйәге** плюсна, плюсневая кость
**иңбаш һөйәге** плечевая кость
**иңбаш, яурын** плечо
**ирен** губа
**йөрәк ите** *то же, что* **тояҡ мендәре**
**йыуан эсәк** *то же, что* **туҡ эсәк**
**йәкәл (бәкәл) быуыны** путовый сустав или путо
**йәкәл, йәкәл һөйәге** бабка
**кешәмеш** лодыжка у лошади *(место наложения пут)*
**киҙәгәй** *(йылҡының аҫҡы яңаҡ һөйәге)* ганаши
**күкрәк һөйәге** грудина
**күкрәк ситлеге** грудная клетка
**күкрәк умыртҡалары** грудные позвонки
**күкрәк, түш** грудь
**күтән** прямая кишка
**ҡабырға** ребро
**ҡалаҡ һөйәге** лопатка
**ҡамыт улағы** яремный желоб
**ҡамыттыҡ** *то же, что* **ҡамыт улағы**
**ҡарта** *(йылҡы малының туҡ эсәге)* прямая кишка лошади
**ҡарын** желудок
**ҡарын аҫты биҙе** поджелудочная железа
**ҡатлансыҡ** книжка
**ҡойроҡ өҫтө** круп
**ҡойроҡ төбө** репица хвоста
**ҡойроҡ һөйәге** репица
**ҡойроҡ** хвост
**ҡолаҡ** уши
**ҡорһаҡ** живот, брюхо
**ҡорһаҡ ите** брюшина
**ҡулбаш быуыны** плечевой сустав

**ҡулбаш** плечо
**ҡушарбаш** *то же, что* **туларһыҡ**
**ҡушар һөйәге** *анат.* кости предплечья
**ҡушҡар** *то же, что* **енсек**
**ҡыйма** *то же, что* **туҡ эсәк**
**ҡырҡ ҡарта** *диал. то же, что* **ҡатлансыҡ**
**маңлай** лоб
**маңлай сәсе** *(кикел)* челка
**маңлай һөйәге** лобная кость
**морон** морда, рыло
**морон сиге, танау биле** храп
**морон тишеге** ноздри
**мөгөҙ** рога
**муйын** шея
**муйын дуғаһы** шейный гребень
**муйын умыртҡалары** шейные позвонки
**муйын һырты** гребень шеи
**мунда** холка
**нәҙек эсәк** *то же, что* **ас эсәк**
**оло ҡарын** брюховина
**оса ҡалҡыулығы** ягодичный бугор
**оса һөйәге** таз, тазовая кость
**оса** ягодица; круп *(у лошади)*
**салыу һөйәге** шейный позвонок
**сандыр** паховая область
**сикә** висок
**сикә һөйәге** височная кость
**сираҡ, енсек** голень
**сылым** *то же, что* **сыуын**
**сыу** *то же, что* **сыуын**
**сыуын** послед
**сәсә** щетка (фризы)
**сәсә һөйәктәре** кости сесамовидные
**таҙғарын** сычуг
**тарамыш** сухожилие
**терһәк аҫты** подплечье
**терһәк** локоть
**тикес** *(бәкәл)* пясть
**тире** шкура, кожа
**тоҡол** *(ҡойроҡ һөйәге)* репица
**тояҡ үксәһе** пятка копыта
**тояҡ** копыто
**тояҡ мендәре** мякиш копыта

**тояҡ тажы (тояҡ йөйө, тояҡ төбө)** венчик
**тояҡ тырнағы** зацеп копыта
**төпөш** большая берцовая кость
**тубыҡ быуыны** коленный сустав
**тубыҡ ҡапҡасы** надколенная чашка, надколенник
**тубыҡ тупсыуы** тупой конец коленной кости
**тубыҡ** колено
**туҡ** (*или* **йыуан) эсәк** толстая кишка
**туларһыҡ** предплюсна
**тупсыу** закругленный конец кости
**тупырсыҡ** *диал. то же, что* **кешәмеш**
**тура эсәк** прямая кишка
**тышау быуыны** *то же, что* **бәкәл быуыны**
**урай** вихор *(на макушке)*
**үксә** пятка
**үксә һөйәге** пяточная кость
**һауыр** круп
**һебә** короткое ребро
**һигеҙгүҙ** крестец
**һөлдә** скелет
**һуҡыр эсәк** слепая кишка; аппендикс
**шаушаҡ** запястье
**ырғаҡ** твердое нёбо
**эйәк** подбородок
**эйәк аҫты** ганаш
**эйәк соҡоро** подбородная ямка
**эсәк** кишка; кишки
**ял** грива
**янбаш** круп
**янбаш сығынтыһы** маклоки, подвздохи
**янбаш умыртҡалары** поясничные позвонки
**янбаш һөйәктәре** кости подвздошные
**яңаҡ һөйәге** челюстная кость
**яңаҡ** челюсть
**яурын-калаҡ ҡалҡыулығы** подлопаточный бугор

## Урыҫса-башҡортса анатомия терминдары

**бабка** бәкәл, йәкәл, бәкәл (йәкәл) һөйәге
**бедренная кость** бот һөйәге
**бедро** бот
**берцовая кость** енсек (ашыҡ) һөйәге

**брюховина** оло ҡарын
**венчик** тояҡ тажы
**висок** сикә
**вымя** елен
**ганаш** эйәк аҫты, киҙәгәй
**голень** сираҡ, енсек
**горло** боғаҙ
**гребень шеи** муйын һырты
**грива** ял
**грудина** күкрәк һөйәге
**грудная клетка** күкрәк ситлеге
**грудные позвонки** күкрәк умыртҡалары
**грудь** күкрәк, түш
**губа** ирен
**желудок** ҡарын
**желудочек** бәләкәй ҡарын
**живот** ҡорһаҡ
**запястье** шаушаҡ
**затылок** елкә
**зацеп копыта** тояҡ тырнағы
**зубы** тештәр
**кишка, кишки** эсәк
**книжка** ҡатлансыҡ, ҡырҡ ҡарта
**кожа** тире
**колено** тубыҡ
**копыто** тояҡ
**коренные зубы** аҙау тештәр
**короткое ребро** һебә
**костный мозг** елек
**крестец** һигеҙгүҙ
**круп** һауыр
**лоб** маңлай
**лодыжка** *(у лошади)* кешәмеш
**локоть** терһәк
**лопатка** ҡалаҡ һөйәге
**морда** морон
**мякиш копыта** тояҡ мендәре, йөрәк ите
**ноздри** морон тишеге
**паховая область** сандыр
**плечевой сустав** иңбаш быуыны
**плечо** иңбаш, яурын
**плюсна** бәшәләй
**плюсневая кость** енсек алды һөйәге
**подбородочная ямка** эйәк соҡоро

**подбородок** эйәк
**подвздохи** янбаш
**поджелудочная железа** ҡарын (ашҡаҙан) аҫты биҙе
**подлопаточный бугор** яурын-ҡалаҡ ҡалҡыулығы
**подплечье** терһәк аҫты
**послед** сыуын
**поясничные позвонки** янбаш умыртҡалары
**поясница** бил
**прямая кишка** тура эсәк, күтән
**путовый сустав** йәкәл быуыны
**пятка** үксә
**пятка копыта** тояҡ үксәһе
**пяточная кость** үксә һөйәге
**резцы** алғы тештәр
**репица** ҡойроҡ һөйәге (төбө), тоҡал
**рога** мөгөҙ
**скелет** һөлдә
**слепая кишка** һуҡыр эсәк; аппендикс
**спина** арҡа
**сычуг** таҙғарын
**твердое нёбо** ҡаты аңҡау, ырғаҡ
**толстая кишка** туҡ (*йәки* йыуан) эсәк
**тонкая кишка** ас (*йәки* нәҙек) эсәк
**уши** ҡолаҡ
**холка** мунда
**храп** морон сиге (биле)
**хребет** арҡа
**челка** маңлай сәсе, кикел
**челюсть** яңаҡ
**шейные позвонки** муйын умыртҡалары
**шейный гребень** муйын дуғаһы
**шея** муйын
**шкура** тире
**щетка** (фризы) сәсә
**ягодица** оса; круп *(у лошади)*
**ягодичный бугор** оса ҡалҡыулығы

## Йылҡы малының төҫ атамалары

**ағылйым** беловатый, белёсый, светлый
**аҡ** белый
**аҡ ала** бледно-пегий
**аҡ буҙ** светло-сивый, сизый; серый

**аҡ ҡоба** светло-бурый; светло-гнедой
**аҡ күк** белый с голубоватым оттенком
**аҡ ҡола** бледно-саврасый
**аҡ саптар** бледно-игреневый
**аҡ һары** светло-желтый
**аҡһыл** белёсый
**ала буҙ** серо-пегий
**ала** пестрый, пятнистый, пегий
**ала туры** гнедой с пятнами
**алма күк** сивый в яблоках
**алмасыбар** в яблоках
**балауыҙ һары** цвета воска
**баҫма сыбар** крапчатый
**буҙ** светло-серый, светло-пепельный, землисто-серый; сивый
**буҙ тарлан** чалый
**буҙғыл** *(буҙ менән ҡара ҡатыш)* сероватый
**бурыл** чалый *(светлый с черной гривой и хвостом или наоборот)*
**бурыл ала** чало-пегий
**бурыл ерән** рыже-чалый
**бурыл ҡара** вороно-чалый
**бурыл күк** сиво-чалый
**бурыл туры** гнедо-чалый
**бүртә** *(аҡ менән туры ҡатыш)* караковый
**ерән** рыжий
**ерән ала** рыже-пегий
**ерәнһыу** рыжеватый
**кир** *(һарғылт туры)* мухортый *(гнедой с желтыми подпалинами)*
**кир туры** гнедо-мухортый
**көлһыу** пепельный
**көрпә** бурый
**көрән** бурый, буровато-коричневый
**күк** сивый
**күк ала** сиво-пегий
**күк бүртә** светло-караковый
**күк буҙ** бурый с голубоватым оттенком
**күк саптар** седо-игреневый
**күк тарлан** чалый
**күк юрға** иноходец сивой масти
**ҡан ерән** медно-красный
**ҡара** вороной

**ҡара ала** тёмно-пегий
**ҡара буҙ** тёмно-сивый
**ҡарағусҡыл** тёмный
**ҡара ерән** тёмно-рыжий
**ҡара кир** тёмно-мухортый
**ҡара көрән** тёмно-бурый
**ҡара күк** тёмно-сивый
**ҡара сыбар** тёмно-пегий
**ҡара туры** тёмно-гнедой
**ҡара һары** тёмно-желтый
**ҡоба** *(салт асыҡ булмаған, көлһыу, аҡһыл һары)* светло-бурый, светло-коричневый, палевый
**ҡоба ҡыҙыл** муругий
**ҡоба туры** каурый
**ҡола** *(үҙе һары, ҡойроҡ ялы ҡара)* саврасый
**ҡола ала** саврасо-пегий
**ҡола ерән** булано-саврасый
**ҡолан** *(һорғолт һары)* светло-коричневый; светло-каштановый
**ҡуңыр** *(ҡыҙғылтыраҡ ҡара, көрәнһыу)* темно-бурый, бурый
**ҡыҙыл көрән** красно-бурый
**ҡыҙыл күк** красно-сивый
**ҡыҙыл ҡола** красно-саврасый
**ҡыҙыл туры** красно-гнедой
**ҡыуал ерән** бледно-рыжий
**ҡыуғыл** *(аҡһыл һары)* бледно-рыжий
**сағыу ерән** ярко-рыжий
**сал** белый, чалый; седой
**саптар** *(ялы, ҡойроғо сал, үҙе ерән)* игреневый
**сыбай ҡашҡа** продолговатое белое пятно на лбу
**сыбар күк** пего-сивый
**сыбар туры** гнедо-чубарый
**сыбар** чубарый
**сысҡан һырт** с темной полосой вдоль спины
**талғыр** *(юлаҡ-юлаҡ һырттары булған)* полосатый
**тарлан буҙ** чалый
**тарлан күк** чалый
**тарғыл** красно-бурый с черными полосами
**тимгел күк** сивый с голубоватым оттенком
**тимер күк** тёмно-сивый
**туры-ала** гнедо-пегий
**туры** *(ҡараһыу ҡыҙыл, ялы-ҡойроғо ҡара)* гнедой

**һары** светло-рыжий, сивый; соловый
**һары ала** жёлто-пегий
**һары ҡола** солово-саврасый
**һары туры** солово-гнедой
**һоро** светло-бурый
**һөркә** *(ҡуңыр)* бурый
**яғал** со светлыми пятнами на шее и лопатках *(о корове)*

**Эйәр-өпсөн, ат егәре атамалары**

**айыл** подпруга
**айыссыҡ** *диал. то же, что* **ауыҙлыҡ**
**аҡта** *диал. то же, что* **ҡаптал**
**алғаш** передняя лука седла
**арҡалыҡ** *(ҡамыт-дуғаны күтәреү өсөн ыңғырсаҡ аша тәртәнән тәртәгә тартыла торған бау)* чересседельник
**ат егәре** сбруя
**ат ябыуы** попона
**атлама ыңғырсаҡ** горбатая седелка
**ауыҙлыҡ** удила; мундштук; трензель
**бауырлыҡ** подбрюшник *(часть сбруи)*
**биллек** поперечник, поперечный ремень *(у шлеи)*
**боғал** арҡан, лассо
**ботлоҡ** боковые ремни шлеи
**буйлыҡ** часть шлеи, перетянутая вдоль спины лошади к гужам
**бәйге эйәре** скаковое седло
**дағa** подкова
**дуға** дуга
**елкәлек** 1. завязка, скрепляющая верхние концы клешней хомута; 2. верхняя часть хомута
**йүгән** узда, уздечка
**кеҙә** путы *(для подтягивания задней ноги кобылы к шлее при дойке)*
**күгә** ремешки, укрепляющие луки деревянного седла
**күмелдерек** нагрудник седла
**ҡамыт** хомут
**ҡамыт ағасы** клешни хомута
**ҡамытбау** *диал. то же, что* **ҡолаҡбау**
**ҡамыт бауы** гуж, гужи
**ҡамыт-дуға** сбруя

**ҡамыт кейеҙе** подушка хомута

**ҡамыт мөйәте** хомутина

**ҡантар** короткие поводья

**ҡанъяға** торока

**ҡаптал** *(эйәр-ыңғырсаҡтың ат арҡаһына ята торған ике ҡанаты)* ленчик

**ҡаш** *(эйәрҙең алдан һәм арттан дуғаланып торған өлөшө)* лука *(седла)*

**ҡашлау** *(йүгән маңлайсаһы)* налобник, налобный ремень

**ҡойошҡан** подхвостник

**ҡойроҡбау** *диал. то же, что* **ҡойошҡан**

**ҡолаҡбау** *(ҡамыттың тәртә менән дуға башына эләктерә торған бауы)* гужи

**ҡолаҡһа** *(сығынсы аттың күҙен ҡаплау өсөн йүгәнгә ике яҡлап тегелгән күн)* шоры уздечки

**ҡолатҡа** *уст.* деревянная колодка, накладываемая на ноги неудержимых лошадей

**ҡороҡ** лассо, укрюк

**ҡум** *(эйәр ҡапталына аҫтан ҡуша тегелгән күн тышлы кейеҙ)* чепрак

**мисәү** постромки

**моронһалыҡ** *(йүгәндең морон өҫтөнән арҡыры торған өлөшө)* намордник

**мөйәт** хомутина *(без деревянного остова)*

**мышыу** *(атты юлда ашатыу өсөн ҡулланылған септә тоҡсай)* мешок для овса

**нуҡта** *(ауыҙлыҡһыҙ йүгән)* недоуздок

**осалыҡ** *(ышлыяның һыртынан оса аша төшкән нәҙек ҡайыштар)* откоски шлеи

**өҙәңге** *(эйәрҙең аяҡты кейҙереп, баҫып ултыра торған өлөшө)* стремя

**өйрәнсектәр эйәре** седло для обучения верховой езде

**өпсөн 1.** военное снаряжение; **2.** сбруя, украшенная серебряными насечками

**сбруй** *(эйәр-өпсөн)* сбруя

**сеҙәр** *(аттың алғы ике аяғын артҡы бер аяғына ҡушып бәйләнгән тышау)* тренога

**серге** чепрак, подкладываемый между седлом

**сергетыш** кожа, которой обтягивается войлочная часть седла

**сикәлек** лобный перекресток *(уздечки)*

**сөйөлдөрөк** *диал. то же, что* **тамаҡбау**

**суҡлы ҡум** чепрак, украшенный тисненной булгарской кожей

**суҡлы ышлыя** шлея с наборными кистями

**сыбыртҡы** кнут

**сылбыр** веревка *(обычно из конского волоса)*

**сыңға** металлическое кольцо *(в дуге, в узде)*

**тамаҡбау** супонь

**тартҡы** *диал. то же, что* **бауырлыҡ**

**теҙген** повод, поводья

**тибенге 1.** шпора *(на сапогах у всадников)*; **2.** тебенек *(кожаная полоса, прикрепляемая к ленчику седла под потником и служащая для предохранения ноги всадника от трения, потения)*

**тибенсә** *диал. то же, что* **өҙәңге**

**һабаҡ** *(нуҡтаның эйәк аҫтынан үткәреп бәйләгән бауы)* поводок

**һағалдырыҡ** подбородник, подгубник *(узды)*

**һыпыртмаҡ** *диал. то же, что* **ҡороҡ**

**һыртлыҡ** продольник, продольный ремень шлеи

**ыңғырсаҡ** седелка

**ыңғырсаҡ бауы** подседельник

**ышлыя** шлея

**эйәр** седло

**эйәрҙең алғы ҡашы** передняя лука седла

**эйәр бауы** *диал. то же, что* **ҡойошҡан**

**эйәр ҡашы** седельная лука

**эйәр мендәре** седельная подушка

**эйәр таҡтаһы** *диал. то же, что* **ҡаптал**

**эйәр-өпсөн** *собир.* снаряжение для верховой езды

**эйәр-туҡым** собир. диал. то же, что **эйәр-өпсөн**

**ятма ыңғырсаҡ** прямая седелка

## ХАЛЫҠ ӘЙТҺӘ, ХАҠ ӘЙТӘ

Ағай-эне татыу булһа, ат күп булыр; апһын-әзе татыу булһа, аш күп булыр < когда братья дружны – много коней; когда жены дружны – много еды>

Ағай-эне талашһа, атҡа менһә, яраша < братья ссорятся, сядут на коней – мирятся>

Ағиҙелдең аръяғында бер энәгә бер һыйыр

Ағын һыуҙы ат кисер, ауыр көндө ир кисер < жизнь прожить – не поле перейти>

Аҙамат ирҙең билдәһе – аҙ һөйләр ҙә, күп тыңлар, арғымаҡ аттың билдәһе – аҙ утлар ҙа, күп юшар < признак почтенного мужчины – говорить мало, слушать внимательно, признак аргамака – есть мало, резвиться много>

Аҙашҡан малға үпкә юҡ – ҡайтып өйөрөн тапҡандан һуң <заблудившейся скотине нет упрека после возвращения в свое стадо>

Аҙнаған айғырҙы өйөрҙә һына <одичалого жеребца испытай в косяке>

Аҙыҡлы ат арымаҫ <не лошадь, а корм везет>

Айғыр ҡалдырһаң, йүнлеһен ҡалдыр; ҡусҡар ҡалдырһаң, йөнлөһөн ҡалдыр <о дне завтрашнем сегодня думай>

Айырылған малды бүре алыр, халҡынан айырылғанды гүр алыр <скотину, брошенную стадом, волк пожирает, человека, брошенного народом, могила забирает>

Айһыҙ – атты, йылһыҙ ҡатынды маҡтама <коня хвали через месяц, а жену – через год>

Айыу алыр егет – атынан, бүре алыр егет – бүркенән <удальство егета по тому, как коня запрягает, видно>, <узнают коня по езде, егета – по делам>

Аҡ күңелдең аты арымаҫ, туны туҙмаҫ <у седока конь не устает и шуба не изнашивается>

Аҡтамыр атҡа булған үсен һабандан алыр <по лошади и телега>

Аҡыллыға баш ҡәҙерле, аҡылһыҙға мал ҡәҙерле <умному дорога голова, глупому – скотина>

Алама атҡа менгәнсе, йүгер кеше күргәнсе <лучше доверься своим ногам, чем кляче>

Алаша типһә, нығ тибә <стригун пуще коня лягается>

Алп ананан тыуыр, арғымаҡ бейәнән тыуыр <богатыря родит мать, скакуна – кобылица>

Алпарына күрә толпары <смелому воину под стать крылатый конь>

Алтмыштағы Алпамыша менән алышыр, етмештәге йылҡы менән елешер

Алты йәшәр атҡа менһә, алтмыш йәшәр сәләм бирер

Алты ҡабат ат туйһын, ете ҡабат ир туйһын <путь к сердцу мужчины лежит через его желудок>

Алтын йүгән яман атты яҡшыртмаҫ

Алты ҡапһа, ир туйыр, алтмыш ҡапһа, ат туйыр

Аҡыллы атын маҡтар, ярты аҡыл ҡатынын маҡтар, үтә аҡылһыҙ үҙен маҡтар <умный будет коня хвалить, полудурок будет жену хвалить, полный дурак будет себя хвалить>

Аҡыллы тәкә һуйғанда, ахмаҡ йүкә һуйыр

Ана һөтө менән инмәгән тана һөтө менән инмәҫ <горбатого могила исправит>

Андыҙ бар ерҙә ат үлмәҫ

Аптыраған ат урлаған <отчаявшийся – коня украл>

Арба ватылһа – ат, башмаҡ үлһә, ҡатын ғәйепле <если ломается телега, виновата лошадь, если подыхает телка, виновата жена>

Арба менән ҡуян ҡыуған <погнался за зайцем на телеге>; <делать не то, что надо>

Арбалы һыбайға юл бирмәҫ

Арғымаҡ менгән арымаҫ

Арғымаҡтың билдәһе – аҙ утлар ҙа, күп юшар <конь-аргамак игривый славен не жиром, а гривой>

Арғымаҡты яманлап, толпарҙы ҡайҙан табаң <хуля аргамака, где найдешь тулпара>

Арҡандағы ат ҡаҙығына уралыр

Арпа еймәҫ арғымаҡ ҡапрыҡҡа моң булыр

Арыҡ атҡа ҡурйын да ауыр <для худой клячи и кнут лишний>

Арыҡ аттың арты киң <чем беднее, тем щедрее>

Арыҡ ат һимерһә, ҡурйын бәйләтмәҫ

Арыҡ мал яҙға сыҡһа, уйнаҡлар

Арыған ат соҡор һанай, асыҡҡан ат ҡулыңды ялай, яратҡан ат күҙеңә ҡарай <уставший конь считает ямы, голодный конь лижет руку, любящий конь смотрит тебе в глаза>

Асыҡҡан ат ҡулыңды ялай, яратҡан ат күҙеңә ҡарай <голодный конь лижет руку, любящий конь смотрит тебе в глаза >

Асыуыңды ат ит, аҡылыңды теҙген ит <гнев свой сделай конем, ум – уздечкой>

Аҫтындағын алты ай эҙләгән <на коне сидит, а коня ищет>

Ат айғырланһа, үҙ башына булыр

Ат аяғына ат баҫмай <собака собаке на хвост не наступает>

Ат – айҙа, әҙәм йылда һыналыр <конь познается через месяц, человек – только через год>

Ат аяған ат менер, тун аяған тун кейер <у лошадного ноги не устают, шуба не изнашивается>

Ат аҙғыны тайға эйәрә <во всех годах, да не во всех умах>; <плохая лошадь со стригунком забавляется>

Атың йөрөшлө булһа, тояҡҡа көс

Ат аҡтығы илгә бүре килтерә <накаркала ворона беду>

Ат алһаң, арба кәрәк; ҡатын алһаң, барыһы ла кәрәк <жениться, так не лениться>

Ат арымай тауға менгәнгә, арымай юртып килгәнгә, арый ҡарай белмәгәнгә

Атың ашамһаҡ булһа – уңдың, ҡатының ашамһаҡ булһа – бөлдөң <если лошадь прожорлива – везение, если жена прожорлива – разоренье>

Ат асыуын арбанан алған <не справилась с кобылой, да по оглоблям>

Атаһы болан алмағандың балаһы ҡолан алмаҫ <каков батька, таков и сын>

Ат аунаған ерҙә төк ҡала <где конь валяется, там и шерсть остается>

Ат аяғын ҡыҙғанған ылауҙан ҡотолмаҫ

Ат даны егет ҡулында, егет даны үҙ ҡулында

Ат – данлыҡ, һарыҡ – байлыҡ <лошадь – слава, овца – богатство>

Ат бирһәң – үлер, тун бирһәң туҙыр, ә яҡшылыҡ барыһын да уҙыр <коня подаришь – умрет, шубу подаришь – износится, а добро все переживет>

Аты барҙың ҡанаты бар, һыйыры барҙың һыйы бар <у кого есть конь, у того есть крылья, у кого есть корова, у того есть угощение>

Аты бар – батыр, аты юҡ тик ятыр <человек, имеющий коня богатырь, а безлошадный – ничто>

Ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырған <коня куют, а жаба лапы подставляет>

Ат етмәгән ергә хат етә <куда не доскачет конь, письмо доберется>

Атҡа егәре етмәгән тәртәне туҡмаған

Ат йөрөтмәй, юл йөрөтә <не лошадь, а дорога ведет>

Атҡа менгән ил гиҙәр, яҡшы кеше ил биҙәр

Атҡа менгәндәй булыу <очень сильно радоваться>

Ат иренле, ир моронло булһын <пусть конь будет губаст, а мужчина – носат>

Ат – кешнәшеп, кеше һөйләшеп таныша <свой своего всегда учует>

Ат кемдеке – йөк шуныҡы <чей конь, того и воз>

Ат күп булһа, йөк һыймай

Ат кәбәндән өркмәй <конь от стога шарахаться не станет>

Ат – ҡамсыны, таш тамсыны яратмай <кнута лошадь не стерпит, камень каплю не выдержит>

Ат ҡартайһа – һуғымлыҡ

Ат ҡойроғон төйнәү <трогаться в путь>

Ат ҡолонлатыу *(берәй эште оҙон-оҙаҡҡа һуҙыу)* <тянуть время, медлить>

Атлы килеп, йәйәү ҡайтыу <вернуться ни с чем, вернуться с пустыми руками>

Ат ҡәҙерен атлы белмәҫ, аш ҡәҙерен ашлы белмәҫ

Атлы юлдаш арбалыға иш булмаҫ <всадник пешему не товарищ>

Атлы тәртә төҙәтер, атһыҙ кәртә төҙәтер

Атлының аяғы ла арымаҫ, туны ла туҙмаҫ <у лошадного ноги не устают, шуба не изнашивается>

Аттың матурлығы башында, ирҙең матурлығы түшендә

Атың барҙа ил таны, атаң барҙа ир таны <пока лошадь имеешь, познавай землю, пока имеешь отца, познавай людей>

Атыңды көсөнә күрә йөкләт

Ат матуры – арҡанда, ҡыҙ матуры – тарханда <лучший конь – на аркане, лучшая жена – у тархана>

Атҡа менгәс, атаһын танымаған <залез в богатство – забыл и братство>

Атҡа менһәң – ат яҡшы, ергә төшһәң – ер яҡшы

Атлы кеше – батыр, атһыҙ кеше – тик ятыр <человек, имеющий лошадь – богатырь, безлошадный – ничто>

Ат остау *этн. (бүләк алыр өсөн кейәү атын ебәрмәй тотоу – туй йолаһы )* <задерживать коня жениха с целью получения подарка>

Ат саба тип эт саба <телегу тянет лошадь, а тень ее погоняет собака>

Атта ла бар, тәртәлә лә бар <не прав медведь, что козу задирал, не права и коза, что в лес зашла>

Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа <семья не без урода>; <от лошади и пегий, и буланый рождается>

Аттан төшөп ишәккә менмәйҙәр <из кобыл да в клячи>; <сойдя с коня, на ишака не садись>

Ат тартмаһа, арба бармай <лошадь не идет, так и телега стоит>

Ат тартмай, һоло тарта

Ат – тешенән, егет эшенән билдәле <лошадь признают по зубам, человека – по делам>

Ат типкеһен ат күтәрер

Аты булһа, эйәре табылыр <была бы лошадь – седло найдется>

Ат туйған ерендә, ир тыуған ерендә

Аттың ҡоно тауҙа һынала, егеттең ҡоно яуҙа һынала

Атты ҡамсы йүгертә, егетте намыҫ йүгертә

Атты сыбыртҡы менән ҡыума, һоло менән ҡыу <не гони коня кнутом, а гони его овсом>

Атына көсө етмәгән тәртәһен туҡмаған

Атына ҡарап йөгө <каков конь, такова и поклажа>

Атын урлатҡас, кәртәһен нығытҡан <целы сани, а лошади пропали>

Атың барҙа – даның бар <когда имеешь коня, и мир познает тебя>

Аттың дилбегәһе кемдә – барыр юлы шунда <чей конь, того и воз>

Атым юҡ аранда – ҡайғым юҡ буранда <ни дров, ни лучины, живу без кручины>

Атына күрә арбаһы <по лошади и телега>

Атына күрә арбаһы, маҡсатына күрә самаһы <каковы сани, таковы и оглобли>

Атың арыһа – үҙеңде ғәйеплә <если конь твой устанет, себя вини>

Атың барҙа елеп ҡал, көсөң барҙа йөрөп ҡал

Атыңдан алда йүгәнеңде әҙерлә <заведи сперва хлевину, а там и животину>

Атың булһа айғыр, ят та ҡайғыр

Атың бирһәң дуҫыңа, әкрен йөрө, тип әйтмә

Атыңды көсөнә күрә йөкләт <каков конь, такова и поклажа>

Атың йөрөшлө булһа, тояҡҡа көс, ҡатының тауышлы булһа, ҡолаҡҡа көс

Аттың яҡшыһы алға сыға, егеттең яҡшыһы данға сыға <добрый конь егету славу приносит>

Ат әйләнеп төйәген табыр <и конь на свою сторону рвется>

Атың яман булһа, һатып ҡотол; юлдашың яман булһа, ҡасып ҡотол

Атһыҙ ир – ҡанатһыҙ ҡош <мужчина без коня – птица без крыльев>

Ат әйләнеп төйәген табыр, һыу әйләнеп юлағын табыр <конь, вернувшись, найдет свое стойло, вода найдет свое русло, мужчина – свою Родину>

Ат һөрөнмәй ер танымай <пока лошадь не споткнется, землю не узнает>

Ат – юртышынан, ҡатын йөрөшөнән һыналыр <коня узнают по аллюру, женщину – по походке>

Ат – юлда, батыр яуҙа һынала <коня в пути, героя в бою испытывают>

Ат яҡшыһы арҡанда, ир яҡшыһы тарханда <лучший конь – на аркане, лучший мужчина у тархана>

Ат яфаһын һабан белә < тяжесть хомута знает лошадь>

Ашаған менән мал бөтмәҫ < не жалеющий скота гостеприимством прославился>

Аш янында ат һымаҡ, эш янында ят һымаҡ <ретив к обеду, ленив к работе>

Ат ысҡынһа тотоп була, һүҙ ысҡынһа тотоп булмай <если конь сорвется, можно поймать, если слово сорвется – нельзя удержать>

Атың юғалһа ла йүгәнен ташлама <хоть и коня потеряешь, но уздечку не бросай>

Атын урлатҡас, аранын ныҡытҡан

Ашаған ат арымай, күп кешегә тарымай

Ат яманы тай менән уйнар, ҡатын яманы бай менән уйнар < беспутная лошадь за стригунком последует, а беспутная женщина – с баем>

Байҙың малын һаран ҡыҙғаныр <скотину богача скупой будет жалеть>

Байҙың мең һарығы араһында ярлының йәтим туҡтыһын бүре алған

Бай – малын, ярлы моңон һөйләр

Бай һөйәге *этн.* кусок мяса с костью, выдаваемый участникам во время коллективной помощи

Байтал бейә булғансы, башыңа сал инә <пока байтал станет кобылицей, голова хозяина сединой засеребрится>

Байтал менһәң – ҡолон юҡ; һауын мал екһәң – ҡымыҙ юҡ

Байтал сабып бәйге алмаҫ

Баҡтансыһы юҡ мал уңмаҫ, башлығы юҡ ил уңмаҫ

Балаһы атҡа менһә, атаһы ботон ҡыҫыр

Баҫымсаҡҡа баҡа ла айғыр

Баш һау булһа, мал табылыр <если есть голова, скотина найдется>

Башыма тай типмәгән <не дурак> *(об осторожном человеке)*

Башыңа тай типтеме әллә <непутевого стригун в лоб лягнул>

Бойорған мал хужаһын табыр <скотина, что тебе суждена, сама в твой дом дорогу найдет>

Бейә ҡолонон типһә лә, биртә типмәҫ <кобыла, если своего жеребенка лягнет – то не насмерть>

Бейәһенә күрә эйәһе, халҡына күрә түрәһе <по хозяину – кобыла, по народу – правитель>

Бер атҡа ике ҡамыт кейҙермәйҙәр

Бер аяҡ ҡымыҙҙың ике аяҡлыҡ еле бар

Бер ат арҡаһында мең ат һыу эскән

Бер бейәнең ике имсәге – береһе кипһә, һөтө юҡ; бер дөйәнең ике үркәсе – береһе китһә, көсө юҡ <у одной кобылы два соска, если один отсыхает, другой молока лишается; у одной верблюдицы два горба, если нет одного, другой силы лишается>

Бер ҡуй арҡаһында мең ҡуй һимергән

Бер кеше тәхеткә менһә, ҡырҡ кеше атҡа менә <если один на престол садится, то сорок уже на конях>

Бер һыйырҙың ҡойроғо йөҙ һыйырҙы бысрата

Бисәң йүнле булһа, арғымаҡҡа менерһең, әгәр йүнһеҙ булһа, гүргә инерһең <если жена хорошая, на аргамака взойдешь, если плохая, в могилу сойдешь>

Бүренән өрккән һарыҡ көтөүе кеүек <как стадо баранов> *(о неорганизованной толпе людей, слепо идущей за кем-либо)*

Бәләкәй атты маҡта, оло атты ек <маленькую лошадь ласкай, а большую запрягай>

Бәҫ ҡәҙерен белгән ҡулда ҡайсы уйнамаҫ; ат ҡәҙерен белгән ҡулда ҡамсы уйнамаҫ

Ватыҡ арбаға бишенсе тәгәрмәс <пятое колесо в телеге>

Донъя малы – дуңғыҙ ҡаны <богатство – вода; пришла и ушла>

Дуға бар йортта доға бар <тот живет в добре, у кого лошадь во дворе>

Дилбегәне ҡулда тотоу <держать бразды правления>

Дуға бөгөү *(бик ныҡ өшөү)*

Дуға менән бесән сабыу <попасть пальцем в небо>

Дуғаңа ҡарап ҡыңғырау таҡ <по одежке протягивай ножки>

Дуҫ күтәрер күңелде, мал күтәрер үлемде

Дуҫымдың кем икәнен белдем атымды юғалтҡас <друзей познают в беде>

Дүрт тояҡлы ат та һөрөнә <конь о четырех ногах да спотыкается>

Егә белһәң, шайтан да ат була, үҫтерә белһәң, шалҡан да аш була

Егәре бар ир йотта ла йүгәнен тотоп ҡалмаҫ <у трудолюбивого человека всегда благополучие>

Елгә еленләп, боҙға быҙаулау <хвастаться по пустякам>

Игендең яйын иккән белер, арбаның яйын еккән белер <наездом хлеба не напашешь>

Инле мал юғалмаҫ <клейменная скотина не теряется>

Ир аҙығы менән ат аҙығы юлда <мужчина и конь всегда в пути>

Ир намыҫы – ат бәҫе <конь – верный друг мужчин>

Ирһеҙ бисәгә, йүгәнһеҙ атҡа ышанма <женщине без мужа, лошади без узды не верь>

Ир-егеттең эсендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр <в душе егета – оседланный конь>

Ир балаға ат кәрәк, ҡыҙ балаға – ҡанат <мальчику нужен конь, девочке – крылья>

Иҫәпленең малы теүәл

Ит аҫылы – ҡарталыр, зат затына тарталыр <каков род, таков и приплод>

Ишәк маҡтанып толпар булмаҫ <выросший ишаком не станет скакуном>

Йомарт ҡулға мал керер <рука дающего не оскудеет>

Йылҡы – малдың батшаһы

Йылҡысының һаяғын алғансы, ҡуйсының таяғын ал

Йылдам атҡа ҡамсы кәрәкмәй <быстрому коню кнут не нужен>

Йылҡы – данлыҡ, ҡуй – байлыҡ <конь – слава, овца – богатство>

Йөрөй белмәгән кеше аттың арҡаһын тишер, саба белмәгән кеше ҡолағын киҫер <кто не имеет дело с конем, тот не знает его нрава>

Йыуаш аттың типкеһе ҡаты <у смирного коня пинок сильный>

Йүгән кемдә, ат шунда <у кого вожжи, у того воз>

Йүгерек атҡа ял теймәй <добрый конь отдыха не знает>

Йүләр һүҙгә йүгән юҡ <глупое слово, да не споро>

Йүгәнде тиҫкәре элмә, алғансы атың ҡасыр

Кавалерист батыр булһын, аты таҙа, матур булһын <кавалерист должен быть сильным, его конь здоровым, красивым>

Кейәү аты менән көл түкмә <на коне зятя золу не вози>

Кеше аты тирсел, кеше кейеме керсел <чужая лошадь быстро потеет, чужая одежда быстрее пачкается>

Кеше атына менмә, менһәң үкенмә

Кеше атына менгәшмә, менгәшһәң – өндәшмә

Кеше түгел, дүрт аяҡлы ат та һөрөнә <не только человек, но и конь о четырех ногах и то спотыкается>

Кешәнле ат кәрәгенән артыҡ йөрөмәҫ <спутанный путами конь далеко не уйдет>

Килендең – аяғынан, ҡуйсының – таяғынан

Кисеүҙә ат алмаштырмайҙар <на переправе коней не меняют>

Көҙ килгән ҡунаҡҡа йылҡы ҡаҙыһы, яҙ килгән ҡунаҡҡа ҡарта ярыһы <гостя, который приходит осенью, угощают конским салом, а приходящего весной – конской прямой кишкой>

Көслө менән көрәшмә, маллы менән даулашма

Көтөү аҙашмай, көтөүсе аҙаштыра <куда пастух, туда и стадо>

Көтөүҙән айырылғанды бүре алыр, халыҡтан айырылғанды гүр алыр <скотину, брошенную стадом, волк пожирает, человека, брошенного народом, могила забирает>

Күмәк ат араһында бер аттың аҡһағаны күренмәҫ <в косяке лошадей хромота одной не заметна>

Күршең бай булһа ла, егәреңә тай булһын

Күренмәҫ түңгәк ат өркөтөр <незаметная кочка коня напугает>

Күтән һурпаһы эсеү <испытывать лишения>

Көтөү ташлаған малды бүре алыр, ил ташлаған ирҙе гүр алыр <скотину, брошенную стадом, волк пожирает, человека, брошенного народом, могила забирает>

Көтөүсенең ялсыhы үлгән <вот тебе хомут да дуга, я тебе не слуга>

Кәзә билеты *уст. (эштән ҡыуылғанлыҡты күрһәткән ҡағыҙ)* <волчий билет>

Кәзә майын сығарыу <резким ударом выпучивать бицепсы>, <уморить, измотать тяжелой работой>

Кәзәне маҡта, hыйырҙы hау <козу хвали, корову дои>

Ҡабаландың аты өҙләгәр, ялҡауҙың аты hөрләгәр <у торопливого конь задыхается, у ленивого – спотыкается>

Ҡайтып килеп өйөрөн тапhа, аҙашҡан атты әрләмә <коня, нашедшего свой косяк, не ругают>

Ҡамыт ауырлығын ат белә <тяжесть хомута знает лошадь>

Ҡамытҡа ҡарап ат алмайҙар <коня не выбирают по размеру хомута>

Ҡанъяғаhы ҡаты <невезучий на охоте>

Ҡанъяғаң буш булмаhын <пусть не будет пустой твоя торока> *(пожелание охотнику)*

Ҡапҡан hайын ҡалъя булмай <не все коту масленица>

Ҡатын – йөрөшөнән, ат юртышынан hыналыр <женщину узнают по походке, а коня – по аллюру>

Ҡарағайға ҡарап тал үрсей, ҡараусыға ҡарап мал үрсей

Ҡарамағандың ҡатыны ташлар, баҡмағандың малы ташлар <не ухаживающего мужа бросает жена, а не ухаживающего хозяина – скот>

Ҡарыуға ҡарыу – ҡарт атҡа ябыу

Ҡарт алаша бураҙна боҙмай <старый конь борозды не портит>

Ҡасырҙан *(айғыр менән ишәктән булған хайуан)* ат та тыумаҫ, ишәк тә тыумаҫ <от лошака ни лошадь, ни осел не родится>

Ҡойошҡанға ҡыҫылған тиҙәк кеүек <к каждой бочке затычка>

Ҡолан таҙа <совершенно здоровый>

Ҡолон майы өҫтөндә (*йәки* төшмәгән) <неокрепший, незакаленный, неиспытавший невзгод>

Ҡолон үҫтергән – ат менгән <будешь за жеребенком охотиться – на коне ездить будешь>

Ҡолоҡ бейәнең ҡолоно елгә ҡаршы түҙмәй <жеребенок у кобылы бывает очень слабый>

Ҡолонло бейәнән ҡойо hыуы ла артмай

Ҡолон майы төшмәгән <неокрепший, незакаленный, неиспытавший невзгод *(о молодых)*>

Ҡорап-ҡорап тун тектем, ҡолонло бейәгә биргеhеҙ

Ҡорсаңғы ат эйәр һалдырмаҫ

Ҡорсаңғы атты себен дә талай

Ҡороҡ тотоу *этн.* выбор коня во время свадьбы

Ҡотло ҡунаҡ төнәһә, ҡуйың игеҙ табыр, ҡотһоҙ ҡунаҡ төнәһә, ҡуйыңды бүре алыр

Ҡош – һауала, ат – тауҙа, егет яуҙа һынала <птица – на небе, конь – в горах, егет в боях испытывается>

Ҡоштоң һөтө юҡ, йылҡының үте юҡ

Ҡуй өҫтөндә турғай оялай <изобилие, большой достаток>

Ҡуйсыһы күптең ҡуйы харам үлер

Ҡул-ҡамытлыҡ булыу <быть помощником>

Ҡул-ҡамытлыҡ итеү <помогать, оказывать помощь>

Ҡунаҡтың аты ла, эте лә ҡунаҡ <у гостя и лошадь, и собака гости>

Ҡурйын тулыу <быть довольным своим состоянием>

Ҡуянға йән ҡайғыһы, аусыға мал ҡайғыһы <собака за зайцем, а заяц за волей>

Ҡыҙлы өйгә ҡырҡ ат бәйләнер <к воротам дома, где девушка, сорок лошадей будет привязано>

Ҡымыҙ ҡылыҡ арттырыр, юҡ малды таптырыр <кумыс одурманивает, заставляет стать щедрым>

Ҡымыҙҙы кем яратмай, ҡыҙҙы кем һоратмай <кто не любит кумыс, да кто не хочет сосватать девушку>

Ҡымыҙ ҡылыҡ арттырыр, ҡуйың муйынын саптырыр <кумыс веселья прибавляет, нового угощения искать заставляет>

Ҡымыҙ – тилертә, һаумал һимертә <от кумыса пьянеют, от хаумал жиреют>

Ҡырғының *(ҡырҙан, ситтән килгән ят кеше)* аты уҙғансы, күршенең тайы уҙһын <лучше соседний стригунок опередит, чем чужой конь>

Ҡымыҙҙың башы майҙа, ахыры көҙгө айҙа <начало кумыса в мае, окончание осенью>

Ҡылығын белмәгән малға яҡын барма <не подходи к борову, не зная норову>

Мал тотҡан – ҡалъя тотҡан <кто разводит скот, тот мясо жует>

Мал да ашаған еренә ҡайта <и собака помнит, кто ее кормит>

Мал аҙығы – йән аҙығы, мал асыуы – йән асыуы <скотину водить – не разиня рот ходить>

Мал – ҡолондан, аҡса – тиндән <скотина собирается из жеребят, деньги скапливаются из копеек>

Матур сәсә – тайҙыҡы, матур бисә – байҙыҡы <красивые бабки – у иноходца, красивые жены – в объятиях бая>

Менгәшеп яу сабып булмай

Мал баһаһын малсы белә <цену скота знает тот, кто его держит>

Мал ҡазаһы – баш ҡазаһы түгел; мал табыла, баш табылмай

Мал көрлөгө көтөүсенән <упитанность стада – от пастуха>

Мал эйәһенә оҡшамаһа, харам була <с кем поживешь, у того и переймешь>

Мал табылыр – иҫәп кәрәк <скот-то найдется, да счет нужен>

Мал табылыр – иҫәнлек кәрәк <богатство найдется – лишь бы здоровье было>

Малы булһа – көтөүсеһе табылыр <была бы скотина – пастух найдется>

Муйыны булһа, ҡамыты табылыр <была бы шея, хомут найдется>

Муйынына ҡамыт кейеү <взять на себя бремя>

Муйынына ҡамыт теймәгән <ни разу не запряженный>; <не испытавший тяготы жизни>

Ни арба, ни сана <распутица, бездорожье>

Нуҡта күрмәгән <пасущийся на воле *(о скотине)*>

Оронсаҡ атҡа ял юҡ <медлительный конь не заслуживает отдыха>

Өҫтәү алған эт менән, өҫтәү биргән ат менән <за придачу получил собаку, за прибавку дал коня>

Салан *(яй йөрөүсән)* ат менән сәфәр сыҡма <медленным конем на путешествие не езди>

Сананды йәй әҙерлә <готовь сани летом, а телегу – зимой>

Сөймәгә бирһәң – ҡарсығә бир, ҡанъяғанды буш итмәҫ <если пустишь ястреба на дичь, торока твоя пуста не будет>

Сығынсы ат тәртә һындыра <строптивый конь и оглобли ломает>

Сығынсы ат юлды боҙа, уңмаған кеше эште боҙа <плохая лошадь дорогу портит, плохой человек все общество портит>

Тай ат булғансы, эйәһе эт булыр <пока стригунок станет конем, хозяин в собаку превратится>

Тай – атҡа, ат моратҡа еткерә

Тай мендереү <отправить куда-то>

Тайҙы өйрәтә белмәһәң, сығынсы бер ат була

Тайға менгән атты һағыныр

Таҡымлы кеше аттан ҡоламаҫ

Тарпан атҡа – бер арҡан <лошади тарпан – один аркан>

Теҙгенде ҡулға алыу <взять власть в свои руки>

Тибешкән тип бейәнән биҙмә <не стоит разочароваться в кобыле за то, что она бодлива>

Толпарҙың үҙ тояғы үҙенә еңел <свое копыто тулпару легко>

Теҙгенде ҡыҫҡа тотоу <крепко держать в руках кого-то>

Туй һебәһе *этн.* приз в виде куска баранины

Туй һылтауынан тайлы булдым <под шумок свадьбы стригунка приобрел>

Тун күрмәгән тун күрһә, ҡаға-ҡаға бөтөрөр, ат күрмәгән ат күрһә, саба-саба үлтерер <кто никогда не имел дело с конем, тот не будет дорожить им>

Тернәксел кеше *(йүнсел, тырыш)* ат тиҙәген алтын итер <предприимчивый человек из ничего делает что-то>

Төкөшә торған тәкәгә хоҙай мөгөҙ бирмәгән

Тыумаған тайға нуҡта үрмә <не плети недоуздок для неродившегося жеребенка>

Уҙамтан ат тәртә һындырыр <ретивый конь портит оглобли>

Уҙған ямғыр артынан ямсы менән сапмайҙар

Урта тиле атын маҡтар, үтә тиле ҡатынын маҡтар <средний дурак восхваляет коня своего, а круглый дурак жену свою>

Уңмаған ат тәртә һындыра, уңмаған ҡатын ирен туҙҙыра <непутевый конь портит оглоблю, бестолковая жена мучает мужа>

Уртаҡ малды эт тә еймәҫ <бесхозную скотину даже собака не ест>

Үҙе һалынҡының *(йүнһеҙҙең)* аты абынҡы <у медлительного и конь спотыкается>

Үлгән һыйыр һөтлө була

Үмгәнгә һалыу *(тырышлыҡ күрһәтеү, көс һалыу)* <прилагать усилия, очень стараться>

Һарттың – кейгәнен, башҡорттоң менгәнен ал <у сарта – одежду, у башкира коня покупай>

Һаумал эсһәң һимертә, ҡымыҙ эсһәң тилертә

Һаумал эсһәң, ҡымыҙ юҡ; байтал менһәң, ҡолон юҡ <если будешь пить хаумал, то кумыса не будет, а если будешь использовать не жеребившуюся кобылу, то не будет жеребенка>

Һигеҙ арыҡ һарыҡ һуйғансы – бер һимеҙ һарыҡ һуй <чем резать восемь худых баранов, режь одного жирного>

Һимеҙҙең аяғы һигеҙ <у жирной скотины восемь ног>

Һин дә мулла, мин дә мулла – атҡа бесән кем һала? <и ты мулла, и я мулла, а кто лошади сена даст?>

Һоло ашамаған арғымаҡ япраҡҡа моң булыр <аргамак, который не ест овес, испытывает потребность в листве>

Һыбай егет юл һорамаҫ <верховой егет дорогу не просит>

Һыбайға юл күп <всаднику везде дорога>, <у всадника много дорог>

Һыйыр ҡото елендә, елененән алда телендә

Һыйыр тулаһа, аттан яман <если корова начнет брыкаться, то становится намного страшнее, чем конь>

Һыйыры барҙың һыйы бар

Һыйырҙың һөтө тағараҡта

Һыйырҙың һөтө телендә <молоко коровы – на её языке>

Һыйырға ябыу килешмәй

Һыйыр тулап, ат булмаҫ; ҡатын тулап, баш булмаҫ

Һыйыр һауған кәзә һауғандан һөт һораған

Һуңғы аттың йөгө ауыр була <ноша последнего коня бывает всегда тяжелее>

Шауҡал ат – көслө, шауҡал һыйыр һөтлө була <костистая лошадь бывает сильной, а костистая корова – молочной>

Һыйыр ҡойроғо тейеү *(шаяр.)* аҙыҡҡа һөт-май йоғоу

Һыйыр мөгөҙөнә элер нәмәһе юҡ *(бик ныҡ ярлы, кейем-ҡаралдыһы бөтөнләй юҡ)*

Һыуҙан ҡурҡҡан тағараҡҡа төшөп үлгән

Эйәһенә күрә бейәһе <по хозяину и кобыла>

Эйәһеҙ атты ил алыр <бесхозное имущество присваивается всеми>

Этеңә ышанма, атыңа ышан <не верь собаке своей, верь лошади своей>

Әкрен йөрөһәң, бай тиргәй; шәп йөрөһәң, ат тирләй <медленно ходить – хозяин ругает, быстро ходить – конь потеет>

Юл башы – ат тояғында, һүҙ башы – эт ҡолағында <начало пути – в копытах лошади, начало слова – в ушах собаки>

Юрға мengән – юлдашына ҡарамаҫ <севший на иноходца со спутником разлучится>

Юрғаға менгән аллаһын онотҡан <севший на иноходца про бога забудет>

Юрғаның тире кипмәҫ, иркәнең йәше кипмәҫ <у иноходца пот не просыхает, у неженки – слезы>

Юртаҡ аттың тояғы ике <у рысистого коня двое копыт>

Юртаҡ атҡа юл ҡыҫҡа <рысистому коню дорога коротка>

Юртаҡтың баһаһы юғары, айғырҙың даны юғары <у скакуна цена высокая, у жеребца слава высокая>

Ял-ҡойроғо матур тип, ябыҡ айғыр алма <не покупай клячу за то, что грива хороша>

Яман айғыр алһаң, өйөрөң таралыр <если купишь плохого жеребца, косяк разойдется >

Яман айғыр алһаң, яуға менер ат тыумаҫ <если купишь плохого жеребца, не будешь иметь верхового коня>

Ябаға тайҙың тире асы, яман байҙың теле асы <у жеребенка-стригунка пот соленый, а у злого бая язык острый>

Ябағаны хурлама, яҙға сыҡһа, тай булыр <худого стригунка не хули; весну перенесет – к лету лошадью станет>

Яҡшы ат бәйгелә үлер <хорошая лошадь на скачках умирает>

Яҡшы ат башын нуҡта киҫер, фәҡир башын юҡ киҫер <голову хорошего коня режет недоуздок, а бедного человека – нужда>

Яҡшы ат алыҫтан алдыра <хороший конь достигает успеха от далекой дистанции>

Яҡшы аттың да бер алама ҡылығы була <и у хорошего коня есть плохие привычки>

Яҡшы атҡа ҡамсы кәрәкмәй, уңған ҡыҙға яусы кәрәкмәй <хорошему коню кнут не нужен, трудолюбивой девушке сват не нужен>

Яҡшы атҡа бер ҡамсы, яман атҡа мең ҡамсы <хорошему коню достаточно удара, а плохому – сто не поможет>

Яҡшы атта ла бер холоҡ була <и у хорошего коня бывают нежелательные привычки>

Яҡшы аттың башы ҡашҡа <обычно хороший конь бывает с белой отметиной на лбу>

Яҙға сыҡҡан атты яуҙан да йәлләмә; көҙгә кергән атты кейәүеңә лә бирмә <весеннюю лошадь и для военного похода не жалей, осеннюю лошадь и зятю не одалживай>

Яҡшы балаға ата малы кәрәкмәй, мал ҡалдырыу кәрәкмәй <хорошему сыну ни к чему отцовское богатство, ни к чему оставлять наследство>

Ялҡау атты ял баҫыр <ленивый конь шерстью обрастает>

Ялҡауҙан ат алма – ялҡау булыр <у ленивого коня не покупай; ленивым окажется>

Яҡшы аға ил көтһә, илгә дуға тултырыр, яман аға ил көтһә, илгә ғауға килтерер <если страной правит хороший правитель – благополучие, если плохой правитель – то одно разорение>

Яман ат, яман ҡатын – ирҙе шулар ҡартайтыр <плохой конь да плохая жена – вот кто старит мужчину>

Яман ат тәртә һындырыр, яман ҡатын өйөн туҙҙырыр < плохой конь оглобли ломает, дурная жена на муже зло срывает >

Яман айғыр өйөрһәк *(өйөр менән йөрөргә яратыусан)* <дурной жеребец бежит к косяку>

Яман атты ял баҫа, тарҡау илде яу баҫа <плохой конь гривой обрастает, на разобщенную страну враг нападает>

Яман кешенән ат алғансы, яҡшы кешенән ҡырҡмыш ал <чем брать коня у плохого человека, лучше возьми стригунка у хорошего>

Яман хәбәрҙең ат-эйәре тағыулы <добрая слава лежит, дурная бежит>

Яман һыйыр ярҙа быҙаулар <плохая корова на берегу телится>

Яман эйәрҙән яйҙағым яҡшы <чем иметь плохое седло, лучше ездить без него>

Яман атҡа ял үҫһә, янына ҡуржын бәйләтмәҫ <быть высокомерным>

Ям сабыу *(ялланып почта йәки кеше йөрөтөү)* <ямская гоньба>

Яңғыҙ бейә һаба тултырмай <молоком одной кобылицы и хаба не заполнится>

### Хайуандар исеме менән аталып йөрөтөлгән ун ике йыллыҡ йыл иҫәбе (мөсәл)

| Башҡортса исеме | Урыҫса исеме | XXI быуатта тап килгән йылдар | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1. Сысҡан йылы | год Мыши | 1996 | 2008 | 2020 | 2032 | 2044 | 2056 | 2068 | 2080 | 2092 |
| 2. Һыйыр йылы | год Быка | 1997 | 2009 | 2021 | 2033 | 2045 | 2057 | 2069 | 2081 | 2093 |
| 3. Барыс йылы | год Барса | 1998 | 2010 | 2022 | 2034 | 2046 | 2058 | 2070 | 2082 | 2094 |
| 4. Ҡуян йылы | год Зайца | 1999 | 2011 | 2023 | 2035 | 2047 | 2059 | 2071 | 2083 | 2095 |
| 5. Аждаһа йылы | год Дракона | 2000 | 2012 | 2024 | 2036 | 2048 | 2060 | 2072 | 2084 | 2096 |
| 6. Йылан йылы | год Змеи | 2001 | 2013 | 2025 | 2037 | 2049 | 2061 | 2073 | 2085 | 2097 |
| 7. Йылҡы йылы | год Лошади | 2002 | 2014 | 2026 | 2038 | 2050 | 2062 | 2074 | 2086 | 2098 |
| 8. Ҡуй йылы | год Овцы | 2003 | 2015 | 2027 | 2039 | 2051 | 2063 | 2075 | 2087 | 2099 |
| 9. Маймыл йылы | год Обезьяны | 2004 | 2016 | 2028 | 2040 | 2052 | 2064 | 2076 | 2088 | 2100 |
| 10. Тауыҡ йылы | год Курицы | 2005 | 2017 | 2029 | 2041 | 2053 | 2065 | 2077 | 2089 | 2101 |
| 11. Эт йылы | год Собаки | 2006 | 2018 | 2030 | 2042 | 2054 | 2066 | 2078 | 2090 | 2102 |
| 12. Дуңғыҙ йылы | год Свиньи | 2007 | 2019 | 2031 | 2043 | 2055 | 2067 | 2079 | 2091 | 2103 |

**ЙӨКМӘТКЕҺЕ**


Баш һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5
Һүҙлектең төҙөлөшө . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 11
Шартлы ҡыҫҡартмалар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 12
Файҙаланылған ғилми әҙәбиәт һәм һүҙлектәр . . . . . . . . . . 12
Башҡорт алфавиты . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 14
Башҡортса-урыҫса малсылыҡ терминдары һүҙлеге . . . . . . . 15
Урыҫса-башҡортса малсылыҡ терминдары һүҙлеге . . . . . . . 91
Построение словаря . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 92
Условные сокращения . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 93
Урыҫ алфавиты . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 94
Ҡайһы бер йорт хайуандарының, ҡош-ҡорттарҙың ғүмер
оҙонлоғон күрһәткән йәҙүәл . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 139
Башҡортса-урыҫса анатомия терминдары . . . . . . . . . . . . 139
Урыҫса-башҡортса анатомия терминдары . . . . . . . . . . . . 142
Йылҡы малының төҫ атамалары . . . . . . . . . . . . . . . . . . 144
Эйәр-өпсөн, ат егәре атамалары . . . . . . . . . . . . . . . . . . 147
Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 150
Хайуандар исеме менән аталып йөрөтөлгән ун ике йыллыҡ
йыл иҫәбе (мөсәл) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 166

Справочное издание

**ЗАЙНУЛЛИНА Гаухар Динмухаметовна**

**БАШКИРСКО-РУССКИЙ, РУССКО-БАШКИРСКИЙ ТЕРМИНОЛОГИЧЕСКИЙ СЛОВАРЬ ПО ЖИВОТНОВОДСТВУ**

Редакция мөдире *Ринат Камалов*
Мөхәррире *Зөлфиә Ҡарабаева*
Техник мөхәррире *Венера Абдрахманова*
Корректорҙары *Гөлсинә Попова, Дилә Аптекова, Альбина Баязитова, Ирида Садыкова, Айгуль Черепкова*

Йыйырға бирелде 23.10.06. Баҫырға ҡул ҡуйылды 27.11.06. Ҡағыҙ форматы 84×108 1/32. Офсет ҡағыҙы. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб.8,82. Шартлы буяу отт. 9,03. Иҫәп-баҫма таб. 8,80. Тиражы 2000 дана. Заказ № 1.0146.06.

Башҡортостан Республикаһының
«Башҡортостан "Китап" нәшриәте» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Башҡортостан Республикаһының
«Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.